**ИҒТИБАР! 1 июлдән сентябргә тиклем 2010 йылдың тәүге яртыһына ваҡытынан алда "Киске Өфө"гә яҙылыу иғлан ителде. Йәғни ошо ике ай эсендә гәзитебеҙгә элекке хаҡтар менән: 50665 индекслыһына - 294 һум 84 тингә, 50673 индекслыһына - 282 һум 66 тингә яҙылыу мөмкинлеге бар. Ә сентябрҙә хаҡтар бер аҙ ҡиммәтләнер, моғайын. Бергә ҡалайыҡ, бергә уйлайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ!**


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

18 - 24 ИЮЛЬ (МАЙАЙ) 2009 ЙЫЛ

www.kiskeufa.ru

№29 (343)



## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Телевизорымды... балкондан бәрерҙәй булам — 2



Халыҡ йыйыны - Хәйбулла районы Вәлит ауылы янында... — 5



Башҡортса Ҡөрьән китабы йәшәһә... телебеҙ ҙә, тимәк, милләтебеҙ ҙә йәшәйәсәк — 8-9



Кеше хоҡуҡтары боҙола икән, мин яҡлаусы ролендә инәм — 11



ТВ программа — 14


ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

**Гәзиттең ошо һанының 8-9-сы биттәрендә "Монолог" рубрикаһында сығыш яһаусы яҙыусы Мәүлит Ямалетдин дини, милли рухтар айырымлығы хаҡында әйтә. Шунан сығып һорау:**

## Халҡыбыҙҙың милли рухынан дини рухының айырылыу сәбәптәрен нимә күрәһегеҙ?

*Әмирхан САЛАУАТОВ, тарих уҡытыусыһы:*

- Рәсәйҙәге Октябрь инҡилабы был йәһәттән үҙ маҡсатына иреште. Совет осоронда беҙ генә түгел, Рәсәйҙәге бик күп милләттәрҙең милли рухы диненән айырылды. Беҙ, бөгөн килеп, халҡыбыҙҙың милли рухын күтәрергә теләйбеҙ икән, динһеҙ бер нәмә лә килеп сыҡмаясаҡ. Әле килеп дингә ҡайтыу мөмкинлегебеҙ барлыҡҡа килгәс, тағы бер ҙур проблема килеп тыуҙы. Ул глобаллəшеү тип атала. Бының төп асылы - электрон саралар аша кешеләрҙең милли һәм дини рухын юйып, дөйөм бер массаға әүерелдереү. Беҙҙә глобаллəшеүҙең өсөккө өлөшөн генә күрһәтәләр: иҡтисад, сәнәғәт һәм финанс. Ә бит глобаллəшеү иң беренсе нәүбәттә милли рухты, динде юҡ итеүгә йүнәлтелгән. Быға ҡаршы нимә тора ала? Дәүләтме? Юҡ. Берҙән-бер системалы көс - дин генә быға ҡаршы тора ала. Минә Рәсәй етәкселәренең, башҡа билдәле кешеләренең дингә ҡарата мөнәсәбәте оҡшай. Бигерәк тә христиан диненә мөнәсәбәте. Республикалар, өлкәләр, районлар кимәлендәге етәкселәр улардан үрнәк алһа ине.

*Закирйән ӘМИНЕВ, ғилми хеҙмәткәр:*

-Ленин бабай "Дин тотоу - һәр кемдең үҙ эше", тип әйтһә лә, совет осоронда дин тыйып килендә. Әммә, ниндәй дәһрилəр заманы килһә лә, динде халыҡ барыбер онотманы. Никаһһыҙ туй булманы, мулланан исем ҡуштырҙылар, йыназа уҡыттылар. Урыҫтар "православие беҙгә үҙ-үҙебеҙ булып ҡалырға ярҙам итте", тиһә, беҙҙең халыҡтың инаныуында элек-электән милләт төшөнсәһе мосолманлыҡ менән тигеҙ ҡуйылған. Әлбиттә, беҙҙең мосолманлыҡ башҡаларҙан айырыла, беҙ уны "башҡортлоҡ" тип аңлайбыҙ. Мосолманлыҡ беҙгә ғәрәп мосолманлығы булып йәбештерелмәгән, ул - үҙебеҙҙеке. Тимәк, беҙ үҙебеҙҙең боронғо асылыбыҙға ҡайтырға теләһәк, динебеҙгә ҡайтырға бурыслыбыҙ.

**Әмир ҒҮМӘРОВ яҙып алды.**

АФАРИН!

# СИБАЙ ЕГЕТЕ ИҘЕЛ...

## күтәрҙе данын илдең

**Яңыраҡ Көньяҡ Кореяның баш ҡалаһы Сеулда уҙғарылған кунг-фу буйынса XXII Донъя кубогында Сибай ҡалаһы егете Иҙел УРАҘГИЛДИН донъя чемпионы исеменә лайыҡ булды. Чемпионат һәм был үҙенсәлекле спорт төрө тураһында еңеүсенең үҙенән һөйләтәйек әле. Һүҙ - Иҙелгә:**



Юлай КӘРИМОВ фотоһы.

- Чемпионаттың тәүге өлөшө Сеулда, финал өлөшө Макро утрауында уҙҙы. Унда 20 илдән 500 спортсы ҡатнашты, Рәсәй данын Башҡортостан спортсылары яҡланы.

Минен ҡул һуғышы сәнғәте менән шөғөлләнгәнемде белгәс тә, һәр яңы танышым оҫта һуғыша белеүемде ҡайҙа ҡулланыуымды һораша, ниндәй ҡул һуғышы төрө йәки йүнәлеше яҡшыраҡ икәнен белешә башлай. Бындай һорауҙарға тиҙ генә яуап биреүе мөмкин түгел, яуапты өҙәйлы һәм ныҡышмалы күнекмәләр аша ғына табырға була. Мине 5 йәшлек сағымда атайым һәм әсәйем урамда үҙемде башҡаларҙан яҡлай алһын өсөн ҡалалағы "Ҡара аждаһа" клубына алып килде. Бәхетемә күрә, бында мин ҡул һуғышы сәнғәтенең ысын тәғәйенләнешен, уның рухи нигеҙен һәм эске мәғәнәһен һаҡлап ҡала алған кешеләрҙә осраттым. Ябай булмаған был һуғыш төрө серҙәренә мине донъя чемпионы, юғары категориялы тренер Батыр Хәсәйен улы Йәндәүләтов төшөндөрә башланы. Көн һайын күнекмәләргә 4-5 сәғәт, ҡайһы саҡ унан да күберәк ваҡыт бүләм. "Ҡара аждаһа" клубында 200-ҙән ашыу бала шөғөлләнә, улар көнсығыш һуғышының төрлө төрҙәре һәм йүнәлештәре буйынса дәрестәр ала.

Был спорт төрөндә ниндәйҙер техника өйрәнеү менән бергә яңы сифаттарынды асаһың, үҙеңдең эмоцияларыңды контролдә тоторға өйрәнәһең. Кунг-фуны мин рухи һәм физик камиллыҡҡа өлгәшеү ысулы итеп ҡарайым. Минең уйымса, ул башҡа спорт төрҙәре кеүек, кешене мораль һәм физик яҡтан зәғифләмәй, ә йәшерен мөмкинлектәрәнде белергә һәм тормошҡа ашырырға ярҙам итә. Шуға ла ярыштарҙа иң эффектлы стилде белгән спортсы түгел, ә үҙен еңеүгә көйләй алғаны еңеү яулай. Кунг-фу миңә тормошта килеп тыуған һәр ситуацияны дөрөҫ баһаларға һәм ҡарар ҡабул итергә лә ярҙам итә.

**Шулай итеп...**

**Көнсығыш ҡул һуғышы төрҙәренең күбеһе үҙ-үҙеңде һаҡлау түгел, ә үҙеңдең эске мөмкинлектәреңде асыҡлау һәм камиллаштырыу ысулы булараҡ барлыҡҡа килә. Бер билдәле вьетнам ҡул һуғышы оҫтаһы "Фәлсәфәһеҙ ҡул һуғышы сәнғәте ябай ҡан ҡойошҡа әйләнә" тигән. "Ҡул һуғышы сәнғәтенә һаҡланыу сараһы системаһы итеп кенә ҡарау ҙур яңылышлыҡ", ти Иҙел дә. Шуныһы ҡыҙыҡ, гуманизм һәм йәллəү төшөнсәләренә урын булмаған ҡул һуғышының башҡа төрҙәренән айырмалы рәүештә, кунг-фу беҙҙең милләтебеҙ фәлсәфәһе һәм асылына ла тап килә, тимәк, башҡорт егетенең был спорт төрөнә тартылыуы юҡҡа түгел. Иҙелгә тағы ла юғарыраҡ үрҙәр һәм еңеүҙәр теләп ҡалабыҙ.**

***✓ Гитлерҙы Хоҙай беҙгә бушҡа ғына ҡаршы сығармаған. Атеистик юл һайлаған өсөн ул беҙҙең илгә яза ебәргән. Ғайса бәйғәмбәрҙе тәрегә ҡаҙаҡлаған өсөн йәһүдтәр миллионлап концлагерҙар мейесенән үтеп, теге донъяға күскән.***



*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

**Бер суфыйға Хоҙай төш күрһәтә, имеш: батша ожмахта ләззәтләнә, ә дәрүиш тамуҡта яна. Төш күреүсе ҡыҫҡырып ебәргән: "Был нимә, мин бит һәр саҡ киреһенсә булыр тип уйланым". Уға Хоҙай шулай яуаплаған: "Батша ожмахҡа шуға эләкте, сөнки ул дәрүиштәрҙе ихтирам итте. Ә дәрүиш батшаларға яҡынларға теләгәне өсөн тамуҡҡа ташланды".**

# ТАМУҠ УЛ - НАҘАНЛЫҠ!

Ошо ҡыҫҡа ғына миҫалда бөтә Ҡөрьән, Инжил, Тәүратта ҡыҙыл еп менән үткәрелгән Хәҡиҡәт ята - ысын мосолман динһеҙ батшаларҙың дуҫы булырға тейеш түгел. Ул көфөр батшаларҙы, етәксеһәрҙе фаш итергә бурыслы.

Суфыйҙар бер ҡалып эсендә генә тормай. Улар төрлө сүрәткә инеүе ихтимал. Мәҫәлән, Иван Грозный Псков, Нарва ҡалалары буйлап үҙенең опричниктары менән каратель экспедицияға сыҡҡан. Тегендә 50 баярҙың башын киҫә, бында 70 баярҙың йәнен ала. Уның юлына алама ғына кейенгән бер суфый килеп баҫа. Ҙур итле һөйәк тотҡан да, батшаға ҡарап кимерә икән. "Эй, холоп, нинә бөйөк ураҙа мәлендә ит ашайһың?" - тип һораған унан Иван Грозный. "Һин кеше баштары ашап йөрөгәндә минә ит ашарға ярамаймы?" - тип яуаплаған уға ярлы мосафир. Берәүҙән дә ҡурҡмаған Иван Грозный суфыйҙан ҡото осоп, ҡанлы экспедицияһын кире борорға мәжбүр булған.

Яхъя Харун исемле мосолман ғалимы белдереүенсә, планеталағы 20 иң бай кеше 2,5 миллиард кешенең өлөшөн яҫтап йәшәй. Бына ни өсөн Ерҙә баланс юҡ. Сөнки байҙар өлөш сығармай, ярлыларҙың хәленә инмәй. Хәленә инер ине, Хоҙай ҡанундарын белмәй. Шуға күрә нисек кенә батшаларға йә байҙарға яҡынларға тырышма, тормошоң алға бармаясаҡ. Мөхәммәт бәйғәмбәр тиккә әйтмәгән: "Был тормошта өс әйбер һәләкәт килтерә: уҫаллыҡ, мәсхәйлек һәм тәкәбберлек"

Суфыйҙар әйтеүенсә, Гитлерҙы Хоҙай беҙгә бушҡа ғына ҡаршы сығармаған. Атеистик юл һайлаған өсөн ул беҙҙең илгә яза ебәргән. Ғайса бәйғәмбәрҙе тәрегә ҡаҙаҡлаған өсөн йәһүдтәр миллионлап концлагерҙар мейесенән үтеп, теге донъяға күскән. Был хаҡта Ҡөрьән Кәримдә ишара бар. Ул аятты килтермәйем, миләттәштәр үҙҙәре табып уҡыһын.

"Тамуҡ ул - наҙанлыҡ" тигән Шамбала уҡытыусылары. Белемгә ынтылмаһаҡ, Ерҙә тамуҡ көсәйгәндән-көсәйәсәк. Белем - тик академик белем түгел әле...

**Ташбулат УСМАНОВ.**



*ИШАРА*

# ТЕЛЕВИЗОРЫМДЫ...

## балкондан бәрерҙәй булам



**Көрсөк тә көрсөк тип һөйләнеүҙәр мине лә ҡаушатып ҡуйҙы. Бүтәндәрҙең ҡайғыһын үҙемдеке итеп ҡабул итергә өйрәнгәс ни, һәр кем өсөн бошоноп тик ултырам. Эшһеҙ ҡалғандарҙы йәлләйем. Шуға ла шаян һүҙҙәр һөйләү ҙә бик урынлы булмаҫ, тип уйланым да... барыбер һеҙҙе бер көлдөрөп алырға булдым әле.**

Бер кафела ике һабаҡташ осрашҡан, ти. Береһе мәктәптә гел "бишкә" уҡып, һуңынан юғары белем алып, яуаплы ғына урында эшләп йөрөүсе кеше, ә икенсеһе - "икеле тоҡсайы", мәктәптә көсхәл менән тамамлаусы. Беренсеһе таушалған ғына костюм кейгән, ә икенсеһе бик ыҡсым, үҙенә генә үлсәп тегелгән ҡупшы кейемдә, ти. Беренсеһе икенсеһенә сәләм биргән дә, аптырап: "Кайҙа эшләйһең?"- тип ҡыҙыҡһынған. Ә "икеле тоҡсайы": "Гипнозсы һәләтем асылды бит, ҙур сәхнәләрҙә, стадиондарҙа бик унышлы сығыштар яһайым," - тип яуаплаған. Отличник: "Кит, булмаҫ, ышанмайым,"- тип ҡул һелтәгән. "Ышанмаһаң, һынап ҡарайыҡ", - тигән "икеле тоҡсайы". Бына улар урамға сыҡҡан һәм отличник: "Әйҙә, ошо өйҙөң 5-се ҡатындағы балконға шәп-шәрә бер ҡатын сығып баҫһын",- тип көлгән. Гипнозсының шул балконға саҡ ҡына ҡарашын төбәп тороуы булған, ул балконға яп-яланғас бер һылыу сығып баҫҡан да, йылмайып, быларға ҡул болғаған, ти. Отличник: "Юҡ, был тик осраҡлы тап килеү генә, ышанмайым,"- тип ныҡышҡан. "Улайһа, тағы ла һына," - тигән "икеле тоҡсайы". Ары китеп, тағы ла бер өй ҡаршыһына туҡтағандар былар. Отличник: "Әйҙә, ошо 3-сө ҡаттағы балконға кейемһеҙ ир кеше сыҡһын," - тигән. Гипнозсының саҡ ҡына төбәлеп ҡарап тороуы булған, балконға япяланғас бер ир сығып та баҫҡан, ти. Отличник: "Яланғас ҡыҙыҡай сығып баҫа икән, уның артынса ир кешенең сығыуы пүстәк ул,"- тип, тағы ҡул һелтәгән. Ары китәләр былар. Шунда отличник, ауыр һынау уйлап таптым, тип шатланып ҡыскырып ебәргән хатта һәм: "Әйҙә, ошо өйҙөң 9-сы ҡатынан телевизор ырғытһындар," - тигән. Гипнозсы ҡарашын 9-сы ҡатҡа йүнәлткән. 3, 5, 10 минут үткән - бер кем дә бер ни ҙә ырғытмай, ти. "Хәҙер, хәҙер,"- тип, гипнозсы устарын асып, ҡулдарын бер балконға йүнәлткән дә, ҡатып ҡалған. Тағы ла күпмелер ваҡыт үткән. Бына бер саҡ балконға ябыҡ, йонсоу ғына бер ир сығып баҫҡан да: "Минең телевизорым юҡ шул,"- тип ғәфү үтенгән, ти...

Был көләмәсте иҫкә төшөрөүемдең сәбәбе - минең телевизорым бар, тип әйтмәксемен. Кистәрен эштәремде тамамлап, матур ғына берәй тапшырыу ҡарап, ял итәйем, тип, шул йәшникте ҡабыҙһам, уны 6-сы ҡаттан ырғытҡым килә лә тора. Ул атыш, ул шартлау, ул шәрә ҡыҙыҡайҙар... Агрессия, секс, триллер, боевик... Әлбиттә, үҙебеҙҙең БСТ каналына ҡағылмай был һүҙҙәр. Ә шулай ҙа БСТ-ла сәғәт киске 11-ҙән һуң һәйбәт кенә нәфис фильмдарҙы һайлап күрһәтһәләр, Мәскәү каналдарын асып та тормаҫ инек, тием инде...

**Әйткәндәй, ошо көндәрҙә төпкөл ауылдарҙа ла цифрлы телевидение ҡараһындар өсөн яңы эш башлайбыҙ, тип сығыш яһаны РФ Президенты. Техник мөмкинлектәрҙе яҡшыртыу менәнме ни, иң тәүҙә халыҡ ҡарарлыҡ, әхлаҡлы, фәһемле, мауыҡтырғыс, ысын мәғәнәһендә кәрәкле тапшырыуҙар булдырырға, уларҙы ижад итерлек журналистар табырға кәрәк бит әле.**

**Фәүзиә ЯХИНА.**

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

# ҺОРАУ БИРМӘЙ ГЕНӘ...

## яҡшы яуап таптым

Бер көн ҡыҙыҡ хәлгә тарыным әле. Почтаға инһәм, яңы ғына ремонт яһап, орнаменттар урынына күп итеп "Почта России" тигән яҙыуҙар элгәндәр. Сираҡҡа баҫтым да, бүтәндәр ҙә иштерлек итеп, шул яҙыуҙарҙы ҡыҫҡырып уҡыным һәм "Почта Башкортостана" тип, ул һүҙ яҙылмаһа ла өҫтәп ҡуйҙым. Айырым баҫым менән әйткәнмемә икән, минән бер кеше аша артта баҫып торған оҙон танаулы егет: "Бына һеҙҙең Башҡортостанығыҙ, һеҙҙең Президентығыҙ арҡаһында мин бер туҡтауһыҙ штраф түләйем дә инде",- тип ыҫҡындырҙы. Мин ҡаушап ҡалдым. Ул егеттең артында баҫып тороусы оло йәштәрҙәге ир: "Был егеттең юл ҡағиҙәләрен боҙоуына ла беҙҙең Президент ғәйепле булып сыға икән дәһә", - тип көлдө. Иң алда баҫып тороусы йәш кенә рус ҡатыны: "Ә мин йәшәгән илемдә яратам, Президентыбыҙҙы хөрмәт итәм. Ул киткәс, илемдә низәр булыр икән, тип хәүефләнеп уйланам",- тине.

"Ҡасан был шаянлығыңды ташларһың да, тиктормаҫ теленде тыйырһың, әбекәй?"- тип, үҙемдә эстән генә әрләп алдым. Уйнап һөйләһәң дә, уйлап һөйлә, тип юҡҡа ғына әйтмәгәндәр боронғолар. Икенсе яҡтан уйлаһаң, илемдә йәшәгән халыҡтың фекерен тура һорау бирмәй генә белештем булып та сыҡты бит...

**Айгөл АХУНОВА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Иң яҡшы шәжәрә төҙөүгә республика конкурсы иғлан ителде. Уны БР Мәҙәниәт һәм милли сәйәсәт министрлығы үткәрә. Конкурста теләгән һәр бер кеше ҡатнаша ала. Шәжәрә конкурсының тәүге турында район һәм ҡала комиссиялары һайлап алған материалдарҙы октябрь-ноябрҙә республика эксперт комиссияһы тикшерәсәк. Еңеүселәрҙе бүләкләү декабрҙә буласаҡ.

✓БР Президенты М.Ғ. Рәхимов Татарстандың Алабуға ҡалаһында Волга буйы федераль округы субъекттарының көрсөк шарттарындағы социаль-иктисади хәле мәсьәләһе буйынса кәңәшмәлә ҡатнашты. Кәңәшмәне РФ Хөкүмәте рәйесе урынбаҫары Д.Н. Козак үткәрҙе. Кәңәшмә эшендә Рәсәй Президентының Волга буйы федераль округындағы тулы хоҡуҡлы вәкиле Г.А. Рапота, Волга буйы төбәктәре етәкселәре, БР Хөкүмәте Премьер-министрының беренсе урынбаҫары, финанс министры А.Р. Ғәскәров ҡатнашты.

✓Республиканың ҡала һәм район башлыҡтары менән берлектә үткән видеоселектор кәңәшмәһендә төбәктең сауҙа предприятиеларында республика тауар етештереүселәре продукцияһын тәҡдим итеүҙе көйләү саралары, энергетика һәм коммуналь хужалыҡты, социаль-мәҙәни объекттарҙы ҡышҡа әҙерләү барышы мәсьәләләре ҡаралды. Кәңәшмәне БР Хөкүмәте Премьер-министры Раил Сарбаев алып барҙы. Киләһе видеоселектор кәңәшмәне июль аҙағында үтәсәк һәм көрсөккә ҡаршы республика программаһын тормошҡа ашырыу барышына арналасаҡ.

✓Башҡортостанда Рәсәй армияһына яҙғы саҡырылыш тамамланды. Кампания барышында 11 мең тирәһе егет хәрби хеҙмәткә оҙатылған, был осор эсендә комиссия тарафынан 13 мең кеше тикшерелгән, 377 кеше сәләмәтлеге буйынса хәрби хеҙмәткә яраҡһыҙ тип табылған, 320 кеше сәбәпһеҙ рәүештә комиссияла ҡатнашмаған, һәҙәмтәлә 511 кеше административ яуаплылыҡҡа тарттырылған.

✓"Башкирнефтепродукт" асыҡ акционерҙар йәмғиәте 15 июлдән Күмертәләй һәм ваҡлап ҡулланыусылар өсөн Евро дизель яғыулығына хаҡты кәметте. Компанияның автозаправкалау станцияларында ошо нефть продуктының хаҡы 2,6 процентҡа арзанайҙы. Күмертәләй ҡулланыусылар өсөн ошо дизель яғыулығын һатып алыу хаҡы 4 процентҡа түбәнәйҙе.

***✔ Финанс пирамидаларын төҙөүҙең төп принциптары күптән билдәле. Улар ябай ғына һәм кешенең ҡомһоҙлоғона, аңһат һәм тиҙ генә ҙур табыш алыу теләгенә баш була алмауына нигеҙләнгән.***

*АҘНА ШАҢДАУЫ*

# "ПИРАМИДА"ЛАР КӨРСӨК ОСОРОНДА "ҮҪӘ"...

## Бернард Мэдоффты 150 йылға төрмәгә ултыртыу кемгә кәрәк булды?

**Йәмәғәт, 150 йылға төрмәгә ни өсөн ултырталар икән? Белмәйһегеҙме? Кеше үлтергәндәргә беҙҙә 15 йыл бирәләр, угрылар, кеше мөлкәтенә ҡул һуҙғандары өсөн, 3-5-7 йылға рәшәткә артына ултыртыла. Ә бына 150 йылға төрмәгә кемде һәм, иң мөһиме, ниндәй гәйептәр өсөн бикләргә мөмкин һуң? Һәм тағы ла бер һорау тыуа - ҡайһы илдә енәйәтселәрҙе шундай ҡаты язаға тарттыралар икән? Бар ундай ил. Һәм бар ундай кеше. Ғәйептәре лә оло икән. Әйтергә кәрәк, беҙҙең дәүләтебеҙҙә һәм йәмғиәттебеҙҙә һуңғы йылдарҙа ҡабул ителгән әхлаҡи нормаларға яраҡлы, ул һис тә гәйепле түгел. Киреһенсә, урыны түрҙә. Ә бына Америка Ҡушма Штаттарында уны 150 йылға төрмәгә бикләп ҡуйҙылар.**

Һүҙ 71 йәшлек Бернард Мэдофф хаҡында бара. Үткән аҙнала ул Нью-Йорктан Төньяҡ Каролина штатындағы Батнер ҡалаһының төрмәһенә оҙатылды. Донъя ваҡытлы матбуғат саралары хәбәр итеүенсә, был төрмә Америка Ҡушма Штаттарында иң яҡшыларҙан һанала, имеш. Нью-Йорк ҡалаһының суды Мэдоффты 150 йылға төрмәгә ултыртыу менән генә сикләнмәне, уның 170 миллиард доллар кимәлендәге мөлкәтен дәүләт файҙаһына конфискациялау тураһында ҡарар ҡабул итте. Ниндәй яуызлыҡ ҡылған һуң был кеше, ни өсөн уны шундай ҡаты язаға тарттыралар тигән һорау тыуыр, моғайын, һеҙҙә, йәмәғәт. Әйтергә кәрәк, Мэдоффты, уны күргәнбелгәндәр, тыныс һәм аҡыллы кеше, тип баһалай. Ул бай һәм, тимәк, Америка Ҡушма Штаттары йәмғиәтенең абруйлы ағзаһы. Күп кенә билдәле гольф-клубтарында теркәлгән Мэдофф уларға йылына бер миллион долларҙан ашыуыраҡ иғанә түләгән. Бәхетиһән, Америкала гольф-клубтарының ағзаһы булыу өсөн бай булыу ғына етмәй. Унда йәмәғәтселек тарафынан киң танылыу, клубтарҙың башҡа ағзаларының тәҡдимдәре лә мотлаҡ. Хатта йөҙ миллион доллары булһа ла, урамдан кешене ҡабул итмәйҙәр икән ул клубтарға. Мэдоффтың Манхэттенда (Нью-Йорк ҡалаһының тик байҙар ғына йәшәгән элиталы районы) 7 миллион долларлыҡ фатиры, Палм-Бич ҡалаһында (Флорида штаты) 11 миллион долларлыҡ йорто, тағы ла Лонг-Айлендта (был да Нью-Йорк ҡалаһының бай бер биҫтәһе) 4 миллион долларлыҡ бер йорто, 2 миллион долларлыҡ диңгеҙ яхтаһы, тағы ла банкыларҙа миллион долларлап иҫәптәре булған. Уның менән 50 йыл бергә ғүмер иткән хәләл ефете Руфтың банкылағы иҫәбендә генә 80 миллион доллар ятҡан. Америка ҡанундары буйынса - ихтирамлы, абруйлы, башҡортса әйткәндә, дастуйный шәхес. Сөнки бай. Сөнки тормошо етеш. Һалымдарын ваҡытында түләп барған. Шул кешене 150 йылға төрмәгә ултырт сәле? Америкала властҡа коммунистар килеп байҙарҙы туҙҙыра башланымы ни? Юҡ, йәмәғәт. Коммунистар бында ниприлем. Мэдоффтың бар ғәйебе - уның алдаҡсы булыуында. Уның бизнесы башҡаларҙы төп башына ултыртыу юлы менән алып барылған һәм үҫешкән. Ул бар донъяла финанс "пирамидаһы" тип атала. Мэдофф - мошенник. Йәғни, "пирамида" булдырыусы, уны "төҙөүсе" һәм ниһайәт, емереүсе.

Финанс "пирамида"ларын төҙөүҙең төп принциптары күптән билдәле. Улар ябай ғына һәм кешенең ҡомһоҙлоғона, аңһат һәм тиҙ генә ҙур табыш алыу теләгенә баш була алмауына нигеҙләнгән. Башҡа финанс учреждениеларынан айырмалы рәүештә, финанс "пирамида"һының төп сифаты - ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә ғәйәт ҙур табыш вәғәҙә итеү. Ә принцибы - һәр бер яңы клиент үҙе менән ике (йәки вариант - өс, дүрт) клиент килтерә. Уларҙың һәр береһе үҙ сиратында тағы ла икешәр-өсәшәр кешене димләй. Шулай итеп ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә был "пирамида"ның башында тороусылар ысынлап та ҙур табыш алып өлгөрә. Ә инде уның нигеҙен тәшкил итеүселәр иһә бер нәмәһеҙ (ыштанһыҙ, машинаһыҙ, фатирһыҙ) тороп ҡала. Табыш тураһында һүҙ ҙә юҡ. Өфөлә йәшәгән ун һигеҙ йыл эсендә минә кәмендә биш тапҡыр төрлө кимәлдәге "пирамида"ларҙа ҡатнашырға тәҡдим иттеләр. Әллә кем дә түгел, таныш-белештәр. Төрлө сәбәп табып, баш тартып арыған, берәүһенә туранан-тура "Был бит "пирамида", унда нишләп мине көсләйһең" тигәс, күҙен дә йоммай, "Беләм. Булһын. Файҙаланып ҡалырға кәрәк тә инде", тип яуапланы. Мин был аферала ҡатнашмаған, оҙаҡ ҡына үпкәләп йөрөнө хатта.

Рәсәй "пирамидалары" ҡалҡып сығып торҙо, күп ваҡыт та үтмәй емерелеп, юҡҡа сығып, үҙ емереклектәре аҫтында меңәрләгән кешене ҡалдырып торҙо. Уларҙың ғүмере, уҙа китһә, өс-дүрт йыл. "МММ", "Хопер-инвест" "Властилина", тағы ла әллә ниндәй шалтырауыҡлы атамалар, ялтырауыҡлы рекламалар булды. Ҡайҙа улар? Юҡ. Шуныһы ҡыҙыҡ - аҡсалары ла юҡҡа сыҡҡан. "МММ"-ға нигеҙ һалыусы Мавроди һәм "Властилина"ның хужабикәһе Валентина Соловьева төрмәлә лә ултырып сыҡты. Әлбиттә, 150 йыл түгел. Күпкә кәмерәк.

Мэдоффтың "пирамидаһы" ҡыҫҡа ғүмерлеләрҙән түгел. Ул егерме йылдан ашыу уңышлы эшләп килгән. Әммә 2008 йылда бөтә донъяны иҡтисади көрсөк баҫып алғас, был миллионерҙың хәлдәре хөртәйеп китә. Мэдофф үҙ "пирамида"һына 3 миллионға тиклем кешене йәлеп итә һәм уның табышы бер нисә тиҫтә миллиард доллар тәшкил итә. Америка Ҡушма Штаттарының хоҡуҡ һаҡлау һәм суд системаһына Мэдоффты ҡулға алып, уның күп миллиардлы махинацияларын асыуға ни бары ярты йыл ваҡыт кәрәк булды. Бөгөн, һеҙ ошо гәзитте ҡулығыҙға алғанда, Мэдофф яҡты донъяға рәшәткә аша ҡарай инде. Һәм яҡындағы 150 йыл эсендә ул төрмәнән сыға алмаясаҡ. Ә уның ғаиләһе, ҡатыны, балалары, тиерһегеҙ. Суд уларҙы ла аямай. Мәҫәлән, уның хәләл ефетен Манхэттендағы фатирынан ярты сәғәт эсендә ҡыуып сығаралар һәм ишектәрҙәге йоҙаҡтарҙы алмаштырып ҡуялар. Ә уның банкылағы иҫәбендә ятҡан 80 миллион долларҙың ни бары 2,5 миллионын ғына ҡалдырып, ҡалғанын дәүләт ҡаҙнаһына күсерәләр. Артабан Мэдоффтың эшмәкәрлегенән зыян күргәндәргә таратып бирер өсөн.

Америка Ҡушма Штаттары үҙенең махинаторҙары һәм аферистары менән нисегерәк аяуһыҙ ҡыланғаны хаҡындағы мәғлүмәт беҙгә нимәгә кәрәк, тип һорарһығыҙ. Аптырамаһағыҙҙыр әле. Нисектер беҙҙә ошондай ҡырын эш менән шөғөлләнеүселәргә ҡараш йомшаҡ, тимәксемен. Киреһенсә, кешеләр үҙ-ара һөйләшкәндә уларҙы йыш ҡына аҡларға тырыша. Был әллә теләһә ниндәй ысул менән күберәк аҡса эшләргә теләүҙән киләме? Дөрөҫөрәге, бер нәмә эшләмәй генә байып китеүҙе маҡсат итеп ҡуйыуҙан киләме? Пермдә инкассаторҙарҙы талап, 250 миллион һум алып киткән Шурман миҫалында ла күренә был. Төрлө лотереяларҙы уйнатып, миллионлаған һум табышҡа эйә булғандар хаҡында ваҡытлы матбуғат сараларында йыш ҡына яҙыуҙары һәм һөйләүҙәренән дә аңлашыла. Беҙгә тиҙ һәм аңһат табыш кәрәк. Ә кемгә кәрәкмәй, тиерһегеҙ. 1998 йылғы дефолтты хәтерләйһегеҙме? Августың урталарында хөкүмәтебеҙ Дәүләт ҡыҫҡа сроклы йөкләмәләре буйынса түләргә баш тартҡайны, илебеҙ көрсөккә сумды. Ә бит ул йөкләмәләр шул уҡ "финанс пирамидалар" принцибы буйынса ойошторолғайны.

Ике аҙнанан август тыуа. Илебеҙ көрсөккә билдән түгел, муйындан батҡан. Хөкүмәт ағзалары нефткә хаҡтар күтәрелмәҫме, тип көтә. Һәм шуға ярашлы, киләһе йылдарға дәүләт бюджеты проектын бер түгел, өс вариантта әҙерләй. Ә халыҡ, аҡтыҡ аҡсаһын финанс пирамидаларына илтергә әҙерләнә. Бәлки, тиҙ һәм аңһат байырға маташыуға ҡарағанда, тырышып эшләү отошлораҡтыр. Хәйер, Советтар Союзында йәшәп һәм эшләп өлгөргәндәр минең был фекеремдә инҡар итер, моғайын. Тырышып эшләп ҡараныҡ бит инде, фәтүәһе юҡ, тиерҙәр.

Мэдоффҡа әйләнеп ҡайтайыҡ. Уны ҡаты язаға тарттырыу кемгә кәрәк булды, тигән һорауға яуап бирмәнек бит әле. Ҡайһы берәүҙәр фекеренсә, Америка Ҡушма Штаттары етәкселеге шулайтып башҡа мошенниктарға ишара яһай: йәнәһе, кешеләрҙе алдамағыҙ. Алдаһағыҙ, тотолмағыҙ. Юғиһә, башығыҙҙы төрмәлә серетәсәкбеҙ. Минеңсә иһә, Мэдоффты хөкөм иткән судья үҙе лә пирамидаларҙы ойоштороусыларҙан алданған булған. 150 йыллыҡ срокты башҡаса нисек аңлатаһың инде?

**Таһир ИШКИНИН.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✔Республикала уртаса эш хаҡы кимәле күтәрелгән. Көрсөк арҡаһында уның кәмеүе күҙәтелгәйне. Декабрҙә ул 17094 һум булһа, ғинуар айында 13149 һумға төшкәйне. Әле республикала уртаса эш хаҡы 14541 һум тәшкил итә.

✔"Машина ихатаһы" операцияһының тәүге этабы ҡайһы бер һөҙөмтәләр килтерҙе. Уның барышында республикала 184 тәбиғәтте һаҡлау законы боҙолоу осрағы теркәлде. Операция мәлендә машина ихаталарында, туҡталыштарҙа, ауыл хужалығы техникаһын ремонтлау һәм техник хеҙмәтләндереү урындарында тәбиғәтте һаҡлау законы талаптары күҙәтеләме-юҡмы икәне тикшерелде. Һөҙөмтәлә гәйепле кешеләргә 308 мең һумға 63 административ түләүҙәр һалынды.

✔Башҡорт дәүләт аграр университетында буласаҡ беренсе курс студенттарына 870 бюджет урыны бүленгән, шуларҙың 525-е ауыл мәктәптәрен тамамлаусыларға тәғәйенләнгән. Әле был уҡыу йортонда барлығы 11330 студент уҡый, шуларҙың 5147-һе - бюджет нигеҙендә белем ала.

✔Куйбышев тимер юлы "Өфө-Самара-Адлер" йүнәлеше буйынса өҫтәмә 593/594-се поезд йөрөй башлауы тураһында хәбәр итә. Ул Өфөнән 13, 19, 25, 31 июлдә һәм 7, 13, 19, 25 августа 19 сәғәт 5 минутта китә. Юлдағы ваҡыт - 56 сәғәт 8 минут.

✔БР Милли музейында фондтарҙы һуғыш осоро ҡомартҡылары менән тулыландырыу йәһәтенән әүҙем эш алып барыла. Ветерандар сафы көндән-көн кәмей. Уларҙың хатирәләрен яҙып алыу, Бөйөк Ватан һуғышы осорона ҡараған экспонаттарҙы йыйыу - бөгөн музей хеҙмәткәрҙәре ошо бурысты ла атҡара.

✔ 90.6 FM йышлыҡтарында Балалар радиоһы эшләй башланы ("Дети FM"). Проект 22 ҡаланы үҙ эсенә ала. Уның маҡсаты - 12 йәшкә тиклем балаларға әйләнә-тирәне танып белеүгә ярҙам итеү. Концепцияны эшкәртеүҙә табиптар, психологтар һәм педагогтар ҡатнашҡан. 22.00 сәғәттән һуң ата-әсәләр ваҡыты башлана. Иң яҡшы балалар программаһы булараҡ, был проект "Радиомания" премияһын яулаған.

ҮӘТ, ӘЙ!

# Әсәлеккә өҫтәмә

**БР буйынса Пенсия фонды бүлексәһенән хәбәр итеүҙәренсә, әсәлек капиталына дәүләт сертификаты алыусы рәсәйлеләр 12 мең һум күләмендәге аҡса алыуға хоҡуҡлы. Был түләүҙәр бер тапҡыр бирелә.**

Әсәлек капиталына хоҡуҡ 2007 йылдың 1 ғинуарынан 2009 йылдың 30 сентябренә тиклем уҙ көсөнә ингән булһа - 2009 йылдың 31 декабренә тиклем, ә 2009 йылдың 1 октябренән 31 декабренә тиклем инһә, 2010 йылдың 31 мартына тиклем ғариза биреп өлгөрөргә кәрәк.

Ғариза менән бергә дәүләт сертификатын, шәхесте билдәләүсе документ (паспорт) һәм бер тапҡыр түләнә торған түләүҙәрҙе күсереү өсөн банкыла асылған иҫәптең реквизиттарын күрһәтеүсе справка талап ителә. Иҫәпте үҙегеҙ теләгән банкыла аса алаһығыҙ.

Әсәлек капиталын кредит ҡаплау, торлаҡ һатып алыу йәки төҙөләш эштәре өсөн тотонорға өлгөрөүселәр ҙә был түләүҙәргә хоҡуҡлы. Тик уларҙың иҫәптәрендәге тотонолмаған әсәлек капиталы 12 меңдән кәм булмаҫҡа тейеш.

# Тыйып булырмы?

**Июль айынан илдә казино, уйын автоматтары клубтары ябылды. Рәсәйҙең уйын бизнесы, законға ярашлы, Калининград өлкәһендә, Алтай һәм Приморск крайҙарында һәм Ростов өлкәһе һәм Краснодар крайы сиктәрендә урынлашҡан 4 резервацияға күсәсәк.**

Төрлө мәғлүмәттәр буйынса, был резервациялар әлегә уйын йорттарын тотоусыларҙы ҡабул итергә әҙер түгел. Әммә шуға ҡарамаҫтан, был закондың уҙ көсөнә инеү ваҡыты үҙгәрмәйәсәк. БР Һалым хеҙмәте федераль идараһы хәбәр итеүенсә, быға тиклем төбәктә ике казино булған, уларҙың икеһе лә Өфө ҡалаһында урынлашҡан. Урындағы уйын бизнесын тотоусылар махсус билдәләнгән урындарға күсеп китергә йыйынамы, юҡмы - быныһы ҡараңғы, тик кисәге уйын залдарында бөгөн интернет-кафелар, лоторея һәм покер клубтары барлыҡҡа килгән. Бындай күренеш бөтә ил буйынса күҙәтелә. Хоҡуҡ һаҡсылары билдәләүенсә, законда булған етешһеҙлектәр арҡаһында, уйын бизнесын лоторея бизнесына әүерелдереү мөмкинлеге бар. Компьютер клубтары һәм интернет-кафеларҙың да ябайлаштырылған уйын автоматы салоны икәнен барыһы ла белә.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# Үлем кәмей

**Башҡортостанстат мәғлүмәттәренә ҡарағанда, маҡсатлы эш алып барыу һөҙөмтәһендә Башҡортостанда яңы тыуған сабыйҙар үлеме кәмегән.**

БР Һаулыҡ һаҡлау министры урынбаҫары Рәлидә Шакирова хәбәр итеүенсә, иртә неонаталь (тыуғандан һуң 6 тәүлек) һәм неонаталь осорҙа (28 тәүлек) үлем кимәле 1,6, ә постнеонаталь (28 тәүлектән 1 йәшкә тиклемгә) осорҙа 1,5 тапҡырға кәмегән. "Был күрһәткестең кәмеүе бөтә башҡарыусы власть органдарының, һауыҡтырыу-профилактика учреждениелары етәкселәренең, медицина хеҙмәткәрҙәренең берҙәм эше һөҙөмтәһе ул", - тип билдәләне Рәлидә Шакирова.

Һаулыҡ һаҡлау министрлығы тарафынан кадрҙарҙың квалификацияһын күтәреү буйынса ла даими эш алып барыла. Быйыл, мәҫәлән, генетика һәм нәҫелдән күсеүсе сирҙәрҙең актуаль проблемалары буйынса дәрестәр циклы үткәрелгән. Балалар урология-андрологияһы буйынса урологтар һәм балалар хирургтары әҙерләү, неонатология, эндоскопия, перинаталь диагностика өлкәһендә эшләүселәр, акушер-гинекологтар өсөн район-ара семинарҙар ойошторолған.

# Ғүмер оҙайһын өсөн

**БР Фәндәр академияһының биология, медицина һәм ауыл хужалығы фәндәре бүлеге ғалимдары 2010-2015 йылдарға иҫәпләнгән "БР Агроэкологик хәүефһеҙлеге" ведомство-ара программаһын тормошҡа ашырыу өҫтөндә эш башланы. Алдынғы агрохимиктар тәҡдимдәр һәм концепциялар пакетын республиканың төрлө министрлыҡтары һәм ведомстволары менән берлектә әҙерләйәсәк.**

- Кеше хәүефһеҙлеге менән бәйле һәр мәсьәләне иң тәүҙә ғалимдар тикшерергә тейеш. Әлеге ваҡытта беҙ Башҡортостандың агроэкологик хәүефһеҙлеге проблемаһын хәл итергә тырышабыҙ, - ти был бүлектең академик-секретаре һәм фәнни үҙәктең рәйесе Үзбәк Гусманов. - Ирҙәрҙең уртаса йәшәү оҙайлығы, мәҫәлән, хәҙер 59 йәш, ә пенсия йәше 60-та ғына етә. Халыҡтың ғүмер оҙайлығының ҡыҫҡарыуы, тәү сиратта, күп продукттарҙы етештереү өсөн нигеҙ булған һыу һәм тупраҡтың бысраныуы менән бәйле. Һыу һәм аҙыҡ - һаулыҡты билдәләүсе төп факторҙар.

Был проблема менән бөтә донъя ғалимдары тиҫтә йылдар дауамында шөғөлләнә. Рәсәйҙә был эш һуңыраҡ башлана, күрше Татарстанда бындай программа 8 йыл эшләй.

- Был проблеманы хәл итеү өҫтөндә беҙ 2000 йылда уҡ эш башлағайныҡ, - тип һөйләй ТР Фәндәр академияһының экологик проблемалар лабораторияһы мөдире Роберт Ильясов. - Бының өсөн күп тикшеренеүҙәр үткәрелде. Техноген бысраныуҙарҙың үҙенсәлектәре асыҡланды һәм улар нигеҙендә ниндәй саралар ҡулланыу кәрәклеге билдәләнде. Нефть табылған һәм эшкәртелгән урындарҙа онкологик сирләләр һаны 30-40 процентҡа күберәк булғанға, ауыл халҡының һаулыҡ торошо, уларҙың организмына һыу һәм аҙыҡ аша ингән ауыр металдар миҡдары иҫәпләнде.

Татарстанда эшләп килгән программаға һәм ундағы ғалимдарҙың тәжрибәһенә таянып төҙөлгән программа концепцияһы нигеҙендә тикшеренеүҙәр үткәрергә һәм ауыл хужалығын "таҙа" технологияларға күсерергә мөмкин буласаҡ.

# Яңынан уҡыталар

**Федераль үҙәк республиканың халыҡты эш менән тәьмин итеү хеҙмәтенә эшһеҙ ҡалғандарҙы уҡытыу һәм уҡытыу осоронда йәшәтеү, юл хаҡын ҡаплау һәм стипендия түләү өсөн 248,1 миллион һум аҡса бүләсәк. Был 13700 эшһеҙ ҡалған кешегә һөнәр алып, эшкә урынлашырға мөмкинлек бирә.**

Бындай маҡсат өсөн был күләмдәге аҡса республикаға беренсе тапҡыр бүленә. Бөгөнгә көнгә Башҡортостандан халыҡты эш менән тәьмин итеү үҙәктәре уҡыу йорттары менән 6 мең эшһеҙҙе уҡытыу өсөн 38,2 миллион һумлыҡ килешеү төҙөгән. Яңы һөнәр үҙләштереүҙең уртаса ваҡыты 2-6 ай, бер кешене уҡытыу өсөн 6-7 мең аҡса тотонола. Быйыл 5 ай эсендә 5700 эшһеҙ һөнәри әҙерлек үткән, был һан былтырғы йыл менән сағыштырғанда 1,8 тапҡырға күберәк.

- Һөнәри әҙерлек үткән һәр кеше эшкә урынлашһа ғына уҡытыу һөҙөмтәле булды, тип әйтергә ярай, тимәк, дәүләт түләгән аҡса елгә осмаған, - ти БР Халыҡты эш менән тәьмин итеү идаралағы начальнигы Тимерхан Биккинин. - Әммә республика буйынса һөҙөмтәләр әлегә ҡәнәғәтләнерлек түгел. Шуға ла эшһеҙ ҡалғандарҙы хеҙмәт баҙарында кәрәкле булған һәм йышыраҡ гастарбайтерҙар йәлеп ителә торған һөнәрҙәргә уҡытыу бөгөн маҡсатҡа ярашлы буласаҡ.

Идаралыҡта ваҡытлыса эшһеҙ ҡалған, әммә эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнеү өсөн һөнәри әҙерлек үтергә теләүселәргә айырым иғтибар бүленә. Мәҫәлән, умартасылыҡ һөнәрен үҙләштерергә теләүсе 19 кешене идара йүнәлтмә менән Баймаҡ районына ебәргән. Шулай уҡ яҡын арала эш урынын юғалтыу ҡурҡынысы янаған хеҙмәткәрҙәр ҙә бында өҫтәмә һөнәргә уҡып сыға ала. Был эш бигерәк тә Баймаҡ, Белорет, Бәләбәй, Ишембай, Нефтекама, Октябрьск, Сибай, Салауат, Туймазы ҡалаларында һәм баш ҡаланың Калинин районында яҡшы ҡуйылған. Әлеге көндә эштән бушатылыу ҡурҡынысы тыуған ҡайһы бер предприятиелар менән дә һөнәри әҙерлек тураһында алдан килешеү төҙөлгән.

# Йәштәргә "йәшел ут"

**Хәҙер юғары, урта һәм башланғыс һөнәр биреү учреждениеларын тамамлаусы студенттарҙың йәмәғәт эштәре сиктәрендә республиканың төрлө ойошмаларында стажировка үтеү мөмкинлеге бар. Был хеҙмәт баҙарындағы көсөргәнеште кәметергә һәм йәш белгестәргә һөнәри мөхиткә яраҡлашырға ярҙам итәсәк.**

Хеҙмәт баҙарындағы хәлде еңелләштереү өсөн ҡабул ителгән был республика программаһы буйынса ойошмаларға йәлеп ителгән стажерҙарға хеҙмәт хаҡы федераль бюджеттан бүлгән субсидия иҫәбенән түләнә. Ул минималь эш хаҡы күләменән (4330 һум), район коэффициентынан (15 процент) һәм хеҙмәт хаҡы фонды иҫәпләүҙәренән (26,2 процент) тора. Был сара һөҙөмтәһендә уҙ һөнәре буйынса эш тапмаған йәш белгестең кәм тигәндә өс ай эш урыны һәм ваҡытында түләнеп барған эш хаҡы була. Әгәр ҙә үҙен был ваҡыт эсендә күрһәтеп өлгөрһә, уның был ойошмала эшкә ҡалыу мөмкинлеге лә ҙур.

Бөгөнгә көнгә республиканың халыҡты эш менән тәьмин итеү үҙәктәре 6,74 миллион һум суммаһына 94 килешеү төҙөгән дә инде. Ойошмаларҙа стажировка үтергә теләүселәр һаны 2134-кә еткән, бының өсөн 39,3 миллион һум аҡса талап ителә.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✔Быйыл көҙ Өфөлә йәш журналистарҙың VI төбәк-ара фестивале үтәсәк. Сара яҡынса 17-18 сентябргә планлаштырыла.

✔Быйылғы ярты йыллыҡ һөҙөмтәләр буйынса Өфө Рәсәйҙең 500 меңдән ашыу халыҡ йәшәгән 35 иң эре ҡалалары араһында торлаҡ хаҡы буйынса18-се урынды биләй. Был исемлеккә Мәскәү һәм Санкт-Петербург ҡалалары инмәй. Июнь айында икенсел торлаҡҡа хаҡ Рәсәй буйынса 40 мең 700 һум самаһы тәшкил иткән. Ә Өфөлә был күрһәткес - 39 мең һум. Иң түбән хаҡ - бер квадрат метр өсөн 33 мең һум - Ижевск, Яр Саллы, Ульяновск ҡалаларында.

✔Күптән түгел Өфө транспорт милицияһы йөҙләп кешене алдаған енәйәтселәр төркөмөн тотто. Был енәйәтселәр республиканың төрлө райондарында һәм ҡалаларында вахта эсулы менән эшләү өсөн кешеләр йыйыу тураһында белдереүҙәр йәбештереп сыҡҡан. Һөйләшеү ваҡытында юл сығымдары өсөн һәр кешенән 3-4-әр мең аҡса йыйып алғандар. Ә тәғәйенләнгән ваҡытта аҡса түләгән граждандарҙы вокзалдарҙа берәү ҙә көтмәгән. Милиция хеҙмәткәрҙәре әйтеүенсә, был енәйәтселәр тоҙағына эләгеүселәр күберәк булыуы ла ихтимал.

✔Белеүегеҙсә, Өфө ҡала округы хакимиәтендә "Кайнар пейджер" бәйләнеше эшләй һәм һәр кем 2-770-911 телефоны буйынса "Мэрия" абонентына шылтыратып, үҙен борсоған мәсьәләләр тураһында хәбәр итә ала. Мәғлүмәттәр буйынса, июндә ошо бәйләнешкә 160 мөрәжәғәт ҡабул ителгән. 69-ына яуап бирелгән, 27 ғариза ыңғай хәл ителгән, 42-һенә аңлатма бирелгән. Мөрәжәғәттәр башлыса йорттарҙы ремонтлау, ихаталарҙы төҙөкләндереү мәсьәләләренә ҡайтып ҡала.

✔Баш ҡалала "Мәк - 2009" операцияһы үтә. Бөгөнгә көнгә Өфөнөң Октябрь районының Эске эштәр идаралығы хеҙмәткәрҙәре тарафынан ғына наркотиктарҙың законһыҙ әйләнеше буйынса 200 факт асыҡланған, был былтырғы менән сағыштырғанда 67 осраҡҡа күберәк. Әгәр ҙә наркотиктар һаҡлау һәм уны һатыу осраҡтарын белһәгеҙ, Эске эштәр министрлығына 128 телефоны буйынса шылтыратып, был турала әйтә алаһығыҙ.

ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ



# ХАЛЫҠ ЙЫЙЫНЫ -

## Хәйбулла районы Вәлит ауылы янында...

**11 июлдә Хәйбулла районының Вәлит ауылы янында йыйын үтте. Унда ошо ауыл зыяратында ерләнгән Ғатаулла ишан Әбделмәликов рухына зыярат ҡылынды, Зәйнулла ишан Рәсүлев, Ғабдулла ишан Сәиди, Мөжәүир хәҙрәт һәм башҡа ишандар, әүлиәләр, батырҙарыбыҙ, күренекле шәхестәребеҙ рухына бағышлап, шулай уҡ Башҡортостаныбыҙ именлеге өсөн аяттар, доғалар уҡылды. Йыйынға Урал арьяғы райондарының, республикабыҙҙың башҡа төбәктәренең имам-хатибтары, йәмәғәтселек вәкилдәре, динебеҙгә һәм милли рухыбыҙға битараф булмаған йәштәр йыйылды.**

Был көндө лә күрер көнөбөҙ бар икән. Милләтебеҙҙең рухи терәге булған заттарыбыҙҙың изге һөйәктәре ятҡан еребеҙгә баҫып, Хаҡ Тәғәләбеҙгә туранан-тура мөрәжәғәт итеү мөҙҙәте етте. Быға беҙҙең тулы хаҡыбыҙ бар. Сөнки беҙ, башҡорттар, донъяға яралғандан алып Аллаһы Тәғәләгә һәм кешелеккә асыҡ йөҙ, асыҡ күңел, асыҡ йөрәк менән ҡарап йәшәй алдыҡ һәм йәшәйбеҙ. Мәсеттәребеҙ емерелеп, ишандарыбыҙ, хажиларыбыҙ юҡ ителеп, көнөбөҙҙән бигерәк динебеҙгә тарлыҡ килгән ваҡытта ла беҙ күңелебеҙҙә иманды, кешелеклелек сифаттарын һаҡлап алып ҡалдыҡ, Аллаһы Тәғәләгә һәм үҙ асылыбыҙға хыянат итмәнек. Аллаһы Тәғәләгә тоғролоғобоҙҙо һаҡлауҙы тыуған еребеҙҙе, ожмахҡа тиң Уралтауыбыҙҙы, асылыбыҙҙы, башҡортлоғобоҙҙо һаҡлауға тиңләнек. Шуға күрәләр ҙә халҡыбыҙҙың рухи юлбашсыһы Әхмәтзәки Вәлиди "Беҙ аҡтар ҙа, ҡыҙылдар ҙа түгел, ә - башҡорттар", тип әйтә алғандыр. Был һүҙҙәре менән ул башҡорт булыуҙы Аллаһы Тәғәләгә, үҙ милли рухыңа, асылыңа, туған ереңә тоғро булыуға тиңләгән. "Күңелебеҙҙә усаллыҡ юҡ", тип әйткән милли батырыбыҙ, шағирыбыҙ Салауат Юлаев. Юҡҡа ғына Хаҡ Тәғәләбеҙ үҙенең бер хәҙисендә былай тип әйтмәгән: "Күңелендә иманды һаҡлап ҡала алған кешегә, хатта бер тапҡыр намаҙ уҡымаһа ла, әхирәт көнөндә сауабым булыр". Фәҡәт шулай булыуыбыҙ арҡаһында тарихыбыҙҙың ана ниндәй һәләкәттәренән милләтебеҙҙе һаҡлап, имен-аман егерме беренсе быуатҡа аяҡ баҫа алдыҡ. Быға беҙ Аллаһы Тәғәлә хозурына ирешеүебеҙ менән өлгәшә алдыҡ. Ошо юлда беҙгә Хаҡ Тәғәләбеҙгә тура юлды күрһәтеүсе Зәйнулла, Ғатаулла, Ғабдулла, Мөжәүир ишан-хәҙрәттәребеҙ, башҡа әүлиә заттарыбыҙ үҙ заманында Аллаһы Тәғәлә хозурына өлгәшеп, милләтебеҙгә, кешелеккә мәңгелек ғүмер һәм мәрхәмәт һораған. Тағы ла шуны ла иҫебеҙҙән сығармайыҡ: ошо изге заттарыбыҙ ҡуйынында ятҡанға күрә лә Еребеҙ үҙ күсәренән иҫкәнмай тора.

Был көндө Вәлит ауылы янына йыйылған һәр кемдең йөрәге "Аллаһы Тәғәлә", тип типте. Халҡыбыҙҙың үҙ дини асылына сарсауының асыҡ миҫалы булды был йыйын. Ҡайһы бер сығыш яһаусыларҙың ауыҙынан "кәбәрҙәргә барып намаҙ уҡыу гәмәле тыйылған", тигәнерәк һүҙҙәр ишетелеп ҡалһа ла, йыйынға килеүселәр был һүҙҙәргә битараф ҡалды, иғтибар ҙа итмәне, әһәмиәт тә бирмәне. Нисек инде, үҙ ваҡытында динебеҙгә һәм милләтебеҙгә оло фиҙаҡәрлек күрһәтеп, йәнен фиҙа ҡылып, ошо юлда Аллаһы Тәғәлә хозурына ирешә алған заттарыбыҙҙың ҡәберен беҙ оноторға тейешбеҙ? Юҡҡа ғына "Үлгәндәрҙең ҡәберен бел, тереләрҙең ҡәҙерен бел", тип әйтмәгәндәр бит.

Ошо йыйын үтһен өсөн ҙур фиҙаҡәрлек һалған Йылайыр районының Ҡаҙырша ауылы мәсетенең имам-хатибы Нуретдин олатай Игебаев был хаҡта бына нимә ти:

-Халҡыңды, уның арҙаҡлы улдарын ихтирам итмәһәң, үҙең ихтирамлы була алмайһың. Халыҡ, милләт үҙ-үҙен күтәрергә өйрәнһен өсөн Аллаһы Тәғәлә уға арҙаҡлы шәхестәр, дин әһелдәре, аҡыл эйәләре, сәсәндәр, шағирҙар булыр өлөшлө бәндәләрен ебәрә. Хоҙай уларҙы һәм халыҡты донъялыҡта ла, әхирәттә лә һынай. Әгәр ҙә халҡы өсөн йәнен фиҙа ҡылған заттар ер аҫтында ятҡан саҡта ла халҡы өсөн берҙәй үк ҡәҙерле булһа, уларҙың әруахы өсөн аяттар уҡылһа ғына, ул халыҡҡа Хаҡ Тәғәлә мәрхәмәт һәм сауап ебәрә.

Ер аҫтында ятҡан орлоҡ дым һәм йылылыҡ етһә генә, тупраҡты ярып үҫеп сыға. Беҙ ҙә шулай, ер аҫтында ятҡан аҫыл заттарыбыҙға ҡарата ҡояш һәм ямғыр була алһаҡ ҡына, сауаплы һәм рәхмәтле була алырбыҙ. Ер аҫтында ятыусы Зәйнулла, Ғатаулла ишандарҙың, Мөжәүир хәҙрәттең изге һөйәктәре ана шундай мәрхәмәткә мохтаж. Ҡасандыр Аллаһы Тәғәлә хозурына олғаша алған ошондай заттарыбыҙға аяттар уҡып, уларҙың изге рухына ҡорбандар салып, дин юлына йөҙ бороп, иң тәүҙә уларҙың рәхмәтенә өлгәшә алһаҡ ҡына, беҙҙең киләсәгебеҙ буласаҡ. Аллаһы Тәғәләгә лә барыр юлыбыҙ ошо изге заттарҙың рухы аша үтергә тейеш. Зәйнулла, Ғатаулла ишандарҙы, Мөжәүир хәҙрәтте ихтирам итмәгән, уларҙың рухына аят уҡытмаған башҡорт Аллаһы Тәғәлә мәрхәмәтенә лайыҡ була алмаясаҡ.

Байрамдарҙың да төрлөһө була. Уларҙың күбеһе ойоштороla, ойошторолғанға күрә лә, рәсмиерәк төҫ алып, ялҡытҡысҡа әүерелә. Беҙ бала сағыбыҙҙа яратып барған һабантуй байрамы ла хәҙер һағынып ҡына иҫкә алырлыҡ булып ҡала бара. Әллә замандың үҙгәреүенә бәйле колхозсовхоздарҙың көрсөккә терәлеүе тәьҫир иттеме, әллә прагматизм хакимлыҡ итә барған заманда кешеләрҙең күңелендә романтика кәмейме, һуңғы йылдарҙа үткәрелгән һабантуйҙар кәйеф, шатлыҡ сығанағы булыуҙан гәйре күп кенә етәкселәргә оло мәшәҡәт кенә тыуҙырған сара-байрамға әүерелә бара. Элек бар ауыл берҙәм күтәрелеп сыҡҡан һабан байрамына хәҙер ауыл халҡының яртыһынан күберәге йөрөмәй, ауылда тороп ҡалыуҙы хуп күрә. Эш нимәлә һуң? Был хаҡта ошоға тиклем дә оҙаҡ ваҡыт уйланып йөрөгәнем булды һәм Вәлит ауылы янында үткән йыйында мин был хәлдең асылын аңланым, буғай. Барлыҡ хикмәт халыҡтың теге йәки был сараға үҙе теләп килеп, бар көсөн һәм ихласлығын, ижади ҡомарын һалып ҡатнашыуында икән. Йыйынға Хәйбулла районы ауылдары һәм башҡа ҡунаҡтар үҙ тирмәһе менән килде. Байрамдың рәсми өлөшө тамам булғас, тирмәләр ҡунаҡтар өсөн үҙ ишеген асты. Барыһы ла ҡорбан итенән ауыҙ итте. Беҙҙең гәзит редакцияһы Әбеш ауылы хакимиәте тирмәһенең ҡунағы булды. Әйтергә кәрәк, халыҡ ижады гәүһәрҙәрен һаҡлауы менән дан тотҡан был ауылдың ҡорбан ашы мәжлесендә башҡарылған боронғо йырҙар йыйын майҙанына ишетелеп торҙо.

Хәйбулла районы хакимиәте башлығы Ринат Бикбов йыйынды үҙе асып, һүҙ әйтеүе, унда һәр райондан килгән делегация исеменән дини башлыҡтар һүҙ әйтеүе, ҡурайсыларҙың ҡатнашыуы, моң батшаһы Абдулла Солтановтың йырлауы сараға рәсми төҫ тә өҫтәне, әммә ул барыбер ҙә халыҡ йыйыны булып ҡалды. Унда үҙенең күңелендә булғанды әйтер өсөн һәр кемгә һүҙ бирелде, берәүгә лә сикләү ҡуйылманы, йәғни сара демократик төҫ алды.

Әйткәндәй, миңә лә йыйын алдына сығып һүҙ әйтеү бәхете тейҙе. Һөйләп торғанымда ҡулыма яҡташтарым, Баймаҡ районынан килеүселәр яҙған хат тоттороҙолар. Баймаҡтар ҙа был изге йола башланғысын күтәреп алып, август айында Ғабдулла ишан Сәиди, Мөжәүир хәҙрәт Сиражетдинов хөрмәтенә ошондай уҡ сара үткәрмәксе. Иншалла. Тимәк, яңы йола башланғыс ала тигән һүҙ.

**Шулай итеп...**

**Иманһыҙлыҡ, динһеҙлек осоронда битарафлыҡ йоҡоһона бирелгән йөрәктәрҙе уятыр мәл етте, туғандар. Беҙ быны динебеҙгә ҡайтып ҡына атҡара алабыҙ. Динебеҙгә ҡайтып ҡына үҙебеҙҙе һаҡлап ҡала алабыҙ. Был йыйын халҡыбыҙҙың Бөйөк уяныуына нигеҙ булһын, иншалла!**

**Әхмәр ҮТӘБАЙ.**



Әбеш тирмәһендә ҡунаҡтар.

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы

### Ҡыяр



Һәр кем был йәшелсәне сәсә, кибеттәрҙә лә тулып ята. Көн һайын ғаиләң менән 1-2 ҡыярҙы ҡабығы менән ашарға ғәҙәтләнергә кәрәк: бөйөрҙәге таш төшә. Бөйөр ауыртһа, тары бутҡаһын тоҙһоҙ бешереп ашарға мөмкин.

### Сәтләүек япрағы

Тубыҡтар һыҙлаһа, көн аша сәтләүек япрағынан ун ванна яһарға кәрәк. Сәтләүек үҫкән төбәктәрҙә уның япрағын ҡышҡылыҡҡа киптереп алырға ла була.

### Дегәнәк япрағы, алоэ, юл япрағы, бал

Әле дегәнәге лә, юл япрағы ла һутҡа тулышҡан, өҙ ҙә сәйнә инде! Шул япраҡтарға алоэ һәм балды бер күләмдә ҡушып болғатаһың да, быяла һауытҡа һалып, 3 аҙнаға ултыртып ҡуяһың. Көн һайын ас ҡарынға бер ҡалаҡ эсәһең. Бронхиаль астманан файҙаһы тейә, тотош тын юлын таҙарта.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

### Ҡыҙыл миләш

Һыуыҡ ҡыш айында ҡып-ҡыҙыл булып янып ултырған миләш ағасын күреү менән эскә йылы инеп киткәндәй була. Ул беҙҙә баҡсаға йәм бирер өсөн генә түгел, дауа өсөн дә үҫә.

Өләсәйем һәр ваҡыт ҡара көҙҙә мине үҙе менән бергә миләш тирергә алып сыға ине. Йомшап, әскелтләнеп өлгөргән емештәрҙе тиреп бөткәс, өйгә индереп йыуабыҙ ҙа, өләсәйем уларҙы табаҡҡа һалып, өҫтөнә сығармай аҙ ғына һыу ҡойоп, 10 минутҡа ҡайнатырға ҡуя. Кәрәкле ваҡыт уҙғас, уттан алып, ҡайнатманың һыуынғанын көтәбеҙ. Ә һунынан инде өләсәйем иләк алып, емшәгән миләш емештәрен унан аша үткәрә башлай. Емештән тышын ташлап, һығылып төшкән һуттан ғына ҡайнатма эшләй. Быны өсөн 1 кг һутҡа 1 кг-дан күберәк шәкәр ҡомо һалып, ҡуйыртыу маҡсатында теләгәнсә он өҫтәп, ҡайнатып алаһың.

Ҡыҙыл миләш емештәренең витаминдарға бай булыуы (айырыуса һирәк осраған К витамины бар уның составында) төрлө сирҙәргә ҡаршы дауа һәм иммун системаһын нығытыусы сара булып тора. Ул ҡан баҫымын түбәнәйтә, әселеге ашҡаҙан-эсәк юлын таҙарта.

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

ӘЙ, ЯҘМЫШ…

**Ул хөкөм алдына ҡара күҙлек кейеп килеп баҫты. Быны судьяға бар нәмәнең күҙенә ҡуш булып күренеүе менән аңлатты. Дүрт йыл элек мейеһенә ҡан һауғайны, Екатеринбург табиптары үлем ҡосағынан йолоп алып ҡалған II төркөм инвалиды ул.**

# МӨХӘББӘТ ОШОЛАЙМЫ?

## Улайһа, ситтә йөрөһөн ул…

Суд башланғас та, йыш-йыш тын алып, хәлһеҙ тауыш менән ниндәй ауырыуҙар кисергәнен һөйләне, баҫып тора алмайынса, эскәмйәгә ҡоланы. Залда ултырған атаһының: "Йә инде, ҡыҙым, бөтөрөнмә, һаулығыңды уйла", - тигән һүҙҙәрен ишеткәс кенә башын күтәрҙе. Судьяның судты кисектерергә тигән тәҡдименә ҡаршы: "Юҡ, мин был мәхшәрҙе тиҙерәк үткәрергә тейеш!" - тип ҡырт киҫте.

Эйе, хөкөм эскәмйәһендә бер бала әсәһе, гүзәл зат вәкиле. Үҙенә һүҙ бирелгәс, ул енәйәт ҡылған көндө түгел, ә тормош иптәше тураһында һөйләй башланы.

"Өйләнешкәс, ҡайнәм менән бергә йәшәнек. Ярты ай ҙа үтмәне, ирем әсәһен туҡманы. Был минең өсөн ҡот осҡос күренеш ине. Ҡәйнәмде яклашҡан өсөн үҙемә лә нык ҡына эләкте. Туҡмалыуым тураһында хәбәр итеү менән ата-әсәйем килеп төштө. Уларҙың мине алып ҡайтыу теләгенә ҡаршы төштөм. Ата-әсәйем: "Үҙең һайланың. Улай булғас, инде беҙҙе бер ҡасан да саҡырма!" - тинеләр.

Күрәһең, шул мәлдә тормошомда хәл иткес аҙым яһалғандыр. Сөнки бынан һуң ирем мине нисек кенә мыҫҡыл итһә лә, теш ҡыҫып түҙеп йәшәргә тура килде. Ҡунаҡтарҙа ул күҙ алдымда бүтәндәрҙе иркәләне, әллә нисә тапҡыр сығып китте, кире ҡайтты. Ғәфү иттем, Сибайға алып барып, эскелектән дауаланым. Тик барыһы ла ҡабатлана ғына торҙо.

Иремдең бер туған ҡустымдың ҡатыны Фәриҙә менән йөрөй башлауы тураһында ишеткәйнем инде, тик ниңәлер ышанғым килмәне. Ҡустымдың ғаиләһенә ярҙам итеп, татыу ғына йәшәй инек. Бер ҡунаҡ мәлендә иремдең Фәриҙә менән, кешеләрҙән дә тартынмайынса, ҡосаҡлашыуын күрҙем. Һуңынан "пар күгәрсендәрҙе" түшәктә тоттом. Өндәшмәнем. Ирем: "Һин тормоштоң йәмен дә, тәмен дә белмәйһең. Һинең менән ҡыҙыҡ түгел", - тип үҙемде ғәйепләне.

Минең тыуған көнөм ине. Бер кемде лә саҡырманым. Һеңлем менән кейәү генә мунса төшөргә килергә тейеш ине. Бәлеш бешереү өсөн таныштарҙың баҡсаһында алма йыйып йөрөһәм, артымдан ирем килеп еткән: "Ҡайт, ҡунаҡтар килде", - ти. Ҡустым баяғы ҡатыны Фәриҙә менән килгән икән. Өндәшмәнем, түҙҙем. Әммә..."

Эйе, тыуған көн көтмәгәндә фажиғә менән тамамлана. Иҫерек Фәриҙә һыйҙан һығылып торған өҫтәлде ауҙарып ебәрә лә, хужабикәнән: "Мин һинең ирең менән йөрөнөм һәм киләсәктә лә йөрөйәсәкмен!" - тип көлә. Уның мыҫҡыл итеүен өндәшмәйенсә тыңлап ултырған ҡатынға барып йәбешә. Хужабикәнең һеңлеһе Фәриҙәне саҡ айырып алып, эткесләп, тышҡа алып сыға.

Йәме киткән өйҙә хужабикә яңғыҙы ултырып ҡала. Тормош туктап ҡалғандай була уға. Субырлап аҡҡан йәштәрен дә һөртмәйенсә, туҙып ятҡан алмаларҙың береһен алып, бысаҡ менән сәскә яһарға тотона. Шул саҡ Фәриҙә килеп инә һәм: "Һинең башың да эшләмәй, теге ерең дә эшкинмәй икән!" - тип көлә башлай.

"Нимә булғанын хәтерләмәйем, иҫемә килгәндә, ҡулымда бысаҡ, ҡаршымда торған Фәриҙәнән ҡан аға һәм ул йылап ҡына иҙәнгә шыуыша ине. Кемдәрҙер уны тотоп алып, иҙәнгә һалды, кемдер бинтҡа йүгерҙе..."

Алмалай өс балаһы булған йәш ҡатындың мәғәнәһеҙ үлеме хөкөм ителеүсе яҡ менән Фәриҙәнең туғандарын мәңгелек дошман яһаны. Судтан һуң уларҙың бер-береһен ҡарғауы бинанан сыҡҡас, урамда ла дауам итте.

Енәйәтсе биш йылға иректән мәхрүм ителде. Быны ишеткән ҡустыһы хөкөм ҡарары сығарыусыларға рәнйеү менән ҡарап: "Ни эшләйһегеҙ һеҙ? Ҡайтмаясаҡ бит ул, ҡайтмаясаҡ", - тип үкһеп илап ебәрҙе. Унан мәрхүмә ҡатындың һөйәренә, йәғни бер туған еҙнәһенә: "Һин ғәйепле барыһына! Үлтерәм мин һине!" - тип ҡысҡырҙы.

Судтан барыһы ла ауыр тойғолар менән таралды. Ғүмер буйы иренең мыҫҡыл итеү, йәберләүҙәрен унан айырылыуҙан өҫтөнөрәк күйып, түҙеп йәшәүсе ҡатын аптырата мине. Нимә был: мөхәббәтме? Әгәр мөхәббәт икән, ғәфү итегеҙ, минән арыраҡ йөрөһөн был тойғо...

**Шулай итеп…**

**Һуңынан Юғары суд ҡарары булды. Унда эште яңынан ҡарап, һаулығы көндән-көн насарайыуы сәбәпле, енәйәт ҡылырға мәжбүр ителгән ҡатын шартлы рәүештә иркенән мәхрүм ителде…**

Гүзәл ИҪӘНГИЛДИНА.

БАШҠОРТОСТАНДЫҢ ЕТЕ МӨҒЖИЗӘҺЕ

# ХӨПБҮЛ ВАТАН МИН ӘЛ ИМАН,

## йәғни Уралыбыҙҙың мөғжизәләрен барлайым…

### Йәшмә һәм алтын билғауҙары

Урал тауҙарының тағы ла бер тәбиғи мөғжизәһе бар. Уның армыттары, бейек тау үркәстәре, тау уйһыулыҡтары, шулай уҡ ниндәй генә тәбиғи шарттарҙа, һалҡында һәм йылылыҡта булмаһын, тауҙар һәр саҡта күкһел һәм һәр саҡта гәлсәрҙәй таҙа һауалы! Шуға ла беҙ уны "Күкһел Урал" тибеҙ, ә урыҫтар "Седой Урал" тиҙәр.

Миңә ышанмаһағыҙ, Өфө - Бил - Арыт - Юшалы - Учалы юлы менән ҡайтҡанда, Елмәрҙәк армытын менгәс, һулға ҡарағыҙ. Шунда күрерһегеҙ Күкһел Уралды!

Башҡортостан Уралының көнсығыш ере Учалы - Юшалы районында төньяҡтан көньяҡҡа һуҙылған, оҙонлоғо 155 саҡырым ерҙә йәшмә билғауы ята. Ғөмүмән, йәшмә билғауы Учалы районының төньяҡ сигенән башланып, төп Урал армытының көнсығыш бите буйлап 500 саҡырымға һуҙылып, ҡаҙаҡ далаларына етә.

Матурлыҡтары менән ер шарында берҙән-бер бизәр йәшмәләр Мейәс, Уй һәм Йайыҡ йылғаларының ҡушылдыҡтары ярҙарында, тау үнерҙәрендә, тоташ ҡатлау-ҡатлау булып аяҡ аҫтында ята. Беҙ бизәр йәшмәләр өҫтөнән йөрөйбөҙ! Йәшмә ярсыҡтарынан юл күтәрәбеҙ, әлегерәк һыйыр, һарыҡ һарайҙары төҙөнөк. Францияның Мулдаҡай йәшмәһенән эшләнгән мозаик картаһы бар, ул Лувр ҡалаһында һаҡлана. Санкт-Петербургтағы Воскресеньск сиркәүе Мулдаҡай йәшмәһен ҡырып биҙәлгән, ул Ленин мавзолейы төҙөлөшөндә лә ҡулланылған.

Районыбыҙҙың Малай-Муйнаҡ йәшмәләре гөлләмәһе менән СССР-ҙың индустрия мозаика картаһы эшләнеп, Санкт-Петербург Эрмитажында һаҡлана. Ул халыҡ-ара күргәҙмәләрҙә Парижда һәм Нью-Йоркта күрһәтелгән. Мулдаҡай, Әүеш, Туңғатар, Малай-Муйнаҡ, Ҡалҡан Наурҙы һәм башҡа урындарҙа сыҡҡан йәшмәләр бер-береһенән төҫө, биҙәр һүрәтләмәләре, ҡатылығы, йә йомшаҡлығы һәм башҡа бик күп сифаттары менән айырыла. Районыбыҙҙа был биҙәр таштарҙы эшкәртеү осҡаханалары ла бар.

Рәсәйҙең алтын биҙгәге беҙҙең ерҙә 1797 йылда башлана. Император Павел I башҡорттарҙың урыҫтарға алтын йыуып тапшырыуын ишетеп, Мечников тигән кешене ебәрә. Миәс һыуының һул ҡушылдығы Ирәмәл йылғаһында, уның һул ҡушылдығы Ташҡутарған йылғасығында бай алтын ятҡылығынан башҡорттарҙың алтын йыуып алыу алымдарын күргән урыҫтың иҫе китә. "Золото на реке Миасе открыто богатое!" - тип хәбәр ебәрә ул Петербургҡа. Шунан башлана Уралдың алтын билғауында Рәсәйҙең алтын биҙгәге. Алтын билғауҙың оҙонлоғо 130 саҡрым. Киңлеге 25 саҡрым. Д. И. Менделеев таблицаһының барлыҡ тигәндәй элементтары бар был ерҙә. Мөғжизәме? Эйе, Уралдың мөғжизәһе был!

Алтын билғау ҙа, йәшмә билғауы кеүек, районды тоньяғынан, дөрөҫөрәге, тарихи башҡорт ереңен Әтләң, Ташҡутарған ерҙәренән башланып, көньяҡҡа, Ирәндек армытының алдынан да, артынан да дауам итә. Алтын билғау үҙе менән бергә баҡыр, цинк, тимер һ.б. мәгдәндәрҙе йөрөтә. Шул байлыҡтар Учалы мәгдән эшкәртеү комбинатын хасил итә. Алтын билғау яҙмышыбыҙға бәйләнгән, ул беҙҙең билебеҙгә быуылған. Мөғжизәме? Әлбиттә. Ул беҙҙең өсөн генә түгел, бөтә Рәсәй өсөн дә мөғжизә!

### Ирәмәл - Ир-Әмәле

Көньяҡ Урал, Башҡорт Уралының мөғжизәләрен, серҙәрен һөйләп бөтөрлөк түгел. Мәҫәлән, уның Ир-Әмәле - Ирәмәле тауы үҙе ни тора! Төрки донъяһындағы өс бөйөк тауҙың исемен хатта Совет осоронда ла шовинистар үҙгәртә алманы. Уның береһе Алтай армыттары тауҙарындағы Тәңре-Хан тауы, икенсеһе - Тән йән (Тяньшань) тауҙарындағы Ҡайлас һәм өсөнсөһө - Көньяҡ Уралдағы Ирәмәл тауы. Был өс тау, үҙенең мөһабәтлеге, серлелеге менән төрки донъяһының рухына ишелгән. Меңәр йылдар төрки халыҡтар был өс тауға баш эйгән, ҡеүәт алған, рухи көс, ярҙам һораған. Гонаһлыларға ла шул тауҙар үҙ язаһын тараткан. Изгеләрҙе иркәләгән, гонаһлыҙҙарға ярҙам иткән. Тәңре үҙе лә кәрәк саҡта Тәңре-Хан йә Ир-Әмәле тауы аша ергә төшә торған булған, тип ышанғандар. Әгәр үҙе төшмәһә, йә фәрештәләре, йә ерҙәге изге кешеләре Аллаһы Тәғәлә менән шул тауҙар аша бәйләнеш тотҡан. Бөтә төрки донъяһы бөгөн дә шул тауҙарға баш эйә, уларҙы изге итеп күрә.

Ирәмәл һүҙе Ир-Әмәле тигәнде аңлата булыр. Унда әмәл булдырыр, ҡеүәт, тормош башы берерҙәй көс өләшеүсе алтын тамыр үҫә. Ир-Әмәле - ул ышыҡланыр, һаҡланыр, һырығыр, тирә-йүнде түйындырыр ҙа, тәкәтең бөтһә, һыуыныңды ла баҫыр ер! Ирәмәл - серле ер! Уның серҙәрен башҡаса һөйләмәйек, яҙмайыҡ, һәм мин дә яҙмайым. Бөгөнгә вәхшилек өлгөһөндә тәрбиә алған йәндәргә улар хаҡында һөйләһәк, тауыбыҙ серлелеген юғалтыр. Шуның өсөн уның серҙәре тураһында башҡаса - ләм-мим!... Ирәмәл тау Башҡортостандың ғына түгел, бөтә төрки донъяһының мөғжизәһе. Бәхәс итмәгеҙ!



ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ

## Әүлиә шишмәhе

Төбәгебеҙҙә Көньяҡ Уралдың тағы ла бер мөғжизәhе бар.

Ул һәр йылда тик бер үк ваҡытта сығып, бер үк ваҡытта ҡорой торған Әүлиә шишмәhе. Әүлиә шишмәhе, диңгеҙ кимәленән 413 метр бейеклектә ятыусы, майҙаны 238 га тәшкил иткән Әүеш күленең ярына текәлеп, бейеклеге 500 м самаһы күтәрелеп торған Әүеш-тауҙың көнбайыш битендә сығып яткан һалкын сығанаҡ. Һыуының составы үҙенсәлекле. Ул йылдар буйы һаҡлана, иҫкермәй, сит тәм алмай. Беҙгә көнсығышта йәшәгән башҡорттарҙа Ислам тәғлимәтен таратыр өсөн Рамаҙан әүлиә килгән. Ләкин тәңрелектә булган урындағы халыҡ уны үлтерә. Шулай ҙа исемен ташҡа яҙып, Ислам ҡануны буйынса тау үнеренә ерләйҙәр ҙә, ғәрәп хәрефтәре менән: Рамаҙан әүлиә, Ош ҡалаһынан килгән. Уны, ҡатынын һәм балаһын кеше үлтергән 651 йыл, тип яҙғандар. Тимәк, әгәр яңылышмаһам, Рамаҙан әүлиә Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең тәғлимәте тарала башлауына 29-30 йыл үткәс килә бында. Шул Әүлиә тауында, шишмәһендә тәһәрәт алған, ғөсөлләнгән. Башҡортто Ибн Фаҙландан алда Исламға өндәгән. Бындай оло тарихлы ер, тау, шишмә Рәсәйҙә һәм Башҡортостанда башҡаса юҡ! Мөғжизәме? Бик ҙур мөғжизә! Унан һуң байтаҡ йылдар үткәс, икенсе әүлиә килә. Уға башҡорттар араһында Ислам тәғлимәтен таратыуҙа уңыш юлдаш булғандыр. Уға ла таш ҡуялар. Әммә ул миләдиҙең 1293 йылында мәрхүм була. Уның ташын 1900 йылдарҙа Зәйнулла ишан һәм Ғайса Рәсүлевтар яңырта. Ул таш бөгөн дә тора. Халҡыбыҙҙың арҙаҡлы улдарының береһе, Өфө егете Салауат Килдин был ташты Зәйнулла ишандың тыуыуына 175 йылды билдәләгән осорҙа ремонтлатты. Сөнки таш ярылғайны. Әүлиә шишмәhе Рәсәй мосолмандарына ғына түгел, Ҡаҙағстан, Урта Азия, Ибер-Себер яҡтары халҡына бөгөн дә иман тарата. Ул һәр йыл майҙың 10-дарынан сығып, июндең 1-5-тәренә тиклем Башҡортостан, Силәбе, Ырымбур яғы халыҡтарына үҙенең иҫ китмәле тәмле изге һыуын тарата, ҡороп, һуңғы тамсыһы ҡалғансы һөҙөп-һөҙөп эсәләр уны. Ашҡаҙан, эсәк, бөйөр, бауыр эшмәкәрлеген еңеллəштерә, юлға һала. Әүлиә шишмәhенең мөғжизәлеген бөтә халыҡ таныған һәм таный!

**Спартак ИЛЬЯСОВ.**
**Учалы районы.**

**(Дауамы. Башы 28-се һанда).**





# ЕТЕ ҠЫҘҘЫҢ ҺЫУҒА БАТҠАНЫ,

## Өлкәр йондоҙҙоң теге донъя һыуына батҡаны...

**Башҡорттоң ифрат бай боронғо рухи мираҫы араһында "Алты егет", "Ете егет", "Ете ҡыҙ" тигән матур ғына көй, бейеү бар. Ул көйҙәрҙең легендалары ла һаҡланған. Элегерәк радионан Наил Ғәлиев менән Мәғфирә Ғәлиева башҡарыуында "Ете егет" тигән йырҙы тапшыра торғайнылар. Фәйзи Ғәскәров исемендәге бейеү ансамбле башҡарыуында "Ете ҡыҙ" бейеүен донъяның төрлө мөйөштәрендә, төрлө халыҡтарҙың хайран ҡалып ҡарағанын да беләбеҙ. Халҡыбыҙҙың рухи хазинаһы булараҡ, был йыр һәм бейеүҙе халыҡ әле лә яраталыр. Әммә күптәребеҙ был бейеүҙең, йырҙың тыуыу сәбәптәре бик боронғо мифологик ҡараштарға барып тоташыуы тураһында уйлап та бирмәйҙер, моғайын. Ә тамырҙар бик тәрәнгә, беҙҙең эраға тиклем үк төшөп китә һәм ата-бабаларыбыҙҙың Өлкәр, Етегән йондоҙҙары тураһындағы мифологик ҡараштары менән бәйле.**

Күк йөҙөндәге Өлкәр йондоҙлоғо тураһында күптәр (әҙ-мәҙ генә булһа ла) ишетеп белә. Урыҫтар уны Плеяды тип атай. Бер ниндәй ҡоралмал ҡулланмай ҡарағанда ла был йондоҙлоҡта алтыете йондоҙҙо күрергә була. Өлкәр бигерәк тә көҙ һәм ҡыш мәлдәрендә сағыу булып, яҡшы күренә, әммә уның төнгө күктәге тәүге сағыу күренеп ҡалыуы яҙғыһын, ләйсән (йәйсән дә, тиҙәр) ямғырҙар башланыр алдынан була. Йәй көнө иһә, был йондоҙлоҡ күренмәй, юғалып тора. Өлкәрҙең йәйге мәлдәге юғалыуын төрки халыҡтар уның теге донъя һыуҙарына төшөп батыуы тип аңлаған. Был йондоҙлоҡтың төнгө күк йөҙөндәге сәйер ҡылыҡтарына кешеләр бик боронғо замандарҙа уҡ иғтибар иткән. Һәм оҙаҡ күҙәтеүҙәр нәтиҗәһе булып беҙҙең эраға тиклем өсөнсө-икенсе меңйыллыҡтарҙа Өлкәр менән бәйле календарь формалаша. Төрки һәм монгол телле халыҡтарҙың ата-бабаларының боронғо календары буйынса, көҙ ахырында Өлкәр йондоҙлоғо сағыу булып ҡалҡып сыҡҡас, Яңы йыл башланған. Яңы йылды ата-бабаларыбыҙ төрлө йолалар менән билдәләр булған. Был мәлдә улар тәкәләрҙән ҡорбан салып, төрлө ритуалдар үткәргән. Өлкәр менән бәйле боронғо һәм теүәл төрки календары тураһында үҙенең хеҙмәттәрендә атаҡлы тарихсыбыҙ Зәки Вәлиди лә яҙып ҡалдырған. Саян тауҙарында йәшәүсе төрки телле хакастарҙа, сығыштары буйынса уларға яҡын туған булған Памир ҡырғыҙҙарында, монгол-буряттарҙа Өлкәр йондоҙлоғона бәйле халыҡ календаре әле булһа ҡулланылыштан сыҡмаған. Бик тә боронғо дәүерҙәрҙән килеп етә алған нәмә булараҡ, был календарь бик уникаль күренеш.

Өлкәргә бәйле ошо календарь күренешенә арнап, төрки халыҡтарҙың ата-бабалары бик боронғо замандарҙа уҡ төрлө мифологик эстәлекле риүәйәттәр тыуҙырған. Ҡайһы бер төрки халыҡтарҙа, мәҫәлән, хакастарҙан, күршеләребеҙ ҡаҙаҡтарҙан, Памир тауҙарында көн иткән ҡырғыҙҙарҙан бындай мифологик ҡараштарҙы сағылдырған риүәйәттәрҙе әле лә ишетергә була. Ҡаҙаҡтарҙа Етегән йондоҙлоғондағы Алькор йондоҙо Өлкәрҙең ҡыҙы, тип йөрөтөлә. Өлкәр йондоҙлоғо менән бәйле алты егет тураһындағы боронғо мифтың уғыҙҙарҙа Уғыҙнамә эпосында сағылыш табыуын күренекле тюрколог А.М.Щербак үҙенең хеҙмәттәрендә телгә ала. Был ғалим, эпоста Уғыҙ хандың алты улы, тип телгә алынған юлдар Өлкәр йондоҙлоғо тураһындағы мифтың сағылышы, ти. Үзбәктәрҙең локай ҡәбиләһендә лә Өлкәр йондоҙлоғо менән бәйле йыр һаҡланып ҡалған. Буряттар үҙҙәренең данлыҡлы улигерҙарын боронғо замандарҙа тик Өлкәр йондоҙлоғо күренгән төндәрҙә генә башҡарыр булған. Ошондай уҡ ырым Алтай төркиҙәрендә лә бар. Мәҫәлән, ғалимдар Алтай кайчиһынан Өлкәр тураһындағы мифты һөйләүен һорай. Эш көндөҙ була, шуға кайчи тәүҙә күккә ҡарап, Тәңреһенән үҙен ярлыҡауҙы үтенә, сөнки көндөҙ мифтарҙы һөйләү тыйылған эш (Алтайҙарҙың кайчиһы беҙҙең сәсән менән яҡын төшөнсәләр - **З.Ә.**). Тәңренән ярлыҡау алғандан һуң ғына, ул Өлкәр менән Етегән йондоҙ тураһындағы мифты бәйән ҡыла. Был мифта Етегән йондоҙо Дьете-Каан тип, ә Өлкәр - Улькәр тип атала. Бик боронғо замандарҙа, имеш, Дьете-Каан да, Улькәр ҙә етешәр йондоҙҙан торған. Дьете-Каан Улькәрҙың бер йондоҙон урлап, уны үҙенә аш бешереүсе итеп ҡуя. Бына шул ваҡыттан алып, Улькәр үҙенән урланған йондоҙҙо күреп ҡалмаһын, тип, Дьете-Каан урланған йондоҙҙо ышыҡлап, гел Улькәрҙың артынан йөрөй башлай.

Төрки халыҡтарында һаҡланған күпселек мифтарҙа Өлкәр йондоҙлого апалы-һеңлеле ете ҡыҙ, ә Етегән йондоҙлого иһә алты, йәки ете егет булараҡ телгә алына. Был мифтарҙа Етегән йондоҙлоғо гел ҡараҡ тип ҡылыҡһырланһа, Өлкәр иһә ҡараҡ Етегәндән зыян күреүсе булараҡ тасуирлана. Ошо алты (ете) егет (Етегән) ете ҡыҙға (Өлкәргә) ҡунаҡҡа килә һәм бер ҡыҙҙарын урлап ҡасалар. Шул арҡала был ҡыҙҙарҙың атаһы (хәҙерге Волопас йондоҙлоғондағы Арктур йондоҙо) һаман булһа ҡараҡтар артынан бер туҡтауһыҙ баҫтырып йөрөй, имеш, тиелә Себер төркиҙәренең бер риүәйәтендә.

Беҙҙең башҡортта Өлкәр тураһында мифологик ҡараштарҙан тик өҙөктәр генә һаҡланған. Өлкәрҙең йәйге мәлдәге юғалыуын төрки халыҡтар уның теге донъя һыуҙарына төшөп батыуы, тип аңлатҡандарын үрҙәрәк яҙып киткән инек. Башҡорт халыҡ ижадында:

Ай, ете ҡыҙ, ете ҡыҙ,
Ҡайтып килһәм, бере юҡ:
Намыҫ һаҡлап, күлгә батҡан,
Ғәйеп итер ере юҡ,

- тигән юлдарҙағы ете ҡыҙҙың һыуға батыуын, Өлкәрҙең йәй мәлендә теге донъя һыуҙарында батыуы, тип аңлаған саҡтарҙан ҡалған ҡараштарҙың сағылышы булыуын күрмәү мөмкин түгел. "Алты егет", "Ете егет", "Ете ҡыҙ" йырҙары, бейеүҙәре боронғо мифологик ҡараштарҙың беҙгә етә алған ярсыҡтарылыр. Бик борон замандарҙа был бейеү һәм йырҙар календарь цикл менән бәйле башҡарылған булырға тейеш.

"Ете егет ҡунаҡ килгән,
Еңгәм, нихәл итәбеҙ.
Сонтор ҡойроҡ ҡара тәкә
Һуйып ҡунаҡ итәбеҙ",

тигән юлдарҙан да мифологик ҡараштарҙың сағылышын тәҫмөрләргә була. Бында "тәкә һуйып ҡунаҡ итербеҙ", тигәнен "ҡорбан салыу", тип аңларға кәрәк. Сөнки, баяғы Өлкәр йондоҙлого менән бәйле календарь буйынса, Өлкәр йондоҙлоғона бәйле йолаларҙы үтәгәндә төркиҙәр ҡорбанға тәкәләр салып, төрлө ритуал бейеүҙәр башҡарған. Был ритуалдарҙа Өлкәр һәм Етегән йондоҙлоҡтарының осрашыуын төрлө ым, хәрәкәттәр аша һынландырғандар. Ваҡыт үтеп, башҡорттар мосолманлыҡҡа күсеп, икенсе календарь менән йәшәй башлағас, йырҙағы, бейеүҙәге элекке боронғо календарь менән бәйле мифологик мәғәнәләр онотолоуға дусар ителгән һәм хәҙер был йыр һәм бейеү тик фольклор һәм этнография күренеше булараҡ ҡына һаҡланып ҡалған. Был йырҙарҙың халҡыбыҙҙа һаҡланған легендалары ла ныҡ ҡына үҙгәреш кисергән. Әммә йыр варианттарындағы юлдарҙы анализлағандан һуң, был йырҙар - бүтән төрки ҡәүемдәрҙәге кеүек үк, Өлкәр менән бәйле календарь күҙәтеүҙәренән тыуған, тип әйтә алабыҙ. Шулай итеп, хатта башҡорттоң бейеүҙәрендә лә уның боронғо үткәндәренең сағылышын күрергә була, әгәр халҡыбыҙҙың мәҙәниәтенә һаҡсыл һәм иғтибарлы булһаҡ.

**Зәкирйән ӘМИНЕВ,**
**ғилми хеҙмәткәр.**

***✓ Нисәмә быуаттар элек яҙылған Ҡөрьәндә кешелектең һәр быуатына хас күренештәр, киләсәктең киләсәге әйтеп бирелгән. Исламда һәр замандың сәйәсәтенән гигиенаһына тиклем яҙылып, айырым кәштәләргә һалып ҡуйылған һымаҡ.***



**Күптән түгел редакциябыҙҙа күренекле шағир, прозаик, Учалы районының Муса Мортазин исемендәге премия лауреаты, Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре, Алма-Атала уҙғарылған төрки илдәре шиғриәтенең II халыҡ-ара фестивале лауреаты Мәүлит ЯМАЛЕТДИН булып китте. Һәр бер килгән кешенең тормош, заман, донъя хаҡындағы фекерҙәрен яҙып алып ҡалыу күптән инде беҙҙең йолаға әүерелде. Мәүлит Байгилде улына ла беҙ "Һеҙҙе тормошобоҙҙоң ниндәй проблемалары борсой, ниндәй уйҙар менән йәшәйһегеҙ?" тигән һорау бирҙек.**

# БАШҠОРТСА ҠӨРЬӘН телебеҙ ҙә, тимәк,

> ***Себергә элек башҡорттарҙы баш күтәргән өсөн ебәргәндәр, хәҙер улар унда үҙ республикаһында социаль яҡлау булмаған өсөн, үҙ теләге менән китә. Был - башҡорт тормошоноң парадоксаль бер күренеше. Ошо ерҙең төп этник милләт вәкилдәре үҙҙәренең ата-бабалары йәшәгән төбәктә эш менән тәьмин ителергә хаҡлы бит. Иң беренсе нәүбәттә. Уларҙың быға хоҡуғы бар. Был, - бергә берҙе ҡушһаң, ике була, тигән ябай ғына ҡағиҙә кеүек булырға тейеш. Өфөнө генә алайыҡ, унда нисә башҡорт етәксе урындарҙа эшләй икән? Ҡыҙыҡ өсөн генә булһа ла, шуны һанарға ине.***

## Киләсәк бөгөн туҡыла

Тарихыбыҙға боролоп ҡараһаҡ, халҡыбыҙ бик күп тапҡырҙар ҡаты һынауҙарға дусар ителеп, үҙен һәм тыуған ерен һаҡлап ҡала алған. Миҫалға Һундар, Алтын Урҙа, Ҡаҙан ханлығы ҡолатылған дәүерҙәрҙе, башҡорт ихтилалдары осорҙарын, Октябрь инҡилабы йылдарын ғына алайыҡ. Бөгөн иһә беҙ, беҙ генә түгел, башҡалар ҙа һынауҙарҙың иң ауырына дусар ителгәнбеҙ. Ни өсөн тигәндә, хәҙерге заман алдындағы һынауға тиклем булған һынауҙарҙа халҡыбыҙҙың рухы ныҡ булған. Инде бөттөм, милләт булараҡ юғалдым, тигән ваҡытта халҡыбыҙ дини етәкселәр тирәһендә ойошҡан һәм шул епкә тотоноп, иҫән ҡалған. Шул уҡ Салауат Юлаевты алайыҡ, уны Ҡөрьән-Хафиз тип тә атағандар, йәғни ул Ҡөрьәнде яттан белгән. Шул уҡ Батыршаны, Әхмәтзәки Вәлидиҙе алайыҡ. Бөгөн халҡыбыҙҙың дингә мөнәсәбәте нисек һуң? Әйтергә кәрәк, уны бер нисек тә дингә ылыҡтырып булмай. Мәсеттәр төҙөйбөҙ, ауылдарҙа имам-хатиб юҡ, имам-хатиб булғандарында халыҡ мәсеткә йөрөмәй. Ә бына төрки халыҡтарҙың ҡайһы берҙәре диндә үҙен иркен тоя һәм тиҙ генә дин ярҙамында ойошоп та алды. Әлбиттә, беҙҙә лә боҙ ҡуҙғалды, әммә беҙ һуңламаныҡмы икән, тигән уйҙар ҙа бар. Сөнки дингә ҡарағанда әллә нисә мәртәбә күберәк тиҙлектә беҙгә зәңгәр экрандар, Интернет селтәре аша ят идеология тәүге һөжүмдәрен яһап өлгөрҙө лә инде. Йәштәрҙе Интернеттың зарарлы тәьҫиренән айырып алыу мөмкин дә түгел һымаҡ. Хәҙер был селтәр аша йәнең нимә теләй, шуны ҡарарға була. Халыҡ, дөрөҫөн әйткәндә, ике юл сатында ҡалды. Сит илдәрҙә дини белем алып ҡайтыусы йәштәребеҙ ауылдарҙа эшләп ҡарай ҙа, ҡулын һелтәп, икенсе эшкә күсеп китә. Мин Мысырҙа уҡып ҡайтҡан бер нисә йәш егетте беләм. Улар үҙҙәренең белемен файҙаланыр форсат таба алмай.

## Милли рух диндән айырылған

20-се, 30-сы, 40-сы йылдарҙағы әҙәбиәтте ҡараһаҡ, унда мотлаҡ рәүештә муллалар, дин әһелдәре карикатура рәүешендә һүрәтләнде. Сәнғәттә лә шул уҡ хәл булды. Былар партияның ижадсыларға заданиеһы буйынса эшләнде. Ул саҡтарҙа беҙҙең боронғо йырҙарҙы башҡарыу, ҡурай уйнау туранан-тура тыйылмаһа ла, бындай йырсыларға һәм ҡурайсыларға кире ҡараш йәшәне. Хәҙер ҡурайыбыҙ яңынан терелде һәм был йәһәттән Ғата Сөләймәнов үҙенә һәйкәл бупырлыҡ эш эшләне. Уның тырышлығы булмаһа, ҡурай сәнғәтенең бөгөнгө хәленә күтәрелеүе лә икеле булыр ине. Эпостарҙы йыйып йөрөгәне өсөн Мөхәммәтша Буранғоловтың нисә мәртәбә төрмәлә ултырып сыҡҡанын да беләбеҙ.

Шуның өсөнмелер, хәҙерге яҙыусыларыбыҙ, шағирҙарыбыҙ, ғөмүмән, милли интеллигенция вәкилдәренең ҙур өлөшө диндән бөтөнләй алыҫ тора. Дөрөҫөн әйткәндә, милли рух дини рухтан шул тиклем айырылған. Шул уҡ ваҡытта Ислам фәлсәфәһе менән һуғарылған Аҡмулла шиғырҙары һаман да халыҡ хәтерендә. Уларҙың күбеһе халыҡтың хәтеренән сығып, кире тергеҙелде. Ни генә тимә, дини рухҡа нигеҙләнгән шиғриәт халыҡтың күңеленә яҡын. Ә бына һуғышҡа тиклемге яһалма әҙәби әҫәрҙәрҙе халыҡ онотоп та өлгөрҙө. Был йәһәттән мин ул заман яҙыусыларын һәм шағирҙарын аңлайым, ғәйепләмәйем. Заманы, осоро шулай булған, әгәр ҙә улар икенсе төрлө яҙһа, баҫмаҫтар ине.

Ә хәҙерге әҙәбиәткә килгәндә инде, беҙ милли ерлектән бөтөнләй айырылып, Европаға тартыла башланыҡ. Милләтебеҙ үҙенең юлын Шәреҡкә ҡарап бер һайлаған инде. Шуға күрә беҙ уның әҙәбиәте йәшәһен тиһәк, үҙ юлыбыҙға һәм дини рух менән милли рухты берҙәм иткән асылыбыҙға ҡайтырға тейешбеҙ.

## Ҡөрьән фәлсәфәләре

Боронғо эпостарыбыҙҙың күбеһе Ислам диненә тиклем үк ижад ителгән. Шуға күрә "Урал батыр", "Аҡбуҙат" кеүек эпостарыбыҙҙа дини рух һиҙелмәй. Ләкин һуңғараҡ осорҙа тыуған "Иҙеүкәй менән Мораҙым", "Ҡараһаҡал", "Батырша", "Юлай менән Салауат" һымаҡ эпостарҙа дини рух һиҙелә, ярылып уҡ ятмаһа ла, беленеп-беленеп ҡала. Әлбиттә, Исламға тиклемге традиция был әҫәрҙәргә лә тәьҫир иткән, әммә дини фәлсәфә ниндәйҙер кимәлдә бар. Мин боронғо Төрөк ҡағанаты осорондағы әҫәрҙәрҙе уҡып ҡарағаным бар. Уларҙа, асылда, "Нимә ул яҡшы?", "Нимә ул насар?" тигән ике һорау ҡуйыла. Был мотив беҙҙең ҡобайырҙарҙа "Бер тигәс тә, ни яҡшы?", "Бер тигәс тә, ни яман?" рәүешендә йәшәй.

Әле мин Ҡөрьәнде тулыһынса шиғыр менән тәржемә итеү өҫтөндә эшләйем. Эш былай йылдам ғына бара. Башҡа төрлө ижад менән шөғөлләнһәң, ныҡ арыта, ә Ҡөрьәнде тәржемә иткәндә ниндәйҙер мөғжизә менән арыуыңды тоймайһың. Бүтән тәржемәләр менән шөғөлләнгәндә художестволылыҡҡа урын күп бирелһә, бында фантазияға бирелеп булмай, төп тексттың бер генә мәғәнәһен дә, фекерен дә, һүҙен дә төшөрөп ҡалдырырға ярамай. Шуға инанғанмын: башҡорт телендәге Ҡөрьән китабы йәшәй икән, тимәк, телебеҙ ҙә йәшәйәсәк, телебеҙ йәшәһә, милләтебеҙ ҙә һаҡланасаҡ.

Ҡөрьән өҫтөндә эшләгәндә үҙемдең донъяға ҡарашымдың үҙгәргәнен дә һиҙәм. Беренсенән, ошо әҫәрҙе ошоға тиклем белмәүемдән тыуған үкенес тойғоһо. Күп кенә донъяуи ҡиммәттәрҙе үҙемә яңынан асам. Баҡтиһәң, мин быға тиклем күп кенә ялған ҡиммәттәргә табынып йәшәгәнмен икән. Икенсенән, донъяға ҡарашым киңәйә. Иҫем китә: нисәмә быуаттар элек яҙылған Ҡөрьәндә кешелектең һәр быуатына хас күренештәр, киләсәктең киләсәге әйтеп бирелгән. Исламды юҡҡа ғына таратмағандар



икән, унда һәр замандың сәйәсәтенән гигиенаһына тиклем яҙылып, айырым кәштәләргә һалып ҡуйылған һымаҡ. Унда тормош өсөн нимә кәрәк, барыһы ла, хатта бөгөнгө Енәйәт кодексы ла һыйған.

Ҡөрьәнде айырым кеше яҙмаған, уны Аллаһы Тәғәлә Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең аңына төшөргән, тиҙәр. Шулайҙыр. Унда хатта бөгөнгө гинекологияға ҡағылышлы мәғлүмәттәр ҙә бар. Ҡөрьәндә хатта баланы нисә йәшкә тиклем имеҙергә кәрәклеге лә әйтелгән. Унда бала ике йәшкә тиклем имергә тейеш, тип әйтелә. Хәҙерге медицина ла ошоно иҫбат итә. Әгәр ҙә баланы ике йәшенә тиклем имеҙһәң, ул тулы ҡанлы, һау, һөйәктәре нығынып үҫеп китә. Күкрәк һөтө микробтарҙы ла үлтерә, бала организмының эшмәкәрлеге өсөн һәр төрлө файҙалы витаминдарҙы, аҡһымдарҙы бирә. Ә беҙҙең әсәләр ни эшләй? Үҙҙәрен һаҡлайбыҙ, тип, бер йәше тулыр-тулмаҫтан имсәк ташлата ла, теләһә нимә ашата башлай. Ауырыу балалар ана шулай үҫә.

Ҡөрьәндә ир менән ҡатынға "Һеҙ - бер-берегеҙгә кейем булығыҙ", тип әйтелә. Бер ҡараһаң, ябай ғына аңлатма кеүек. Әммә тәфсирендә ир менән ҡатын ғүмер буйы бергә йәшәй торғас, бер-береһенең кәмселеген шул тиклем белеп бөтә һәм бер-береһенең кәмселеген ҡаплап йәшәргә, башҡаларға күрһәтергә тейеш түгел тип әйтелә. Ир менән ҡатындың бер-береһенә кейем булырға тейешлеге бына шулай аңлатыла. Тимәк, ир менән ҡатын бер-береһенең кәмселеген ҡаплай алһа ғына, уларҙың ғаиләһе ныҡлы була, тигән һүҙ. Ирендең йә ҡатынының кәмселеген башҡаларға һөйләмә, ул төҙәтелмәҫлек булһа, хатта үҙенә лә әйтмә, тигән аҡыл да ошонда ята. Шәп әйтелгән бит!

Ҡөрьәндә шулай уҡ йәһүдтәр һәм христиандар менән беҙ ниндәй мөнәсәбәттә булырға тейешлегебеҙ аныҡ итеп яҙылған. Беҙ улар менән был мөнәсәбәттәрҙе хәҙер нисек итеп ҡорабыҙ һуң? Ул ҡағиҙәләрҙе үтәмәгәнебеҙ өсөн ниндәй яҙаларға дусарбыҙ? Былар хаҡында әле бер ҡасан да уйланғаныбыҙ юҡ.

Байлыҡ туплау мәсьәләһенә лә айырым иғтибар бирелә Ҡөрьәндә. Байлыҡ артынан ҡыуыусылар донъя буйлап йүгереп йөрөрҙәр, әммә күңел тыныслығын юғалтып, үҙҙәрен харап итерҙәр, тип әйтелә. Ысынлап та, байлыҡ кешенең тыныслығын юйыусы, йоҡоһоҙ ҡалдырыусы нәмә. Әлбиттә, Ҡөрьәндә яҙылған был аҡыл айырым кешеләргә лә, берҙәй үк милләттәргә лә ҡағыла. Медиктар ҙа был хаҡта әйтә: коммерция менән шөғөлләнеүсе кешеләр тиҙерәк ҡартая, тиҙерәк үлә, тимәк, коммерсанттары күп булған милләт тә шул уҡ хәлдә ҡала, тигән һүҙ, йәғни милләттең иң ҙур өлөшө байлыҡ туплауҙы ғына маҡсат итеп ҡуйһа, милләт үҙен юҡ итеү юлына баҫа. Аҡсаға, байлыҡҡа күҙе асылғандың зиһене ябыла, ундай кеше бәхетле түгел. Хәҙерге замандың уҡымышлылары, зыялылары нисек итеп ошо катаклизмдан кешене ҡотҡарыу хаҡында баш вата. Миңеңсә, баш ватырға кәрәкмәй, Ҡөрьән буйынса йәшәй башларға ғына кәрәк.

## Ислам - ысын дин

Үҙ тарихынан, милли рухынан айырылған халыҡты нимәгәлер ышандырып күтәреү мөмкин дә түгелдер. Әгәр ҙә халыҡтың күңелендә киләсәгенә ышаныс, өмөт юҡ икән, ул күтәрелмәйәсәк тә. "Ысын дини инаныстан тыш, имен оптимизмдың булыуы мөмкин түгел", тигән һүҙҙәрҙе уҡығайным бер китапта. Әгәр ҙә халҡыбыҙ, Ер йөҙөндәге башҡа халыҡтар меңәр йыл буйына дини инаныуға таянып йәшәп килгән икән, диндең нигеҙе бик ныҡ. Нисәмә миллион халыҡ Ислам динен тота, динебеҙ барлыҡ ҡитғаларға йәйелә. Европалыларҙың күпселеге хәҙер христиан диненең көрсөккә алып барғанын һиҙеп, мосолман диненә күсә. Европа илдәрендә күпләп мәсеттәр төҙөлә. Сөнки Ислам - йәшеренер урыны булмаған ысын дин. Тормошта таяныстары, инаныстары ҡаҡшаған кешеләр Исламға килеп, рухи яҡтан һауығып, киләсәгенә өмөт менән ҡарай башлай. Үҙ күҙҙәрем менән күргәнем бар: инде бөткән, эшлектән сыҡҡан, бер ниндәй ышанысы ҡалмаған тигән кешеләр, яман ғәҙәттәренән ҡотолоп, эсеү-тартыуын ташлап, мәсеткә йөрөп, имамдарҙан ниндәйҙер башланғыс белем алып, дини тәғлимәттең башланғыс нигеҙен өйрәнеп, күңеленә ныҡлы терәк таба. Ислам - киләсәгеңә ышаныс дине ул. Күп йылдар буйына халҡыбыҙҙың киләсәген тәьмин итер юлдар хаҡында уйланып, мин был юл фәҡәт диндә, тигән фекергә килдем.

Бүтән юл юҡ. Ҡөрьәндә лә әйтелә бер хаҡта, донъяла ике генә юл бар: береһе - Ислам, икенсеһе - юҡҡа сығыу. Кеше ошо ике юлдың береһен үҙе һайлай. Айырым кешеләргә генә төбәлгән был юлдар бөтә милләткә лә ҡағыла. Әлхәмдүлилла, беҙҙең Урал арьяғында ла мәсеттәр күпләп аяҡҡа

**✓ Башҡорт автономияһы яулауҙың башында Зәйнулла ишан тора, әммә һуңынан һуғышсан атеизм һөҙөмтәһендә тәриҡәт юлында булыусылар юҡ ителгән. Хәҙер беҙ тағы шул юлға баҫырға уйлаһаҡ, дини юлбашсыбыҙ, шәйехебеҙ юҡ...**

# Китабы йәшәһә... милләтебеҙ ҙә йәшәйәсәк

баҫа. Мәсеттәргә күберәк йәштәрҙе йәлеп итергә кәрәк.

Ваҡытында Зәйнулла ишан Рәсүлев суфыйҙарҙың Нәҡшбәндиә орденына ҡабул ителеп, халҡыбыҙҙың азатлыҡҡа, үҙ дәүләтселеген төҙөргә ынтылышын, хыялын тәриҡәт юлы менән ҡуша алған. Бик күп башҡорт, татар, ҡаҙаҡ, үзбәк милләтле шәкерттәренең шәйехе булыу дәрәжәһенә өлгәшкән ул. Әлбиттә, Башҡорт автономияһы яулауҙың башында Зәйнулла ишан тора, әммә ҡыҙыл террор ваҡытында, һуңынан шәхес культы осоронда, һуғышсан атеизм һөҙөмтәһендә тәриҡәт юлында булыусылар юҡ ителгән. Хәҙер килеп беҙ тағы ла шул юлға баҫырға уйлаһаҡ, был тәңгәлдә дини юлбашсыбыҙ, шәйехебеҙ юҡ...

## Иҫертеү иҙеүсе милләткә хас

1993 йылда Алма-Атала төрки шиғриәтенең II Халыҡ-ара фестивалендә төрөктәр менән бергә аралашып йөрөргә тура килгәйне. Шунда ҡайһы бер күренештәргә иҫем киткәйне. Баҡтиһәң, табында иҫерткес эсемлектәр эсмәйенсә лә, шундай матур итеп һөйләшеп ултырырға була икән. Мин был хәлгә ул саҡта үҙ ғүмеремдә тәүге тапҡыр осрағайным. Халыҡ-ара сәйәсәт, тарих, әҙәбиәт, сәнғәт, милләттәр яҙмышы мәсьәләләре хаҡында бик матур итеп әңгәмәләшеп ултырҙыҡ. Әңгәмәләргә тонды төрөктәр бирҙе. Ошондай көнүҙәк темаларға сәй артында етди әңгәмәләр ҡорған милләттең киләсәге өмөтлө, уның киләсәге яҡты, минеңсә.

Аҡыл менән фекер йөрөткән милләтте бер кем дә еңә алмай. Кемделер иҫертеү - ул иҙеүсе милләттәргә генә, иҙеүсе ҡатламға ғына кәрәк бит ул. Тимәк, берәр кешене йәки халыҡты еңер өсөн уны иҫертергә генә кәрәк. Берәүҙе юҡ итергә теләһәң, эсерәһең һәм был юл менән үҙенден дәғүәсенде юҡҡа сығараһың. Ни өсөн хәҙер чукчалар һәм башҡа төньяҡ халыҡтары юғалып бөтөү сигендә? Сөнки уларҙы иң тәүҙә теге яҡтан американдар йөҙөп килеп, "утлы һыу" менән әүрәтеп, йәнлек тиреләрен алып киткән, был яҡтан уларға "утлы һыуҙы" Рәсәй мәмләкәте алып барған. Бер ғибрәтле тарих бар. Сергеев тигән Өфө воеводаһы баш күтәргән башҡорттарҙы Өфө ҡәлғәһенә бикләй ҙә, уларҙы ныҡ итеп эсерергә ҡуша. Бер аҙна буйына тегеләрҙе эсерергә өйрәтә. Аҙаҡ иҫереп ятҡан башҡорттарҙың аҫтындағы һаламға ут төртә лә, тыштан һауаға пушка менән аттырырға ҡуша.

Иҫерек кешегә бер нәмә лә кәрәкмәй. Уға иртәнсәк торғас, бер нәмә генә кәрәк: нисек булһа ла, ҡайҙан табып булһа ла, баш төҙәтеү. Һуңынан ундай кешене донъя ла, ғаиләһе лә, эше лә, халҡының яҙмышы ла, тарих та, бер нәмә лә ҡыҙыҡһындырмай. Хәҙер ауылдарҙа эскән кешеләрҙе күрһәм, улар тере мәйеттәрҙе хәтерләтә. Улар элекке кеүек күп түгел, әммә шулай ҙа бар. Йәштәрҙең донъя тураһында уйлағаны ҡайҙалыр ситтә, ҡалаларҙа йә Себерҙә эшләп йөрөй. Ауыл халҡының араһында һирәк кенә килеп сыға үҙенең эшен асып, фермерлыҡ йә башҡа эш менән булышыусылар. Диләнкә алып, утын һатып, мал аҫрап йә йәшелсә үҫтереп йәшәүселәр күренә. Пилорам ултыртып, таҡта ярыусылар ҙа бар. Ә былай, башҡорттар йәшәгән урындарҙа сәнәғәт предприятиелары асыу эше менән бер кем дә шөғөлләнмәй. Башҡортостан картаһына күҙ һалһаң, бөтә ауыр һәм еңел сәнәғәт урта һәм көнбайыш Башҡортостанда урынлашҡан. Һуңғы ваҡытта яңы асылғандары ла шул яҡтарҙа. Бәлки, был мәсьәлә сеймал, ресурстар менән бәйлелер? Урал аръяғы башҡорттарын ситкә ебәрмәҫ өсөн, һис юғы, бер аяҡ кейеме тегеү фабрикаһы ла төҙөмәнеләр, исмаһам. Әйткәндәй, был төбәктә мал күпләп көтәләр, тиренән күп нәмә юҡ. Бының өсөн әллә ни аҡыл кәрәкмәй, ҡарар ҡабул итергә лә, инвестор табырға кәрәк.

## Гуманитария түңәрәге

Һуңғы ваҡытта гәзит-журналдарҙың тиражы төшә, уларға яҙылыусылар йылдан-йыл кәмей бара, тип әйтәбеҙ. Кәмей инде, сөнки уларҙың күбеһе милләт, уның алдында торған проблемалар хаҡында бөтөнләй яҙмай. Минеңсә, хәҙерге журналист халыҡтың бөгөнгө аяныслы хәлен асып һалып, унан сығыу юлдарын табырға ярҙам итергә тейеш. Ғөмүмән, үҙ милләтенең яҙмышы, уның киләсәге хаҡында ҡайғыртмаған баҫманың кәрәге бармы икән?

Беҙ һуңғы ваҡытта Аҡмулланың уҡыу хаҡындағы һүҙҙәрен йыш ҡабатлап, балаларыбыҙҙы, йәштәребеҙҙе белем алырға өндәйбеҙ. Әммә махсус йә юғары уҡыу йорттарын тамамлағандан һуң фәҡәт беҙҙең милләт йәштәре үҙҙәренең һайлаған һөнәре буйынса эш таба алмай йөрөй. Сәнәғәттә булһынмы, сауҙаламы, башҡа өлкәләме, башҡа милләт вәкилдәренә эш табыла, беҙҙекеләргә - юҡ. Әйтерһең дә, кемдер берәү беҙҙекеләр өсөн "гуманитария түңәрәге" һыҙған да, тейен кеүек, мәҙәниәт, мәғариф, медицина, әҙәбиәт, журналистика тирәһендә генә өйөрөлөп тик йөрөйбөҙ. Шул уҡ ваҡытта Башҡортостандан ситкә киттеңме, беҙҙекеләр ул түңәрәктән ситкә сығып, бик юғарыға үрләп китә ала. Был ниндәй аңлап булмаҫлыҡ сәйер күренеш ул? Үткәндә генә телевизорҙан Гәүһәр Батталованың Новосибирскийҙа сәнәғәт өлкәһендә ҙур уңыштарға өлгәшкән бер башҡорт кешеһе хаҡында тапшырыуын ҡарап, һоҡланып ултырҙым. Бынан тыш, Мәскәүгә, Санкт-Петербургҡа барып, сәнәғәт өлкәһендә үрләп китеүсе башҡорттарҙың барлығын беләбеҙ. Ни өсөн үҙебеҙҙең республикала үҙебеҙҙең милләт вәкилдәренә сәнәғәт өлкәһендә эш юҡ икән? Был һорауға кем яуап бирә ала? Ҡайҙа юғары вазифалы урын, шунда икенсе милләт вәкиле. Улар кемде эшкә алырға тырыша инде? Әлбиттә, ситтән килтереп булһа ла, үҙҙәренекен. Ә беҙҙекеләр ситкә сығып, ғаиләһенән айырылып, эшләп йөрөй. Себергә элек башҡорттарҙы баш күтәргән өсөн ебәргәндәр, хәҙер улар унда үҙ республикаһында социаль яҡлау булмаған өсөн, үҙ теләге менән китә. Был - башҡорт тормошоноң парадоксаль бер күренеше. Ошо ерҙең төп этник милләт вәкилдәре үҙҙәренең ата-бабалары йәшәгән төбәктә эш менән тәьмин ителергә хаҡлы бит. Иң беренсе нәүбәттә. Уларҙың быға хоҡуғы бар. Был, - бергә берҙе ҡушһаң, ике була, тигән ябай ғына ҡағиҙә кеүек булырға тейеш. Өфөнө генә алайыҡ, унда нисә башҡорт етәксе урындарҙа эшләй икән? Ҡыҙыҡ өсөн генә булһа ла, шуны һанарға ине.

90-сы йылдарҙа Учалыла "Ирәмәл" башҡорт халыҡ үҙәгенең рәйесе инем. Беҙ шул саҡта Учалы тау-байыҡтырыу комбинатының етәксе органдарын махсус саҡырып: "Ни өсөн комбинат етәкселегендә беҙҙең милләттең егет-ҡыҙҙары юҡ кимәлендә?" - тигән һорау-талап ҡуйҙыҡ.

**Әхмәр ҮТӘБАЙ**
**яҙып алды.**

*ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...*

# СҮРӘИ ӘЛ-БӘҠАРА
## Һыйыр сүрәһе
## (өҙөк)

**Рәхимле һәм мәрхәмәтле Алла ярҙамы менән!**

1. Әлиф ләм мим (Йә: Мин, Алла, иң яҡшы белеүсемен).
2. Һис шөбһәһеҙ, Аллаһынан индерелде был Китап,
   Бурысына тоғро мөьмин затҡа ҡулланма итеп.
3. Ул мөьминдәр, күрмәһә лә, ышанырҙар Аллаға,
   Ваҡытында намаҙ уҡыр, тоғро ҡалып йолаға
   Һәм Беҙ белгән байлыҡтарҙан биреп барыр саҙаҡа.
4. (Әй, Мөхәммәт!)
   Ышанырҙар улар һиңә индерелгән Ҡөрьәнгә,
   Ышанырҙар һәр китапҡа - һинән алда кергәнгә,
   Һәм шулай уҡ ышанырҙар: әхирәт бар һәр йәнгә.
5. Ул мөьминдәр - хаҡ Алланан дөрөҫ юл табыусылар,
   Бында - уңыш, әхирәттә - өҫтөнлөк яулаусылар.
6. Аллаһыға һәм Ҡөрьәнгә ышанмаған кафырҙар -
   Иҫкәртеү, иҫкәртмәүеңә битараф ҡалыусылар,-
   Һис тә иман килтермәҫтәр, мөшриҡ булып ҡалырҙар.
7. Алла ундай кафырҙарҙың бикләне йөрәктәрен,
   Һаңғырауға әйләндерҙе уларҙың ҡолаҡтарын,
   Күҙҙәренә пәрҙә ҡороп, һүрелтте сыраҡтарын,
   Татыясаҡ улар ҡаты әхирәт ғазаптарын.
8. Кешеләрҙең араһында бар былай тиеүселәр:
   "Беҙ Аллаға, әхирәткә иман килтереүселәр",
   Тик үҙҙәре түгел дингә итәғәт итеүселәр.
9. Алланы һәм мөьминдәрҙе улар алдарға теләй,
   Ләкин үҙ-үҙҙәрен генә алдағандарын белмәй.
10. Уларҙың йөрәктәрендә ҡурҡаҡлыҡ сире аҙған,
    Алла уларҙың был сирен арттыра бара һаман;
    Уларға ғазаплы яза, һөйләгән өсөн ялған.
11. Уларға әйтелһә: "Ерҙә сығармағыҙ ыҙғыш", - тип,
    Яуаплайҙар:: "Беҙ тыныслыҡ урынлаштырыусы бит".
12. Нәгеҙ шулар - кешеләрҙең араһын бутаусылар,
    Тик фетнә тыуҙырыуҙарын үҙҙәре белмәй улар.
13. Уларға әйтелһә: "Башҡа кешеләр ышанғандай,
    Һеҙ ҙә ышанығыҙ", -улар һорау бирәләр шундай:
    "Беҙ ҙә инанайыҡмы ни, ахмаҡтар инанғандай?"
    Ысынында, улар нәғеҙ үҙҙәре ахмаҡ, йүләр,
    Әммә ахмаҡ икәнлеген үҙҙәре белмәй улар.
14. Мөьминде осратһа, улар: "Иман килтерҙек", - тиҙәр,
    Ә инде ҡалһалар шайтан дуҫтары менән әгәр,
    Әйтәләр: "Беҙ һеҙҙең менән, әлбиттә, һәр саҡ бергә,
    Беҙ бары тик мосолмандан уйлағайныҡ көлөргә".
15. Алла уларҙың үҙҙәрен мәсхәрәгә ҡалдырыр,
    Һуҡыр хәлдә ҡаңғырыуын, аҙашыуын арттырыр.
16. Улар хаҡ юл урынына ялғанды һатып алды,
    Сауҙа табыш килтермәне, ул буш, файҙаһыҙ булды,
    Монафиҡтар үҙҙәре лә юғалтты тура юлды.
17. Ут яғыусы миҫалына оҡшаған улар хәле:
    Ут ләүкеп, уның тирәләй яҡтыртҡас тирә-йүнде,
    Алла утты тартып алып, ҡалдыра ҡара төндө;
    Монафиҡтар ҙа шулай уҡ - күрергә юҡ әмәле.
18. Ҡолаҡтары һаңғырауҙар, телһеҙҙәр һәм һуҡырҙар -
    Аллаға кире ҡайтыуҙан мәңге мәхрүм булырҙар.
19. Йәки күктәге болоттан яуған ҡойма ямғырҙай:
    Ҡараңғы төн, йәшен йәшнәй, күк өҙлөкһөҙ дыһырҙай.
    Был дәһшәтте күреп улар ҡолаҡтарын тығалар,
    Сөнки йәшен уғындағы ут-үлемдән ҡурҡалар.
    Алла шундай кафырҙарҙың булмышын солғап алыр.
20. Йәшен уттары уларҙың күҙҙәрен ҡамаштыра.
    Алға атлай улар, йәшен балҡығанда - яҡтыла,
    Йәшен уты һүнгән саҡта улар туҡталып тора.
    Әгәр ҙә мәгәр теләһә, уларҙы инде Алла
    Ишетеүҙән һәм күреүҙән мәхрүм дә итә ала.
    Ысынлап та, Алла ҡадир, ҡөҙрәтле һәр өлкәлә!
21. Әй, кешеләр!
    Үҙегеҙҙе ерҙә бар ҡылыусыға,
    Һеҙҙән алда булғандарҙы бер саҡ тыуҙырыусыға -
    Раббыға ғибәҙәт ҡылып, һыйынығыҙ һеҙ Уға,
    Ул берҙән-бер сара булыр, бәләнән һаҡланыуға.
22. Алла һеҙгә ерҙең өҫтөн келәмдәй түшәп һалды,
    Күк көмбәҙен башығыҙҙың өҫтөнә бина ҡылды,
    Асмандағы болоттарҙан урғылта яуындарҙы,
    Һеҙгә ризыҡ булһын өсөн һуғара игендәрҙе.
    Һис кемде, һис ниҙе шәриҡ ҡылмағыҙ Аллаһыға,
    Белә тороп, һис бер ҡайҙа тиңдәш юҡлығын Уға.
23. Ҡолобоҙға Беҙ асҡанға булһа әгәр шигегеҙ,
    Һеҙ ошо сүрәгә оҡшаш бер сүрә килтерегеҙ,
    Алланан тыш үҙегеҙгә саҡырығыҙ ярҙамсы,
    Әгәр булһағыҙ ысынлап дөрөҫ юлда тороусы.
24. Бындай сүрәне яҙырға килмәһә ҡулығыҙҙан -
    Ә бит мәңге килмәйсәк ул һеҙҙең хәлегеҙҙән -
    Йәһәннәмдең ялҡынынан һаҡланығыҙ ул саҡта,
    Ул ялҡындың яғыулығы - кешеләр менән таштар.
    Йәһәннәмдең был утына тәғәйен кафыр заттар.
25. Һөйөнсөләгеҙ: Аллаға ихлас инанғандарға,
    Ер йөҙөндә бары изге ғәмәлдәр ҡылғандарға.
    Араһынан шишмә аҡҡан йәннәт баҡсалары бар.
    Төрлө емеш ризыҡ итеп бирелгән саҡта, улар
    Әйтер: "Былар - беҙгә элек бүләк ителгән һыйҙар",
    Ләкин йәннәт ниғмәтенең тәмдәре башҡа булыр,
    Унда уларға бирелер саф, ғиффәтле кәләштәр,
    Бындай һайланмыш кешеләр йәннәттә мәңге йәшәр...

**Шиғри тәржемә авторы - Мәүлит ЯМАЛЕТДИН.**

✓ ***Кисә кис мәлендә ошо тирәлә биш йәшлек ҡыҙ бала юғалды. Беләм, һин вазифаңа ҡағылышлы ла, ҡаныңа һеңешкән ғәҙәт буйынса ла, урманда күп булаһыңдыр, улай-былай шипкерт һиҙелә ҡалһа, мине күҙ уңында тотһаң ине.***






Ҡара көҙ ахырында ғына була торған ифрат йонсоу кистәрҙең береһе. Бар ғаләмде ҡаплап алған томан шул ҡәҙәре ҡуйы, әйтерһең дә, бер мәлгә ер менән күк тоташҡан. Ошондай шыҡһыҙ ваҡытты һанға һуҡмаған һымаҡ, соҡор-саҡырлы шоссе таҫмаһы һыртындағы эреле-ваҡлы күләүектәрҙе ян-яҡҡа сәсрәтә-сәсрәтә, ҙур тиҙлек менән "Нива" машинаһы елә. Руль артындағы етди сырайлы егеттең тулҡынланып торған сөм-ҡара сәстәре, һыҙылып киткән ыҡсым-ҡупшы мыйығы менән килешле генә бөҙрә һаҡалы, бер-береһенә тоташа биреп үҫкән ҡалын ҡаштары былай ҙа матур аҡ йөҙөнә айырата күркәмлек өҫтәй. Ныҡ ҡына шыраулanған әрһеҙ ҡулдар, көсө ташып торған beләк мускулдары беше-ҡалын свитер аҫтынан да яҡшы төҫмөрләнә. Былар барыһы ла егеттең төплө ауыл кешеһе булыуына һәм физик эштән ҡурҡып-өркөп бармауына асыҡ ишара.

Машинаның тәҙрә һөрткөсө ҡойоп яуған ямғыр һыуын көскә һыпырып өлгөрә. Йәш кешенең тәүәккәл дә, бер ни тиклем көсөргәнешле лә ҡарашы оҙайлы яуындарҙан иҙелә башлап, балсыҡ ҡатыш ҡырсынташлы буҡҡаға әйләнгән, урыны-урыны менән йырғыланған тигеҙһеҙ ташлы юлға текәлгән. Уның һәр хәрәкәтендә, хатта ябай ғына һәр ҡыланышында ла үҙ-үҙенә ышаныс һиҙелә. Ошо ышаныс, бара-тора, күңел хозурлығы булып төйнәлә лә, йыр рәүешендә тышҡа урғыла. Хистәргә бирелеп киткән егет танау аҫтынан ғына ятраҡан көйөн мөңрәп бара:

Биҙмәгәндәй йәшәү бәхетенән,
Юл йөрөүҙән мәңге биҙмәм мин...

Иҫке генә бүрәнә күпер ашаһындағы боролошто үтеп, айырсалана киткән ике юл сатына етеүгә, ҡайнап торған томан араһынан, төнгө өрәк ише, хәрбиҙәрҙә генә була торған иркен плащ-палатка ябынған әҙәм пәйҙә булды. Көтөлмәгәнлектән ҡапыл һиҫкәнә биргән "һаҡал" шунда ғына юл ҡырында моңайып торған күк һыҙатлы "Жигули"ҙы шәйләп алды. Шул ҡәҙәре киң салғыйлы плащ эсенән аҡлы-ҡаралы таяҡ тотҡан ҡул килеп сыҡты. "Бынауы, эсендә йәне бар хужа этен дә тышҡа сығармаҫ көндө, ниməһен ҡарап торалыр инде?" - тип уйларға өлгөргән "һаҡал", боролош сигналын ҡабыҙҙы һәм, теләр-теләмәҫ кенә барып, юл ситенә туҡталды ла водитель яғындағы тәҙрәне төшөрҙө. Йылы салон эсенә шунда уҡ үҙе һалҡын, үҙе ытырғаныс-еүеш һауа бәреп инде. Етди йөҙөндә ризаһыҙлыҡ билдәләре сағылып үткән "һаҡал" киң яурындарын йыйырҙы ла, бөтә кәүҙәһе менән һелкенеп ҡуйҙы.

- Тикшереү бүлеге инспекторы капитан Байсалов, - плащлы уң ҡулын ҡолаҡ тирәһенә яҡынлатып алды, - документтарығыҙҙы күрһәтһәгеҙ...

Сәйерһенеп киткән "һаҡал" инспекторға күтәрелеп ҡараны.

- Хәлил? Һин түгелме һуң?!

Ошо көтөлмәгән һорауҙан әллә аптырап киткән, әллә ҡаушай төшкән тегеһе, "һаҡалға" һынаулы ҡараш ташлап, күҙ һирпте лә, ҡыйыуһыҙ ғына:

- Эйе, Хәлил, - тигән булды, - ә мин һеҙҙе танымайым...

- Кәнишне, танымаҫһың! Һин бит, ана, ниндәй ҙур нәшәлник булып киткәнһең, - машина эсендәге ихлас көлдө, - ярай, һыуланып торма, әйҙә, ултыр, эстә һөйләшербеҙ.

Ғәжәпкә ҡалған капитан, инергәмеюҡмы тигәндәй, күшеккән тауыҡ шикелле бөршәйгән килеш бер аҙ тапанып торғандан һуң ғына асылған ишек яғына ыңғайланы. Ул, үҙе менән сирҡаныс һалҡынлыҡ әйҙәп, алғы ултырғысҡа ауҙы ла, тамсылап һыу аҡҡан көләпәрәһен ҡапыл артҡа ташланы һәм шофёр егеткә йәнә бер һынамсыл ҡарап алды. Шулай ҙа һаман сырамыта алманы шикелле: башын сайҡай биреп ҡуйҙы.

- Тә-әк, Аҫылбаев... Аҫылбаев! Һе... Айбулат та баһаң! Ай, шайтан малай! Нисәмә йәй, нисәмә ҡыш, тигән һымаҡ. Һаумы, һабаҡташ! Һаумы, ҡорҙаш! - Йылы ғына ҡосаҡлаштылар. - Һине ни, ҡапыл ғына танырмын да тимә... - тәртип һаҡсыһы ҡулы менән эйәк тирәһенә ишараланы. - Сәнскәкһең.

- Арыу ғына әле, Хәлил дуҫ. Үҙең ни хәлдә? Тапҡанһың, әй, поста торор көнөн... - Айбулаттың кәйефе күтәрелеп киткәндәй булды. - Сис мынауы ҡыптырыңды.

-Бөгөнгө ситуация шулайыраҡҡа әйләнеп китте, ҡалайтаһың, - тип аҡланғандай итте Хәлил. - Теләйһең-теләмәйһең - тормайынса булмай.

- Нимә, тегеләр әйтмешләй, - Айбулат бармағы менән өҫкә күрһәтте, - терр-актмы әллә?

- Юҡ та, улай уҡ түгел, әммә эш ҡатмарлы һәм мөһим...

- Аңлашыла. Ярай, һәр кемдеке кеүек үк, милицияның да үҙ сере, - Айбулат шул рәүешле шаян төрттөрөү менән һөйләнә-һөйләнә "бардачок"ка үрелде лә, пластик стакан менән сыбар этикеткалы шешә сығарҙы. - Берәйҙе кәгәһеңме? Ана, нисек туңғанһың, йылыныр инең.

- Юҡ, әй, әлегә булмай. Эш урынындамын бит. Түрәләрҙең дә ҡайнап торған сағы, - капитан, ныҡ өшөгән булыуға ҡарамаҫтан, итәғәтле генә баш тартты.

- Төшөндөм үә көсләшеп тормайым, - тегеһе шешәне кире урынына һалды ла, ынтыла биреп, артҡы ултырғыстан оло термос алды. Тотоуы ҡулайһыҙ шыйтыҡ һауытҡа боҫорап торған ҡайнар сәй ағыҙып, дуҫына һондо, - быныһынан, моғайын, баш тартмаҫһың.

- Һо-о, бына быныһы шәп! Ҡатҡан һөйәктәрҙе йылытып алайыҡ әле, - капитан кинәнестән хатта усын-усҡа ыуып алды.

Ултырғыс һөйәнгесенә ҡайҡая төшкән Айбулат йәшертен ҡыҙыҡһыныу аша шөрпөлдәтеп сәй һурған Хәлилде күҙәтә. Күҙәтә һәм ҡәнәғәт йылмая. Хәҙер инде унда баяғы етдилегенең эҙе лә ҡалмаған.

- Һин мине ысынлап таныманың, әй, - тип ҡуйҙы ул бер аҙҙан, эҫе стаканды ике усына йомоп ултырған Хәлилгә күҙ ҡыры менән ҡарап, - нүжәли шул хәтлем үҙгәргәнмен?

- Уның ниməһенә аптырарға, нисәмә йылдар үткән, - тип аҡланғандай итте тегеһе, - етмәһә, үҙеңде һаҡал-мыйыҡ баҫып киткән. Үҙгәргәнһең, шайтан, ныҡ үҙгәргәнһең. Олоғайып та киткән һымаҡһың...

- Эйе шул. Күрешмәгәнгә ун бер йыл булып киткән икән дә, - хистәргә бирелә барған Айбулаттың тауышында бойоғоу ҡатыш һағыш саҡҡылары ишетелеп ҡалды. - Ә һин былай әллә ни артыҡ төҫ ташламағанһың. Хеҙмәткә оҙатҡандағы шул Хәлилһең, - тип ҡуйҙы ул бер аҙ һүҙһеҙ ултырғас.

Һүҙ артынан һүҙ ялғанды. Ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә хәтер янсыҡтары аҡтарылып, әллә ҡасанғы һағындырған бала саҡ йылдарына тиклем ҡайтып урарға өлгөрҙө улар. Хәйер, ни эшләп дуҫтар элекке булһын, әле лә, тиҫтә йылдан ашыу дәүер үтһә лә, аралары тамсы ла һыуынмаған, мөнәсәбәттәре лә әүәлгесә сафтан-саф һәм эскерһеҙ.

- Ә һин шул ғүмер ҡайҙарҙа юғалып торҙоң, Айбулат?

- Минең тормош юлы ни, башҡа меңәрләгән ҡәҙимге кешеләрҙеке һымаҡ инде: биш йыл институт, направление, унан мәжбүри отработка. Үҙең беләһең бит беҙҙең системаны. Әле бына күптән түгел генә районға күсерҙеләр. Һунар белгесе итеп. Үҙебеҙсә әйткәндә - охотовед була инде. Ә үҙең? Үҙеңде һуң ниндәй елдәр ташланы милиция сафтарына? Ваҡытында, ошо һөнәремде башҡаһына һис алыштыраһым юҡ, тип анттар биреп бөткән шофёр инең дә баһаң.

- Баранка әйөрөлтөп йөрөнөм-йөрөнөм дә...

- Ялҡыттымы?

- Юҡ, ялыҡманым. Район йәштәр комитетының йүнәлтмәһе менән БДУ-ға барып индем, юрфакка. Шунан, рекомендация буйынса бында, үҙебеҙгә алдылар. Күреп тораһың, генералға етергә әле иртәрәк.

- Һи-и, Хәлил, иҫәнлек-һаулыҡ булғанда уныһы әллә ҡайҙа бармаҫ, - Айбулат дуҫының яурынына еңелсә һуғып алды.

- Әйткәнең килһен, дуҫ, - тегеһенең ауыҙы ҡәнәғәт йырылды.

Көтөлмәгән осрашыу шауҡымынан ныҡ ҡына йөрәкһеп киткән дуҫтар, артабан ни тураһында һөйләшергә икән, тигән һымаҡ, бер аҙ тын ултырҙылар. Һөйләшер һүҙҙәре, ысынлап та, юҡ иҫәбендә лә баһаң. Йән иҙгес тынлыҡты Айбулат боҙҙо:

- Ярай, Хәлил, мин ҡуҙғалайым, юғиһә, үҙем тотҡарланыу етмәгән, һине лә эшеңдән айырам, буғай.

- Зарар юҡ, ғәфү үтенеп булашма, - тегеһе көләмһерәп ҡуйҙы. - Беҙ әле осрашырбыҙ, күңел булғансы һөйләшеп тә ултырырбыҙ.

- Әлбиттә. Алла теләһә.

Машинанан сығып, һауанан өҙләкһеҙ ҡойолған һыу ағымы аҫтына баҫтылар. Һәр осраҡты алдан күрә белеүсе тернәксел Айбулат баш осона оло сатырын йәйеп ебәреүгә уның аҫтына һыйына һалдылар. Ямғыр шәп яуһа ла, инде баяғы кеүек үк көслө түгел ине. Ҡара ҡурғаш ише ауыр һәм бер ваҡытта ла таралмаҫтай күренгән һорғолткөрән болоттар шыйыға башлап, көн һиҙелерлек яҡтыра төшкән төҫлө. Шулай шул, бая ғына биҙрәләп ҡойған яуын хәҙер эс бошорғос быҫҡаҡлауға күскән. Шоссе өҫтөнән, борғоланып-уралып, ялбыр боҫ күтәрелә, күптән түгел генә шаулап аҡҡан йырғанаҡтарҙың, күҙгә күренеп, ғәйрәте ҡайта бара.

-Теге... ни бит әле... һиңә иң кәрәклеһен әйтмәнем дә баһаң, - тәмәке тоҡандыра һалған Хәлил, ауыҙынан күкшел төтөн борхотоп, Айбулатҡа һырыҡты. - Кисә кис мәлендә ошо тирәлә биш йәшлек ҡыҙ бала юғалды. Беләм, һин вазифаңа ҡағылышлы ла, ҡаныңа һеңешкән ғәҙәт буйынса ла, урманда күп булаһыңдыр, улай-былай шипкерт һиҙелә ҡалһа, мине күҙ уңында тотһаң ине, - тип ялбарғандай итте.

- Кәнишне, һиңә лә ярҙам итмәгәс...

Хәлил дуҫының машинаһы номерын, әлеге мәлдәге ваҡытты йәтеш кенә блокнотына теркәне лә, ғәфү үтенгән һымаҡ:

- Шулай кәрәк, әй, - тип ҡуйҙы, - инструкция...

- Аңлайым, - осрашыу шатлығынан көләсләнеп киткән Айбулаттың йөҙө кинәт етдиләнде, - һин үҙ бурысыңды башҡараһың. - Шунан бер аҙ торғас өҫтәп ҡуйҙы: - Нисегерәк килеп сыҡҡан хәл һуң ул?

- Әкәмәт инде. Подъезы алдындағы ағаслыҡтан да ҙур урман күргәне булмаған ҡала кешеһенең өс ҡайын араһында аҙашып барғанлығын яҡшы беләһең бит, бында ла шул осраҡтыр тип уйлайым, - Хәлил тәмәкеһен тәмләп һура-һура һөйләргә тотондо. - Атай кеше сабыйын машинаһында ҡалдырған да, үҙе бәшмәк йыйырға киткән - әйләнеп килеүенә ҡыҙыҡай ғәйеп. Ир, үҙе әйтеүенсә, ҡысҡыра-ҡысҡыра төнө буйына уны эҙләп сыҡҡан. Ҡайҙа ул. Етмәһә, тап төнгә ҡарай бынауы туҡтау белмәҫ ямғыры башланды.

- Дә-ә, - Айбулат кинәт уйсанланып китте, - икеһе генә булғандармы ни?

- Икеһе генә. Бөтөнләй бәлжеп төшкән урыҫ башҡаса аныҡ бер ни ҙә әйтә алмай. Шулай ҙа мин һиҙенәм: атай кеше барыһын да әйтеп бөтмәй һәм нимәнелер йәшерә кеүек...

Ишеткәндәренән ныҡ ҡына әҫәрләнгән Айбулат барыр еренә барып еткәнсе лә, эшендә саҡта ла мәрхәмәтһеҙ көҙгө тәбиғәт ҡосағында яфа сигеп, йәшәү өсөн көрәшкән бот буйлыҡ сабый хаҡында уйланды. Тора-тора ла үҙен шул бала урынына ҡуйып ҡарай, ҡыҙыҡайҙың мөмкинселектәре менән көс кенәһен самалап, уның хәлендә ҡалған булһа, ни ҡылырын, ҡай тарафтарға ыңғайларын күҙалларға тырыша. Әлеге урында, ғөмүмән, ул тирәлә, бәләкәс ҡала ҡыҙы әүрәп тә, ымһынып та китерҙәй артыҡ бер нәмә лә юҡ. Һул ҡулда, оло юлдың аҫҡы яғында, үтеп сыҡҡыһыҙ шырлыҡ та, мөлкөлдәп ятҡан күтерле һаҙлыҡ, ә уң яҡта ҡуйы урманлы Ирәндек бите башлана. Ғүмерендә урман күргәне булмаған бала ундай урындарҙан шикләнер һәм күрәләтә инеп бармаҫ ине. Айбулаттың фекеренсә, бында бер генә вариант ҡала - урлау. Бөгөнгө болғауыр заманда кеше һынлы кешене һарыҡ урынына урлап алып китеүҙе бер тин шайы күрмәйҙәр ҙә баһаң. Атаһы-әсәһенән шыпа айырылып өйрәнмәгән ҡыҙыҡай илап-фәлән юлға сыҡһа...

**(Дауамы бар).**

*✓ Илебеҙҙәге иҡтисади көрсөк хәле арҡаһында кеше хоҡуҡтары күп боҙола. Эш биреүселәр хеҙмәткәрҙәрҙе закондыҙ рәүештә эштән сығарырға маташа, эш хаҡын түләмәй. Был тап-тура ғаилә мөнәсәбәттәренә барып төкәлә.*



ЙӘШЛЕК ЙӘШНӘҮҘӘРЕ



**"Иң яҡшы нәмәләр: танауыңды ҡытыҡлаған һауа, күҙҙәреңдәге нур, аяҡ аҫтыңдағы сәскәләр, һинең ҡулдар башҡарған эштәр һәм һинең алдыңда ятҡан Хәҡиҡәт юлы - барыһы ла һәр ваҡыт һинең менән бергә. Күктән йондоҙҙар эҙләмә, тормоштағы гәҙәти эштәрҙе атҡар. Көндәлек бурыстар һәм икмәк - ул тормоштағы иң яҡшы әйберҙәр", - тип яҙған Роберт Стивенсон. Әңгәмәсем Шолохов исемендәге Мәскәү дәүләт гуманитар университетының Өфөләге филиалы уҡытыусыһы, Башҡортостан Республикаһы Адвокаттар коллегияһы хеҙмәткәре, Ейәнсура һылыуы Айгөл НИЗАМЕТДИНОВА ла тормошҡа етди ҡарашы, аныҡ маҡсаты, хисле уйы булған заттарҙан. Ул үҙ сығышында һайлаған һөнәре, башҡарған хеҙмәте, тормошҡа ҡарата уй-хистәре менән уртаҡлаша. Һүҙ - Айгөлгә:**

# КЕШЕ ХОҠУҠТАРЫ БОҘОЛА ИКӘН,

## мин яҡлаусы роленә инәм

### Уҡытыу эше күңелемә ятты

Теремек, ҡыҙыҡһыныусан бала булараҡ, бәләкәй сағымда ниндәй генә һөнәр эйәһе булырға хыялланманым. Мәктәптә өлкән кластарҙа уҡығанда журналистика өлкәһенә мөкиббән ғашиҡ булып киттем. Халҡымдың тарихына, яҙмышына, мәҙәниәтенә битараф булмаған кеше булараҡ, илемә ошо һөнәр аша хеҙмәт итергә уйланым. Мәктәпте тамамлағас иһә Башҡорт дәүләт университетының Сибай институтына барҙым да күңелемә нығыраҡ яҡын торған юридик факультетты һайланым. Әсәйем миңә бала саҡтан: "Мин һине кешеләргә белем биреүсе итеп күрәм", - ти торғайны. Бишенсе курсты тамамлар алдынан кафедра мөдиренә шәхси һорауҙарым буйынса килдем. Уның ваҡыты тығыҙ булғанлыҡтан, минең ҡағыҙҙарымды тултырғансы, уның урынына дәрес үткәреп торорға тәҡдим итте. Студенттар алдында ун минут сығыш яһауым артабанғы яҙмышымды хәл итте лә ҡуйҙы. Университетты ҡыҙыл дипломға тамамлағас, юрист һөнәре буйынса тәҡдимдәр булһа ла, мин тыуған уҡыу йортомда уҡытырға тороп ҡалдым."Уҡытыусының эш хаҡы бик бәләкәй бит, һин унан ниндәй файҙа алаҫаҡһың", тип әйтһәләр ҙә, йөрәк саҡырыуы булдымы - мин уҡытырға ынтылдым. Сибайҙа институтта тәрбиә эштәре буйынса декан урынбаҫары булып эшләп алдым. Был ҡалала өс йыл ярым эшләгәс (ауыр, фәһемле, ҡыҙыҡлы йылдар булды ул), Өфөгә килдем. Өфө юридик һәм иҡтисад техникумында бер йыл директор урынбаҫары булып эшләнем. Унан һуң Шолохов исемендәге Мәскәү дәүләт гуманитар университеты филиалына юриспруденция кафедраһына эшкә күстем, бер үк ваҡытта йылдан ашыу Башҡорт дәүләт университетында иҡтисад факультетында ла лекциялар уҡыным. Әле БДУ-ла аспирантурала уҡып йөрөйөм.

Студент халҡы ҡайҙа ла студент инде ул. Әммә Сибайҙа студенттар ябайыраҡ, бер ҡатлыраҡ һәм тоғролар. Унда уҡытҡан йылдарҙа студенттар миңә ҙур таяныс булды. Ә Өфө студенттары күберәк логика менән эш итә, ололарса фекер йөрөтә. Сибайҙа күпселек ауылдан килгән балалар булғас, уларҙың йөрәктәре асыҡ, ә өфөнөкөләрҙең аҡылы тәрәнерәк. Хәҙерге студенттар уҡыу менән бер юлы эште лә алып барырға өлгөрә. Быны мин насар сифат тип иҫәпләмәйем, улар бөгөнгө тиҙ темпта барған тормош ағышынан бер тотам да артта ҡалмаҫҡа, тормоштан күберәкте алып ҡалырға тырыша. Тик шуныһы: улар китаптан белем алыуға ҡарағанда, интернетҡа өҫтөнлөк бирә. Быныһы, әлбиттә, көйөнөслө хәл.

### Төп эшем - адвокатлыҡ

Өс йыл уҡытҡандан һуң мин, үҙең практик булмай тороп, студенттарға камил белем биреүе бик ауыр, тигән һығымтаға килдем. Тик уҡыу әсбаптары, журналдар аша теория ғына уҡып белем биреү дөрөҫ тә түгел. Шуның өсөн 2007 йылда имтихандарҙы уңышлы тапшырып, адвокат статусын алдым. Әлеге ваҡытта мин уҡытыу эшен дә алып барам, әммә төп эшем - адвокатура. Уҡытыусы үҙ баһаһын белеп кенә эшен һәүетемсә алып барһа, адвокатлыҡ бик күп йүгереүҙе, етеҙ булыуҙы талап итә.

Кеше хоҡуғы аҙым һайын кем тарафынандыр боҙола. Бигерәк тә бөгөнгө көндә адвокаттар хеҙмәтенә ихтыяж ҙур, сөнки суд эштәрендә яҡлаусыһыҙ бик ауырға тура килә. Берҙән, кешегә мораль яҡтан ярҙам кәрәк, ул үҙен бындай ситуацияларҙа нисек итеп тоторға белмәй. Икенсенән, беҙҙең енәйәт эштәрен ҡараған механизм ҙур бер машина кеүек ул. Кешеләр килмәйҙә ҙә, күҙ йәштәре аша: "Туктатығыҙ был эште, мин гәйепле түгел", - тип ошо "машина"ға ялбаралар. Ә был механизм ҡарап тормай, иҙә лә китә. Шул мәлдә адвокат уға яҡтылыҡ, көс биреүсе, өмөт уятыусы берҙән-бер ышаныс булып тора. Адвокат боҙолған хоҡуҡтарҙы тергеҙеп, кешеләргә тейешле аҡсаларын, абруйҙарын ҡайтарып ҡына ҡалмай, гәҙеллек барлыҡҡа, хоҡуҡҡа, законға, дәүләткә булған ышанысты нығыта. Адвокаттың абруйы һәм ҙур һорау менән ҡулланылыуы уның үҙ эшен намыҫлы итеп башҡарыуына бәйле. Ғөмүмән, адвокат булыу - ул һынау. Һәр кеше менән аралашыу, уның холоҡ үҙенсәлектәренә яраҡлашып алыу ҙур һәләт талап итә. Клиенттың эшен аҙағынаса алып барып еткергәнсе, уға әсәйҙе лә, атайҙы ла алмаштырағың, иң яҡын кешеһенә әүерелләһең, хатта дошманына ла әйләнеүең ихтимал.

Һәр бер мөрәжәғәт иткән кешенең хоҡуғы боҙолған, тип әйтеп булмай. Ул ниндәйҙер кимәлдә хаҡлы, шул уҡ ваҡытта гәйебе лә булырға мөмкин. Әммә адвокаттар араһында шундай ҡанун бар: "Һинең клиентың һәр ваҡыт хаҡлы". Нисек кенә булмаһын, һин үҙ клиентыңдың хоҡуғын яҡларға тейешһең. Шуға ла был эштә аҡса өсөн генә эшләп булмай, ул һинән кешеләрҙе яратыуҙы, сабыр булыуҙы талап итә. Кешеләр төрлө булған кеүек, адвокаттарҙың да төрлөһө бар. Мин шундай серҙе асам: һәр бер адвокат үҙ холҡона тартым кешеләр менән эш итә. Ниндәйҙер йыһан ҡанундары буйынса был шулай килеп сыға.

Мин үҙем граждандар эше буйынса шөғөлләнәм. Бөгөн күпселек ғаилә мөнәсәбәттәре, торлаҡ, мөлкәт мәсьәләләре, хеҙмәт өлкәһендәге һорауҙар менән мөрәжәғәт итәләр. Илебеҙҙәге иҡтисади көрсөк хәле арҡаһында кеше хоҡуҡтары күп боҙола. Эш биреүселәр хеҙмәткәрҙәрҙе закондыҙ рәүештә эштән сығарырға маташа, эш хаҡын түләмәй. Был туп-тура ғаилә мөнәсәбәттәренә барып төкәлә, шуға ла айырылышыуҙар йышая. Никах тарҡатылған ваҡытта мөлкәтте бүлеү төп мәсьәләгә әүерелде. Элегерәк ир менән ҡатын айырылышҡан ваҡытта мөлкәтте үҙ-ара ғына килешеп бүлешһә, бөгөн суд аша закон юлы менән бүлеүҙе мотлаҡ иҫәпләйҙәр. Кредит мәсьәләләре менән мөрәжәғәт итеүселәр бихисап. Күпләп кредит алып, үҙ эштәрен асып ебәргән эшҡыуарҙарҙың бөгөн был аҡсаларын түләй алмау арҡаһында банк менән мөнәсәбәттәре боҙола.

### Көслө, сабыр булырға әсәйем өйрәтте

Минең әсәйем бик аҡыллы, изге күңелле, сабыр, көслө рухлы, тура һүҙле ҡатын-ҡыҙ затынан. Әсәйемә ҡустым менән икебеҙҙе яңғыҙы үҫтерергә тура килде. Ул миңә бәләкәй саҡтан уҡ: "Ҡыҙым, һиңә 18 йәш тулғас, өйҙән ситкә сығып китерһең, һәм тормошта яңғыҙыңа ғына юл ярырға тура киләсәк, мин һинең янында булмаясаҡмын. Шуның өсөн көслө, сабыр булырға өйрән", - тип әйтә торғайны. Мин кескәй саҡтан үҙ һүҙле бала булғанмын. Ул минең ошо холоҡ сифатымды һындырмайынса тәрбиәләй алған. Әсәйемдең ҡасан да булһа минең теләгемә ҡаршы торғанын хәтерләмәйем. Ауыл халҡында өлкәндәрҙе ихтирам итеү тигән көслө ҡанун йәшәй. Бындай һыҙат миндә лә бар. Әммә ҡайһы бер ата-әсәләр ошо яҙылмаған ҡанун менән саманан тыш файҙалана. Баланы баҫалар, уның ихтыярын һындыралар - был дөрөҫ түгел. Бындай балалар тормошта үҙ урынын таба алмай яфалана, белгәнен, уйлағанын да әйтергә көс тапмай, ҡыйыуһыҙ булып үҫә. Әсәйем беҙҙе бер ваҡытта ла артыҡ тыйманы. "Үҙең беләһең, һин аҡыллы бит", тип үҙ ихтыярыбыҙға ҡуйыр, әммә бер үк ваҡытта беҙгә һиҙҙермәй генә ситтән күҙәтер ине. Мин үҙемде үҙ тормошомдоң хужаһы итеп тойоп үҫтем. Әсәйем беҙгә риүәйәттәр, әкиәттәр нигеҙендә аҡыл өйрәтә ине. Шуларҙың береһен һәр саҡ хәтерҙә тотам, башҡаларға һөйләйем. Имеш, йәш киленгә бейеме йылға буйына төшөп, кер сайырға ҡушҡан. Килен кеше керен сайып алып ҡайтһа, бейеме, кереңде таҙармаған, тип кире ебәргән. Шулай өсөнсө тапҡыр бейеме ҡушыуы буйынса кире йылғаға әйләнеп килгәндә генә килен аяҡ кейемен йыумай ҡайтыуын аңлап ҡалған. Ошонан һуң бейеме: "Бына хәҙер кереҫң таҙа булған", - тип арҡаһынан яратып ҡаршы алған, ти. Әсәйебеҙ беҙҙе ошолай ишаралап ҡына тәртипкә өйрәтте һәм шуға ла уның өйрәткәндәре беҙҙең аңыбыҙҙа ныҡлыраҡ һеңеп ҡалды. Мин әле булһа уның яңынанъяңы холоҡ һыҙаттарын күрәм дә хайран ҡалам. Мәҫәлән, әсәйем һыу буйына барһа, һәр ваҡыт йылға буйын, йылға төбөн таҙартырға керешә. Усаҡ яғып, йыйылған сүп-сарын яндырып ҡайта. Йә булмаһа, ялан буйлап һуҡмаҡтан китеп барһа, юлында осраған һәр ташты, һәр арҡыры ятҡан ағасты ситкә алып ташлай башлай. "Әсәй, ниңә улайтаһың ул?" тиһәң, ул: "Артымдан килгән кеше абынмаһын", - ти. Киләсәктә балаларыма әсәйем кеүек тәрбиә бирә алһам, мин ысынлап та ысын әсәй була алырмын, тип уйлайым.

### Ығы-зығынан өҫтөн булыр

Ауыл йәштәренә ҙур ҡала мөхитендә үҙ урыныңды табыу ауырға тура килә. Ауыл йәштәре, бер яҡтан, тыйнаҡ, ҡыйыуһыҙ булһа, икенсе яҡтан, мөмкинлектәре һәм һәләттәре булһа ла, юғарыға ынтылырға баҙнат итмәй. Шул уҡ ваҡытта улар, үҙ маҡсатыма өлгәшәм, тип, эшкә сәмләнеп тотонһа, шул тиклем көслө була ала. Беҙгә ҡыйыу һәм тәүәккәл булырға, үҙ хоҡуғыбыҙҙы белергә һәм шуны яҡлап, үҙ ваҡытында һүҙ әйтергә көс табырға кәрәк.

Мин өсөнсө мең йыллыҡты ҡатын-ҡыҙ осоро, тип уйлайым. Был, бер яҡтан, ҡыҙғаныс кеүек тойолһа ла, икенсе яҡтан, дөрөҫтөр. Һәр бер күренештең үҙ сираты була. Хәҙерге башҡорт ҡыҙ-ҡатыны көслө ихтыярлы, матур ҡиәфәтле, итәғәтле, күркәм холоҡло. Ул йәмғиәттә лә үҙ урынын таба, ғаиләһен дә ҡарай, балаларын да тәрбиәләргә өлгөрә. Ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙағы был көслө сифаттарҙы мин уның яҡындарын ярата, барыһына ла иғтибарын бүлә, ғәфү итә белеүендә күрәм. Бөгөнгө юғары тиҙлектәр заманында көслө булмау мөмкин дә түгелдер. Ошо тиҙлеккә өлгөрәм, тип, янып ҡуйыуың да ихтимал бит әле. Шуға ла хәҙерге заман эске күңел донъяңды байытыуҙы, үҙ-үҙеңә тоғро, үҙеңә ҡарата гәҙел булыуҙы талап итә. Ә үҙеңә иғтибар күрһәтеү өсөн күп тә ваҡыт кәрәкмәй, теләк булыуы ла етә. Кеше тирәяҡтағы күренештәр, уратып алған кешеләр менән һоҡлана икән, тимәк, ул үҙе менән дә һоҡлана белә. Ә инде бер туктауһыҙ алға ҡарай сапһаң, донъя матурлығын күреү генә түгел, үҙеңде лә юғалтып ҡуйыуың. Эшләгән эштәреңдең дә файҙаһы булмай, улар ваҡыт үтеү менән көлгә әйләнәсәк. Кеше тормошон мин оҙон юл менән сағыштырам. Кеше шул юлда китеп барыусы мосафир. Ҡайһы берәүҙәр, нисек итеп насар хәлдәргә тарымаҫҡа, ҡаршылыҡтарға осрамаҫҡа, тип, һәр ваҡыт ҡурҡып йәшәй һәм тик кире күренештәргә генә күрә. Ә бәғзеләр һынауҙарға бирешмәйенсә, алға барыуын дауам итә, тормоштоң үҙен күрергә ынтыла. Мин дә шулай үҙ юлымда тормоштоң матурлығын, кешеләрҙең яҡшы сифаттарын ғына күрергә тырышам. Тормош ығы-зығыһында ваҡ мәшәҡәттәргә иғтибар бирмәй, унда ынйылар күрә белеп, күңел хазинаңа йыйып барып, уны кешеләргә өләшеп бирә белгәндә тормошоңдо мәғәнәле итергә булалыр. Күберәк йылмайырға, яратырға өйрәнергә кәрәк. Беҙ ҙур ҡала шарттарында донъяуи мәшәҡәттәргә сумып, матди ҡиммәттәргә өҫтөнлөк биреп, күңел йорто тураһында онотоп ебәрәбеҙ. Хис-тойғоларға ирек биреүҙән ҡурҡырға ярамай, улар беҙҙең тормошобоҙға йән өрә, биҙәк өҫтәй.

**Шулай итеп...**

**Айгөл бөгөнгө ваҡыт аты туҡтау белмәй алға сапҡан заманда үҙ хоҡуғыңды белеп, тормошҡа ҡыйыу ҡараш, тәүәккәл аҙым менән атларға, шул уҡ ваҡытта бәләкәй генә туҡталыштар яһап, эске донъяңа күҙ һалып алырға, уны рухи аҙыҡ менән туҡландырырға, йөрәк йылыңды, күңел нурыңды кешеләргә таратырға саҡыра. Уңышҡа өлгәшер өсөн, бәхетле булыр өсөн, тормош ҡәҙерен аңлау өсөн.**

**Динара ЯҠШЫБАЕВА яҙып алды.**

✓ *Бөгөн зоопаркка йәнлектәрҙе яратырға өйрәнһен өсөн балаларҙы түгел, ә балаларҙы яратырға өйрәнһен өсөн ҡатын-ҡыҙҙарҙы йөрөтөргә кәрәк.*



*ГОНАҺ ОШО БИТ!*

**Һәр заманда ла, бөтә халыҡтарҙа ла бер ғәйепһеҙ кешене үлтереү ҙур гонаһ һәм иң ауыр енәйәт һанала, енәйәтсегә ҡаты яза бирелә. Тик ни өсөн бөгөн кеше үлтереү ғәҙәти хәл һанала?**

# ТЫУМАҒАН БАЛАНЫ...

## ниңә үлтерәһең, әсә?



Йәш, кейәүгә сыҡҡан, бер балаһы булған һәм етеш кенә йәшәгән танышым икенсегә ауырға ҡалғас, шатлығының сиге булманы. Һуңғы консультацияға барғанында табип уға йөклөлектең иртә осоронда һалҡын тейҙереп ауырыуы һәҙөмтәһендә яралғыға зыян килеүен һәм уның төрлө ауыр сирҙәр менән тыуасағы тураһында белдерә. Табиптың былдай ҡурҡыныс диагнозы буласаҡ әсәне икеләнеүҙәргә дусар итә һәм ул аборт эшләтә.

Төп тәғәйенләнеше һәр сирлене аяҡҡа баҫтырыу булған табип был ҡатында өмөт уятыу урынына, үҙ балаһын үлтереүгә этәрә. Был табипҡа шундай һорау бирергә теләр инем: һеҙ баланың ысынлап та ниндәйҙер сир менән тыуасағына нисек ышандыра алаһығыҙ? Белемегеҙгә таянып, был баланы һеҙ барлыҡҡа килтерҙегеҙме ни? Буласаҡ әсәнең ҡарынына уны һеҙ һалдығыҙмы? Ул ҡарында саҡта һәм тыуғас та һеҙҙең белемегеҙгә таянып үҫәме? Быларҙың барыһына ла Аллаһы Тәғәләнән башҡа бер кемдең дә ҡыҫылышы юҡ!

Изге китабыбыҙ Ҡөрьәндә шулай тип яҙылған: "Юҡһа, уны (Аллаһ) нәмәнән бар ҡылды һуң? Бер тамсы шыйыҡлыҡтан бар ҡылды һәм уға рәүеш бирҙе, үлсәм ҡуйҙы. Һуңынан уның юлын яйлы итте. Унан һуң уны йәнһеҙ итеп, гүргә индерҙе" (Ҡөрьән 80:18-21). Яңыраҡ телевизорҙан үҙ балаларын юғалтҡандан һуң, аҙашҡан антилопа балаһын һыйындырыусы арыҫлан тураһында тапшырыу ҡараным. Бына ҡайҙа ул Алланың мәрхәмәте, уйлап ҡараһаң, арыҫлан антилопа ите менән туҡланыусы йәнлек бит! Әммә ул антилопа балаһын үҙ сабыйын ҡараған кеүек ҡарай, уның янына башҡа йәнлектәрҙе яҡын да юлатмай. Аллаһы Тәғәлә тарафынан һалынған әсәлек инстинкты арыҫланды сит бала тураһында шундай хәстәрлек күреүгә этәрә. Быҙың менән генә был тарих тамамланмай. Бер арыҫлан был антилопа балаһын тотоп ашағас, уны тәрбиәләүсе арыҫлан күҙ йәштәре түгеп илай һәм үҙ ғүмерендә тағы ла биш антилопа балаһын ҡарап үҫтерә. Быңдай ваҡиғаларҙы Аллаһы Тәғәлә беҙ - кешеләр - ниһәйәт уяныһын һәм уйланыһын өсөн тыуҙыралыр. Шундай заман етте: бөгөн зоопаркка йәнлектәрҙе яратырға өйрәнһен өсөн балаларҙы түгел, ә балаларҙы яратырға өйрәнһен өсөн ҡатын-ҡыҙҙарҙы йөрөтөргә кәрәк. Бала былай ҙа Аллаһы Тәғәлә барлыҡҡа килтергән һәр нәмәне ихлас күңел менән ярата. Иҫегеҙгә төшөрөгөҙ әле: һәр ҡыҙ бәләкәй саҡтан ҡурсаҡ менән уйнай, быны уға бер кем дә өйрәтмәй. Ҙурайғас, беҙ күп нәмәне онотабыҙ, йөрәктәребеҙ ташҡа әүерелә.

Ҡатын-ҡыҙ йөрәген Алла балаларға ҡарата йомшағыраҡ һәм мәрхәмәтлерәк итеп яратҡан. Шулай булғас, ниңә улар үҙҙәрен бала үлтерергә хоҡуҡлы тип һанай? Был барыһы ла үҙебеҙҙән кем икәнебеҙҙе, ҡайҙан килеүебеҙҙе һәм ҡайҙа кире ҡайтасағыбыҙҙы онотоуҙан килә.

Аллаһы Тәғәлә Ҡөрьәндә шулай тип әйткән: "Ҡояш бөрөшөп, йондоҙҙар тоноҡланып, тауҙар ҡубарылып... терелəй ергә күмелгән сабый ҡыҙ баланан: "Ни сәбәпле һине шулай ҡылдылар", тип һорар ваҡыт еткәс, ... бына шул саҡта һәр бер кеше үҙенең ҡылғандары менән үҙенә ни әҙерләнгәнен бик яҡшы аңлар" (Ҡөрьән.81:1-14).

Енәйәт эшләр алдынан Аллаһтан һәм Ҡиәмәт көнөнән ҡурҡығыҙ, ул ваҡыт етһә, һеҙ бер нәмәне лә үҙгәртә алмаясаҡһығыҙ. Был ҡурҡыныс енәйәтте яһағандан һуң бөгөн ниндәй генә аҡланыу тапһағыҙ ҙа, Ҡиәмәт көнөндә Аллаһы Тәғәлә һеҙҙе тыңлап тормаясаҡ.

Ҡөрьәндә шулай тиелә: "Эй, бәйғәмбәр! Иманлы ҡатындар килеп: "Аллаһҡа тиңдәштәр уйлап сығармаҫбыҙ, зина эшләмәҫбеҙ, үҙ сабыйҙарыбыҙҙы үлтермәҫбеҙ, ҡулдарыбыҙ менән аяҡтарыбыҙ араһында булғандарҙы ялғанлап башҡа иргә һылтамаҫбыҙ, изгелекле эштәрҙә һинә ҡаршы булмаҫбыҙ, тип ант итһәләр, анттарын ҡабул ит һәм улар өсөн Аллаһтан ярлыҡау һора. Шик юҡтыр, Аллаһ - ярлыҡаусы һәм сикһеҙ мәрхәмәтле" (Ҡөрьән. 60:12).

**Лиана ВӘЛИУЛЛИНА әҙерләне.**

*КИҪӘТӘБЕҘ*

# БЕР ТАПҠЫРҘАН...

## бер нәмә лә булмаймы?

Һуңғы ваҡытта йәштәр, үҫмерҙәр һәм хатта балалар араһында наркоманлыҡ һәм токсикоманлыҡтың күп төрҙәре тарала башланы. Быға тейешенсә тәрбиә алмау, рухи көсһеҙлөк, тормошҡа ҡараштарҙың етлекмәүе, буш ваҡытты файҙалы итеп үткәрә белмәү сәбәпсе.

Үҫмер егет, ҡыҙҙы был ҡаты ауырыуға илтеүсе бер нисә юл бар. Ҡайһы берәүҙәр ошо ҡапҡанға үҙҙәре лә һиҙмәҫтән килеп эләгә. Үҫмерҙәр һәр нәмәне татып белергә теләй һәм шулай итеп "кәйеф" тотоп ҡараған иптәштәренә эйәреп, ул да ағыу тәмләп ҡарарға хәл итә.

Күп осраҡта ҡапҡанға ҡабып өлгөргән йәштәр аңлы рәүештә тиҫтерҙәрен, үҙҙәре кеүектәрҙең һанын арттырыу, ул кешене үҙенә буйһондороу, ниндәйҙер файҙа алыу ниәте менән ошоға уҡ ылыҡтырырға тырыша.

Ә ҡайһы бер үҫмерҙәр наркотиктарҙы сая, ҡыйыу, үҙ аллы, тәжрибәле булып күренергә, ят хистәр татырға теләп ҡуллана башлай. Әммә улар ниндәй ҡаты ҡапҡанға эләгеүҙән башына ла килтермәй әле. Йәш кеше үҙенә ныҡ ышана, "бер тапҡырҙан бер нәмә лә булмаҫ әле" һәм "үҙе теләгән ваҡытта туҡтап ҡала аласаҡ", "тәмләп кенә ҡарайым да, шуның менән бөттө" тип уйлай. Әммә бер башлап ебәрҙеңме...

Аңды томаландырыусы матдәләрҙе ҡулланыу психик һәм физик буйһоноусанлыҡҡа ғына түгел, ә организмдың йәшәү кеүәһен түбәнәйтеүгә, социаль деградацияға ла килтерә. Нәҡ ошо эҙемтәләр кеше һаулығына һәм ғүмеренә ҙур йоғонто яһай ҙа инде. Организмдың наркотик һәм токсик матдәләр менән хроник ағыуланыуы кире ҡайтарып булмаҫлыҡ үҙгәрештәргә, шәхестең мораль яҡтан түбәнәйеүенә килтерә. Һөҙөмтәлә ул кеше бөйөк хистәрҙең береһен дә кисерә алмай, тотанаҡһыҙға әйләнә. Тоғанлыҡ хисен юғалта, кешеләргә ылығып бармай, йыш осраҡтарҙа яҡындарын оятһыҙ рәүештә алдай, киләсәккә яҡты өмөтө һүнә, маҡсаттары юғала.

Ата-әсә балаһының үҙ-үҙен тотошона иғтибарҙы күберәк бүлергә тейеш. Әгәр ҙә үҫмер үҙ-үҙенә бикләнә, ғәҙәти булған һөйләшеп ултырыуҙарҙан ҡаса, ҡараштарын түбәгә текләп, диванда көнө буйы бер нимә лә эшләмәй, донъянан ваз кискән төҫтә, аҡыртып ҡуйылған магнитофон тауышын тыңлап, ләззәтләнеп ята, йәиһә йыш ҡына мәғәнәһеҙ һәм сәбәпһеҙ рәүештә һеҙ ҡушҡан эштәрҙен тап киреһен башҡара, йәшәү мәғәнәһеҙ, ти икән, тимәк, балағыҙҙы ниҙер борсой. Уйлана төшөгөҙ, әммә ул тиклем көйөп ташламағыҙ. Ул саҡта үҙ-үҙенә тамам бикләнгән улығыҙ йә ҡыҙығыҙҙың күңеленә үтеп инеү юлдары ябылыуы ихтимал. Әгәр ҙә балағыҙ көндәр буйы юғалып тора һәм ҡайтыуына унан ниндәйҙер ят еҫ килеүен һиҙһәгеҙ, был наркотик матдәләр ҡулланыуҙың бик етди төҫ алыуын аңлатыуы мөмкин.

Дуҫлыҡты һуҡырҙарса табыныу һәм үҙ фекереңдән ваз кисеү менән яуламайҙар. Әгәр ҙә лидер, "кумир" наркотик ҡуллана икән, тимәк, ул "көслө" исемен йөрөтә генә, ә үҙе ысынында ҡурҡыныс ауыру ҡоло. Дуҫың да ошо юл сатында тора икән, туҡтатырға тырыш! Әммә үҙең уның артынан барып, ҡараңғы упҡынға ҡолап төшөүҙән һаҡлан. Һағыш һәм эс бошоуҙы ысын дуҫтар табып, йә үҙеңдә ҡыҙыҡһындырған эш менән мауығып бөтөрөргә мөмкин. Наркотиктарҙан "Мин уны тәмләргә теләмәйем! Мин уның зыянын беләм!" тиеп, алыҫҡараҡ ҡасырға кәрәк. Ата-әсәләр, балаларының йышыраҡ тәмәке, алкоголле эсемлектәр эрҙамында "тынысланырға", "ял итергә", "күңелен күтәрергә" тырышыуын күреп, уларҙың наркотиктарға юл асыуын аңларға тейеш. Сөнки наркоманлыҡ һәм токсикоманлыҡ - ул насар ғәҙәт кенә түгел, ә кешенең рухи донъяһын һәм һаулығын бөтөрөүсе ауырыу ҙа.



*ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...*

**Әмир ҒҮМӘРОВ:** Наркотиктарҙың беренсе баҫҡысы - ул тәмәке, тиҙәр бит инде. Кеше тәмәке тарта башлай икән, тимәк, ул фани донъяның ауыр ысынбарлығынан аҙға ғына булһа ла ҡотолорға теләп эшләй быны. Тәмәке уны бернисә секундҡа бар ҡыйынлыҡтарҙан азат итһә, унан көслөрәге араҡы булып, кәйеф илендә оҙағыраҡ йөрөтәләр. Әммә кешегә икенсе, бөтөнләй ят донъяла иң оҙайлы ваҡыт булырға булышлыҡ итеүсе сара - ул наркотик. Мин был күренеште кешелек өҫтөнә Хоҙай тарафынан ебәрелгән язалыр тип ҡарайым. Аллаһы Тәғәлә кешегә һынауҙар ебәрә, һин уны еңеп сығырға һәм тура юлдан китергә бурыслыһың. Юғиһә, дөрөҫ юлдан китмәгән өсөн яза татырға тура киләсәк. Мәҫәлән, кемдәр наркоманлыҡҡа йышыраҡ бирелә? Әлбиттә, байҙар. Сөнки уларҙың күпселек өлөшө (барыһы ла тип әйтмәйем) харам нигеҙендә байый. Улар икенсе берәүҙәрҙең хеҙмәт көсөн ҡуллана, алдашыу, урлашыу юлына бара һәм үҙҙәре, йә балалары йөҙөндә яза күрә. Наркотикты һатып алырға аҡсаһы булмаған ярлы уға бирелмәй ҙә. Бына ни өсөн элек Совет осоронда ундай ауырыуҙар йыш күренеш булманы. Сөнки ул ваҡытта йәмғиәттә тигеҙлек бар ине. Ә хәҙер ул юҡ. Уйлауымса, байҙар ошо афәтте гонаһтары өсөн яза итеп таныһа, ярлылар нисек тә булһа алдарына фани донъя килтереп ҡуйған ауырлыҡтарҙан ҡотолорға теләп бирелəләр наркоманлыҡҡа. Хоҙай яратҡан ожмахтай күренгән теге параллель донъяла хыял күгендә осоп йөрөүе шәп тә инде. Кешелә донъя мәшәҡәттәрен онотоу теләге бик ҙур.

Сит ил психологтары үткәргән бер тикшереү барышында кеше иҫәбенә йәшәгәндәрҙең барыһы ла бәхетһеҙ йәшәүе асыҡлана. Тикшереүҙә араҡы, вино заводтары етәкселәре, һатыусылар, инспекторҙар ғаиләләре ҡатнаша. Шулай уҡ барлыҡ байҙарҙың тик 5 проценты ғына үҙ көстәре менән байый, ә ҡалған 95 проценты иһә намыҫтарын аяҡ аҫтына һалып тапаған кешеләр булыуы ла билдәләнә.

Бер генә эш тә эҙһеҙ үтмәй, барыһы өсөн дә түләргә кәрәк. Кешелек бына ошо рәүешле түләйҙер ҙә инде, тип уйлайым.

**Лилиә БАҠЫЕВА, элекке наркоман:** Наркоманлыҡ - ул бер кешенең генә ауырыуы түгел, ул ғаилә ауырыуы. Ғаиләләргә мөнәсәбәттәр кеше анына ҙур йоғонто яһай. Юҡ, тәрбиәлә генә тормай эш, әммә балала донъяға дөрөҫ ҡараш

ТӘҮБӘ



# МИН ЭСЕҮЕМДЕ ТАШЛАНЫМ

## Кемдәргәлер - һабаҡ, кемдәргәлер кәңәш һүҙе булһын...

### 3-сө һабаҡ: "Үтескә алынған шатлыҡ"

Шулай итеп, тәүге көнөм бик күп миҡдарҙа сәй һәм ҡорот һурпаһы эсеп үтте. Туҡтауһыҙ хәрәкәт иттем: апайымдарҙың ихатаһындағы юҡ эште бар итеп, аҙаҡ ауыл янындағы урманға сығып, нисек булһа ла ҡыймылдарға, тирләргә тырыштым. Был көндә бөтөнләй ашағым килмәне, семетеп кенә ҡаптым.

Ғәжәп, әллә көнө буйы аяҡ өҫтөндә булғанғамы, арманһыҙ булып арығанғамы, кис нисек йоҡлап киткәнемде иҫләмәйем. Теге упҡынға ла тәгәрәмәнем, яман төштәр ҙә күрмәнем.

Әммә барыһы ла иртәгәһен, иртә таңдан башланды. Тупһаға сығып баҫыуым булды, ҡот осҡос күңелһеҙ уйҙар солғап алды. Ҡыҙарып ҡалҡып килгән ҡояш та, таңғы һиллек тә, саф һауа ла миңә бер нисек тә тәьҫир итә алмаған кеүек, киреһенсә, был илаһи тынлыҡ күңелгә шик-шөбһә генә өҫтәгәндәй. Ауыл янында йәйелеп ятҡан күл буйын ҡыҙырып килдем. Күл күл инде ул, йоҡлап ятҡан тулҡындары минең эске торошома тап килмәй. Киреһенсә, уның сөмбәйҙәрен күҙ алдыма килтереү күңел юшҡындарымды тәрәнәйтте генә һымаҡ. Урманға ла сыҡтым, аҙаштырырға теләгән һағыштарым, киреһенсә, ҡоштарҙың үҙәк өҙгөс итеп һайрауына ҡушылып, йәнемде ҡанатты.

Аптырағас-алйығас, тирләгәнсе йүгереп ҡарарға булдым. Теге хәсрәтле уйҙарҙың баш мейемде туҡтауһыҙ суҡып тороуы, дөрөҫ һулыш алыуға ҡамасауланы ла, йүгереп китеү менән тыным да ҡыҫылды. Шул саҡ тәмәкене иҫемә төшөрҙөм. Элек шул алдатҡыс төтәткес менән ҡайһы бер ауыр тойғоларҙы баҫа ала инем, әммә был юлы тәмәке ҡабып тоҡандырыуым булды, туҡтауһыҙ сәсәп, күҙ алдарым ҡараңғыланды. Ҡабы-ние менән атып бәрҙем ергә үҙен һәм теүәл дүрт йылға уны ауыҙыма алманым.

"Бер нәмә тураһында ла уйламаҫҡа кәрәк миңә!" тип эстән генә үҙ-үҙемә һүҙ бирәм дә, "уйламаҫҡа кәрәк" тигән уйҙарым теге шик-шөбһәләргә кире алып ҡайта. Был "бахмур синдромы", йәғни баш ауыртыуҙың күңелгә күсеп дауам иткән иң ауыр өлөшө. Эскән кешеләр уны бик яҡшы аңлай. Ә бына баш төҙәтмәйенсә генә ул синдромдан сығып ҡара. Гүйә, үҙеңде бөтә кешелек алдында енәйәт эшләгәндәй тояһың, тойоп ҡына ҡалмайһың, кемдеңдер килеүен, һинең ҡылған гонаһың өсөн яза биреүен көтәһең әле. Эх, йөҙ грамм ғына эсеп ебәр ине лә, барлыҡ ғазаптарыңдан бер юлы арын ине. Һуң, мин быға тиклем гел шулай ҡотола килдем. Ул саҡта синдром баш төҙәтерлек әмәл тапҡансы ғына һүҙыла ине. Аҙаҡ... барыһы ла тигеҙләшә, юйыла ине. Допингты ни тиклем күп өҫтәһәң, шул тиклем рәхәт. Ә иртәгәһен... Юҡ, миңә был юлы улай ярамай, сөнки Хоҙай миңе өсөнсө тапҡыр иҫкәртте бит. Минең йәшәгем килә.

Нисек булһа ла түҙергә кәрәк, йәшәү хаҡына мин барыһын да эшләргә, сабыр булырға бурыслымын. Ә нисек итеп был ауыр уйҙарҙан ҡотолорға һуң? Ҡотолоп булмай! Үҙем теләп, аҡсаға һатып алған ғазабым бит ул. Саҡ ҡына онотолорға иткәндәй, апайым менән сабый, бала саҡтарыбыҙҙағы иң бәхетле мәлдәребеҙҙе иҫләй башлауға, теге хәл-торошом саҡ ҡына сит-кәрәк күскәндәй булды. Ғәжәп, бындай мәлдәрҙә хәтирәләр ярҙамға килә икән. Ә беҙ күп осраҡта уларға вайымһыҙбыҙ. Апайыма мең рәхмәттәр уҡыйым. Йәшлек мәлемдә йөрәгемә уйылған тағы бер онотолмаҫ, ғүмерем буйы күңелемдә йәшәгән тойғом да иҫкә килеп төштө (был хаҡта алдараҡ һөйләрмен әле).

Хәҙерге аҡылым менән ул саҡтағы ғазапланыуҙарымды шулай баһалайым. Һәр кемдең яҙмышы, күрер, кисерер шатлыҡтары һәм ҡайғылары маңлайына яҙыла, тиҙәр. Тимәк, беҙ араҡы эскән саҡта алдағы көндәребеҙҙә күрәсәк һәм кисерәсәк шатлыҡтарыбыҙҙы үтескә алып, үҙебеҙсә күңелләнәбеҙ икән. Шатлыҡ - ул шул уҡ күңел энергияһы, ул икһеҙ-сикһеҙ түгел, кешегә үлсәп кенә бирелә. Эскәндә рәхәт, күңелле, ҡан ҡыҙа, уйнайһың, йырлайһың, бейейһең, осопҡунаһың, башҡа бик күңелле, елле фекерҙәр ҙә килә - һин ораторһың. Иртәгә һенә инде, ни ғәжәптәндер, 180 градусҡа әйләнәһең дә ҡуяһың, энә йотҡан эт кеүек йөрөйһөң. Ислам тәғлимәтенең "Артыҡ шатланырға, артыҡ ҡайғырырға ярамай" тип өйрәтеүе лә шунан киләлер.

Мин 16 йыл хәмер ҡоло булғанмын икән, күңеллелек кисереүгә нәфсемде тыя алмай, алдағы 16 йыллыҡ ғүмеремдә кисерәсәк шатлыҡтарымды үтескә алып торғанмын. Үҙ-үҙемдән шатлығымды урлағанмын була бит был. Үҙемдән генә түгел, шул йылдарҙа башҡаларға өләшә торған шатлығымды ла стакан төбөнә һалып йотҡанмын. Бурысты үҙ-үҙемә һәм башҡаларға кире ҡайтарырға ла кәрәк. Ул арауыҡты шатлыҡ тойғоһо кисермәйенсә нисек үткәрергә һуң? Тәүбәгә килгәндән һуң үткән эс бошорғос шөҡәтһеҙ көндәремде мин тик шулай ғына аңлата алам хәҙер.

**Әхмәр ҮТӘБАЙ.**
**(Дауамы бар).**

тыуҙыра белеү бик мөһим, сөнки ул кеше араһына, урамға сыҡҡас, үҙен тота белергә тейеш. Миңә бына тап ошо сифаттар етмәгәндер, тип уйлайым. Һәм тағы йәмғиәт йоғонтоһо ла көслө бит. Мин, мәҫәлән, наркотикты тәү башлап институтта уҡып йөрөгән сағымда тәмләп ҡараным. Әхирәтемдең егете наркоман ине, беҙ ҡыҙыҡ өсөн генә, наркотик ниндәй була икән, тигән һорауға яуап алыуҙы сәбәп итеп кенә, уға эйәрҙек. Мин алты йыл тирәһе уны һирәк-һаяҡ ҡулланып килдем. Институтты тамамланым, икенсе юғары уҡыу йортона уҡырға индем, эш башланым. Барыһы ла яҡшы ғына килә ине, шунан мин наркотикка ныҡлап ылығып киттем. Һәм тормошомдоң бөтә ыңғай яҡтары юҡҡа сыҡты. Эшемде, уҡыуымды ташланым. Больницала, реабилитацион үҙәктә ятып сыҡтым. Әммә был ғына етешмәүе билдәле, мин алкоголдән арынмағайным әле. Һәм ошо осорҙа аноним наркомандар ойошмаһы хаҡында ишеттем. Яңы таныштарым ярҙамы, үҙемдең тырышлығым менән бына инде бер йыл наркотик ҡулланмайым һәм ун ай тулыһынса алкоголдән дә арындым.

Наркотик ҡулланған осорҙа мин тамам өмөтһөҙлөккә бирелгәйнем. Рухи төшөнкөлөк, донъяның йәмен таба алмау, үҙ теләгең һәм белдегең менән килеп батҡан һаҙлыҡтан сыға алырҙай көсөң булмауын аңлау, үҙ-үҙеңде йәлләү хисе, сараһыҙлыҡтан тағы ла түбәнерәк тәгәрәү - былар барыһы ла һәр наркоман кисергән хистәр. Мин дә уларҙы татыным. Һәм бөгөнгө көндә уларҙан арына алыуыма сикһеҙ шатмын. Ата-әсәмә, дуҫтарыма, тормошҡа ҡарашым үҙгәрҙе. Үҙемде ҡулға алырға өйрәндем.

Файҙаһыҙ һәм маҡсатһыҙ үткәндәремә үкенмәйем. Беләм: ҡасан да булһа мин барыбер ошо юлға баҫыр инем, шул юлды үтеп, кире ҡайта алыуыма шатмын. Наркоман булып үткән йылдарым бөгөнгө көнөмдөң ҡәҙерен белергә, киләсәккә яҡты ҡараштар менән йәшәргә өйрәтте. Әлеге ваҡытта мин яңынан уҡырға инергә, алған иҡтисадсы һөнәрем буйынса эш табырға хыялланам. Минең кеүек элекке наркомандарҙы больницала ятып сығыу менән генә сикләнмәҫкә саҡырам, сөнки кеше наркотикка физик яҡтан ғына түгел, ә психик яҡтан да буйһона. Шуға ла мейене төрлө сүп-сар уйҙарҙан таҙартырға кәрәк.

**Александр ИВАНОВ, элекке наркоман:** Минең наркотиктан тулыһынса арыныуыма ун ай. Яңыраҡ ҡына төҙөүсе булып эшләй башланым, хәҙергә барыһы ла ауыр бирелә. Минең йәштәштәрем күптән инде тормошта үҙ урынын табып бөткән. Бер синыфташым, мәҫәлән, подполковник, икенсеһе - прораб. Уларға ҡарап, минең дә яңы үрҙәргә үрләгем, һөҙөмтәләргә тиҙерәк өлгәшкем килә. Өҫтәүенә, әсәйем бына шул элекке яҡшы дуҫтарым хаҡында һөйләп, күңелгә үрт һала. Ләкин мин аңлайым: барыһы өсөн дә яуап бирергә кәрәк. Һәм әлегә түҙергә тырышам. Был донъяла наркоман булыуҙан да яҡшыраҡ шөғөлдәр бар икән. Мин ул яуыздан арына алыуыма шатмын.

**Сәриә ҒАРИПОВА әҙерләне.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ТОРМОШ ҠАНУНДАРЫ

## Азатлыҡ - ул тормош асылы

**Һин үҙеңде ирекле кеше тип иҫәпләйһеңме? Үҙ тормошоңдоң хужаһы итеп тояһыңмы? Бер ниндәй ҙә сикләүҙәргә ҡарамайынса, алдыңа ҡуйылған маҡсаттарға бара алаһыңмы? Әллә кемдер эштәреңде алып барырға ҡамасаулай, теләгәнеңде эшләй алырлыҡ дәрәжәлә тормошоңа үҙең хужа түгел, тип иҫәпләйһеңме? Ғаиләм йәки етәксем тын алырға ваҡыт бирһә, мин азат була алыр инем, тигән уй башыңа инеп сыҡҡаны бармы?**

Виктор Франкль үҙенең "Кеше тормош асылын эҙләй" тигән китабында нацистар концентрацион лагерындағы кисерештәрен бәйән итә. Ул бер ваҡытта ла үҙен шул ҡот осҡос мәлдәрҙәгеләй ирекле итеп тойғаны булмауын яҙа. Быға ышанырға мөмкинме? Азатлығы тартып алынып, сир, яза һәм үлем янаған ҡаты шарттарҙа йәшәүенә ҡарамаҫтан, Франкль быға бер ваҡытта ла кисермәгән күңел төпкөлөндә йәшеренгән азатлыҡ кисерә.

Виктор Франкль был хәҡиҡәтте иң ҡаты һәм башҡа һыймаҫлыҡ сикләүҙәр булған мөхиттә асҡан. Ул һинең әлеге мәлдә ҡайҙа тороуыңа һәм тышҡы шарттар ни тиклем ҡот осҡос булыуына ҡарамаҫтан, шәхси уй-ҡараш азатлығы барлығын аңлаған.

Азатлыҡ бер кем дә һәм бер ҡасан да идара итә алмай торған әйбер. Беҙ үҙебеҙ, атай-әсәйҙәребеҙ, йәки уҡытыусыларыбыҙ, йәки етәкселәребеҙ теге йәки был тойғолар кисерергә мәжбүр итә, тип, эске азатлығыбыҙҙы тартып алырға юл ҡуябыҙ. Әммә бер кем дә беҙҙе тегеләй йәки былай уйларға йәки тойорға мәжбүр итә алмауына төшөнгәндә, ысынлап та ни тиклем ирекле булыуыбыҙҙы аңлай башлаясаҡбыҙ. Кешеләр ҙә, хәл-ваҡиғалар ҙа бер ҡасан да был хәҡиҡәтте үҙгәртә алмаясаҡ. Тормошҡа ҡарата уйҙарыбыҙ һәм ҡараштарыбыҙ тулыһынса беҙҙән тора - беҙ уларҙы һайлайбыҙ. Виктор Франкль хатта шундай ҡурҡыныс шарттарҙан да ҡиммәтле һабаҡтар алып булыуын һөйләй. Ул был һынауҙар алдында һынып төштөм, нацистар күнергә мәжбүр итте, тип аҡлана ала ине. Әммә быны урынына ул хатта нацистар ҙа уның уйҙары һәм тормошҡа ҡарашы менән идара итә алмауын һәм ниндәй тойғо кисереүҙе үҙе һайлай алыуын аңлаған.

Һин тормошҡа булған кире ҡарашыңдың тышҡы көстәр тәьҫире һөҙөмтәһе булып тороуына ышанаһыңмы? Кемдер һине бер юлда тапанырға мәжбүр иткәне өсөн алға бара алмайым, тип уйлағаның бармы? Әгәр ҙә әргә-тирәләге кешеләр үҙгәрһә, бәхетле була алыр инем, тигән уйҙар һиндә йыш тыуамы? Әллә һин бүтәнсә юл - һәр ваҡиғала тәрәнерәк мәғәнә һәм тик яҡшыны ғына эҙләү юлын һайлайһыңмы?

Беҙ нимә уйларға теләйбеҙ, шуны ирекле рәүештә уйлай алабыҙ, тигән хәҡиҡәтте үҙгәртә алмайбыҙ. Беҙ бары тик шәхси уй-ҡараштарыбыҙ өсөн генә яуаплыбыҙ. Беҙ уларҙы үҙгәртә һәм шуға ярашлы тормошто ҡабул итә алабыҙ. Йәғни йөрәгебеҙҙә азатлыҡты йәшәтәбеҙ икән, уны беҙҙән бер кем дә тартып ала алмай.

**Джон Макс ТЕМПЛТОН.**

*Ә ҺЕҘ БЕЛӘҺЕГЕҘМЕ?*

# БЕР ТАМСЫ ҠАНДА...

## биш миллион тере күҙәнәк

● Ер менән Ҡояштың араһы шундай алыҫлыҡта, был һүнмәй торған сығанаҡ беҙгә йылыны күпме кәрәк, шул тиклем ебәрә. Әгәр ҙә Ер Ҡояштан саҡ ҡына алыҫлашһа ла, беҙ туңып бөтөр, ә инде яҡынайһа - беҙ янған булыр инек.

● Ер күсәре Ҡояшҡа ҡарата 23 градусҡа ауышыу сәбәпле, йыл миҙгелдәре алышып тора. Әгәр ҙә был ауышлыҡ булмаһа, океандарҙың һыу быуы ҡотоптарҙа тупланыр, ә материктар боҙ ҡатлауы менән ҡапланыр ине.

● Беҙҙең йөрәгебеҙ теләһә ниндәй двигателдән дә камилыраҡ һәм йылдар буйына ялһыҙ эшләй. Был камил мотор көнөнә 100000 тапҡыр һуға һәм ижадсы тарафынан бирелгән көстө файҙаланып, тәүлегенә 10 тонна ҡанды ҡыуа. 60 йәш ғүмер һуҙымында был күрһәткес 220000 тоннаға барып етә. Бындай күләмдәге ҡан 7,5 метр радиуслы 100 этажлы өй бейеклегендәге цилиндрҙы тултыра ала. Ҡан йөрөп торған тамырҙарҙың оҙонлоғо 150000 километрға етә, был ара Ер әйләнәһенән 4 тапҡырға ҙурыраҡ. Ҡан тамырҙар буйлап тәнде 13 секундта урап сыға - был Барлыҡҡа килтереүсенең ҡөҙрәтен раҫлаусы йәнә бер дәлил.

● Фән тарафынан бер тамсы ҡанда 5 миллион тере күҙәнәк булыуы, ҡандың 50, бауырҙың 400 функция үтәүе, бөйөрҙәрҙең һәр 5 минут һайын ҡанды тулыһынса таҙартыуы, бер күҙәнәктә булған мәғлүмәттең 46 том китапты тултыра алыуы, кеше мейеһенең иң яҡшы компьютерҙан да йөҙ тапҡырға камилыраҡ булыуы иҫбатланған.

● Ер һауаһыҙ бушлыҡта 12 төрлө хәрәкәт яһай һәм үҙ күсәрендә һәм Ҡояш тирәләй сәғәтенә 100000 километр тиҙлек менән әйләнә; Ҡояш системаһының бер сигенән икенсеһенә тиклем алыҫлыҡ - 10 миллиард километр; беҙҙең Галактикала 100 миллиард шундай Ҡояш системаһы һәм бөтә Йыһанда 200 миллиард шундай Галактика бар; иң яҡын йондоҙға булған ара самолетта 16 миллион йыл иҫәпләнә; шундай йондоҙҙар бар, улар Ҡояштан 10 миллиард тапҡыр ҙурыраҡ һәм 6 секунд эсендә Ҡояш бер йыл буйы биргән тиклем яҡтылыҡ бирә. Был да ғалимдар тарафынан асылған.

● Астрономик күҙәтеүҙәр шуны асыҡланы: тропик йыл 365 көн, 5 сәғәт 48 минут 46 секундҡа тиң. Уның оҙонлоғо үҙгәрешһеҙ түгел. Әммә үҙгәреше әллә ни һиҙелмәй. Бер нисә мең йылға бары тик бер нисә секундҡа ғына үҙгәрә. Ер шарының орбита буйлап хәрәкәте тиҙлеге лә даими түгел. Юлының яртыһын - 21 марттан 23 сентябргә тиклемге өлөшөн (йәйге ярты йыллыҡ осор) - 186 көндә, икенсе яртыһын - 23 сентябрҙән 21 мартҡа тиклемге өлөшөн (ҡышҡы ярты йыллыҡ) 179 көндә үтә. Планетаның йыл һайын Ҡояш тирәләй әйләнеүе Ер шарының йыллыҡ хәрәкәте тип атала. Шуның һөҙөмтәһендә миҙгелдәр үҙгәрә.

● Төньяҡ ярымшарҙа астрономик йәй 21 йәки 22 июндә - йәйге көндөң иң оҙон осоронда тыуа. Был ваҡытта офоҡта Ҡояштың ҡалҡҡан, байыған һәм төшлөктә иң юғары нөктәһе бер нисә көн буйына үҙгәрешһеҙ тора. Астрономик ҡыш төньяҡ ярымшарҙа 22 йәки 23 декабрҙә тыуа. Был осор көндәрҙең иң ҡыҫҡа сағы. Көньяҡ ярымшарҙа быларҙың киреһе күҙәтелә: 22 июндә - астрономик ҡыш, 22-23 декабрҙә астрономик йәй тыуа.

*БАШ ЭШЛӘТМӘК*




*ҺҮҘ АРАҺЫНДА...*

## Теш щеткаһын... кем уйлап тапҡан?



● Компасты Ҡытайҙа әллә ҡасандан уҡ белһәләр ҙә, уны 1190 йылда Европала барлыҡҡа килгән, тип иҫәпләйҙәр.

● 1300 йылда ашаған ваҡытта сәнске ҡуллана башлайҙар. Был идеяны инглиз короле Эдвард I тәҡдим итә. Ул сәнскене яңы һуғыш ҡоралы булараҡ уйлап сығара.

● 1316 йылда яҡындан насар күрә башлаусы оло кешеләргә күҙлектәр уйлап сығарыла. Алыҫтан күрә алмаған кешеләр күҙлектәрҙе тик 1450 йылда ғына файҙалана башлай. Рим императоры Нерон (I быуат) бинокль менән ҡулланған.

● 1490 йылда тәрилкә менән салфетка ҡулланыла башлай. Был француздарға ауыҙҙарын өҫтәл ябыуына һөртмәҫкә мөмкинлек бирә.

● 1570 йылда француз короле испан илсеһенә теш щеткаһы бүләк итә.

● 1644 йылда Торичелли һауа торошон белер өсөн барометр уйлап таба.

● 1492 йылдан, Христофор Колумб Американы асҡан ваҡыттан алып, какао ҡулланыла башлай. Шул ваҡытта ананас, хәҙер күркә тип йөрөтөлгән һинд тауыҡтары, әтәстәре билдәле була.

● 1543 йыл - Ерҙең Ҡояш тирәләй әйләнеүен асалар. Быны Николай Коперник аса, тик уға күптәр ышанмай.

● 1608 йылда Галилей телескоп уйлап сығара. Был Коперниктың асышын иҫбатларға ярҙам итә.

**28-се һандағы сканворд яуаптары: Горизанталь буйынса:** Амплитуда.Тегусигальпа. Напалм. Глист. Ожмах. Гонорар. Набат. Молдаван. Биҫтә. Пиросмани. Толом. Суррогат. Туз. Йыуа. Оят. Ҡайнатма. Китапхана. Аспид. Тултырма. Бысаҡ. Ҡыяр. Мордва. Мәғариф. Европа. Ракета. Назарат. Кура. Намаҙлыҡ. Игрек. Эрудит. Лакмус. Күкрәк. Ырым.

**Вертикаль буйынса:** Трек. Горизонт. Сирек. Тупраҡ. Осмий. Кама. Ыҙма. Тына. Орбита. Алдыр. Алкоголик. Агуна. Франк. Михнәт. Лига. Эсәк. Герб. Педиатр. Уғры. Ультиматум. Риал. Туҡмас. Ҡамыт. Ҡатлам. Урна. Уҙаман. Йүтәл. Дәрсен. Тормоз. Араҡы. Гурт. Реестр. Талант. Азамат.

РУБРИКА ТӘҠДИМ ИТӘМ: "ҠОТЛАЙЫМ!"

# ҠОТЛАУ, ТӘБРИК ҺҮҘҘӘРЕ,

## йәки табында ҡатнашыусыларға ярҙамға

**Төрлө табындарҙа, мәжлестәрҙә ҡатнашырға тура килә. Тәбрикләнергә тейешле кешеләргә матур һүҙҙәр һайлағы килә бит инде. Әммә ул һүҙҙәр гел генә иҫкә төшөп, телгә килеп тә бармай. Йәки былдай һүҙҙәргә оҫталығы ла юҡ ҡайһы берәүҙәрҙең. Шуға ла ундайҙарға ярҙамға, әйҙәгеҙ, "Ҡотлайым!" тигән рубрика асып, үҙебеҙ белгән йә ижад иткән матур тәбрик һүҙҙәрен гәзитебеҙҙә баҫтырайыҡ. Үҙем башлайым. Түбәндәге ҡотлауҙарҙы, оҡшаһа, авторын әйтмәй генә, үҙегеҙ белеп кенә, ҡуллана күрегеҙ.**

• Бүләк итәм бойҙай:
Һаҡлаһын һеҙҙе Хоҙай!

• Бүләк итәм тары:
Өйҙә булһын бары.

• Бүләк итәм кәбеҫтә:
Уңыш булыр һәр эштә.
Ғаиләгеҙгә - биш бала.
Һаҡлаһын һеҙҙе Аллам!

• Бүләк итәм рауза гөлөн:
Күрегеҙ бер-берегеҙҙең күңелен.

•Бүләк итәм сәскәләр гөлләмәһен:
Егет кеше мөхәббәт йәлләмәһен!

• Бүләк итәм дөгө:
Буш булмаһын йөгөн!
Бүләк итәбеҙ һуған:
Хәҙер һеҙ беҙгә туған!

• Бүләк итәм баҡыр аҡса:
Аҡса булһын бер баҡса!

• Ҡағыҙ аҡса бүләк итәм:
Яҡшы кәйеф менән уян иртән!

• Ҡәйнә кеше һәр кисен
Сығарма ҡандала еҫен!
Күбәләк һымаҡ йөрө осоп:
Иҙән йыуып, сепрәк тотоп.
* * *
• Тоҙ һалам мин ашына,
Булыр яңы машина.
Асы аштан кем өркә,
Шул ҡысҡыра - "горько!"
А-сы! А-сы! А-сы!
Был мөхәббәттең башы...

• Беҙҙең унған киленкәй,
Аяғың булһын төклө!
Йәшәгеҙ ҡайғы белмәй,
Алтын туйығыҙға тиклем.

• Килендең аяғы төклө,
Йыл аша йөрө йөклө!
Ун бишкә еткәс булыр ҡәҙер,
Бүләк итерҙәр "Газель"!
Һеҙҙе һаҡлар фәрештә,
Уңыш булыр һәр эштә.
Йондоҙҙар булһа серҙәш,
Мөхәббәт булыр иптәш.
Егет ҡыйыу, ҡыҙ иркә,
Ә беҙ ҡысҡырабыҙ - "горько!"

• Ашағыҙ икмәк,
Йәшәгеҙ күмәк,
Эсегеҙ ҡымыҙ,
Өйҙә булмаһын тығыҙ.
Ә беҙ эсәбеҙ буҙа
Булыр өсөн ҡоҙа.
Әгәр егет ҡыҙҙан ҡурҡһа,
Беҙ ҡысҡырабыҙ - "Горько!"
* * *
• Килен һәм ҡусты!
Һеҙҙең ғаиләгеҙгә шуны
теләйем:
Ерегеҙҙең - ундырышлыһын,
Ямғырҙың - көслөһөн,
Хәбәрҙең - яҡшыһын,
Ағастың - емешлеһен,
Байлыҡтың - етешен,
Ҡыҙығыҙҙың - матурын,
Малайҙың - батырын,
Дуҫтарҙың - тоғроһон,
Мөхәббәттең - ғүмерлеген!
Бәхет һеҙгә!
Ҡәҙерле йәштәребеҙ!
Һеҙгә шуны теләйем:



Иңегеҙгә төшкән ҡыйынлыҡтарҙы еңел үтегеҙ.
Иңегеҙгә тик көсөгөҙ етерлек йөк ятһын.
Индәрегеҙ аҡыллы баштарығыҙҙы йөрөтһөн.
Иңгә-иң терәп ғүмерегеҙҙе үткәрегеҙ!
Иң-иң-иң яҡшы теләктәр менән - беҙ.
* * *
Беҙҙең ҡәҙерлеләребеҙ!
-Һеҙ был көндән сәстәрегеҙҙе-сәскә бәйләнегеҙ. Төйөнөгөҙ ғүмерлеккә булһын!
-Был көндән һеҙгә ҡулды-ҡулға тотоношоп, ғүмер юлын үтергә насип булһын!
-Был көндә балдаҡтар менән алыштығыҙ, ғүмер буйы бер-берегеҙгә тоғролоҡ һаҡлағыҙ!
-Һеҙҙе бәйләгән мөхәббәт ептәре ныҡлы булһын, ул еп ғүмерҙә лә өҙөлмәһен!
Мөхәббәт, сабырлыҡ, муллыҡ һеҙгә!
* * *
Ҡәҙерлеләрҙән дә ҡәҙерлеләребеҙ!
Һеҙ "Тормош" исемендәге кәмәлә йөҙөргә сыҡҡанһығыҙ. Һеҙ шул кәмәнең ике ишкәге. Берегеҙ арттә ҡалһа йәки эшләмәй торһа, кәмә алға китмәй, бер тирәләй урала башлай. Һеҙгә бер темпта шул тормош кәмәһендә мөхәббәт диңгеҙендә маҡсатығыҙға табан йөҙөүегеҙҙе теләйбеҙ! Ыңғай елдәр һеҙгә! Ыңғай эштәр! Ыңғай дуҫтар!
* * *
Беҙҙең ут сәсрәтеп торған матур һәм батыр йәштәр!
Һеҙ был кис уртаҡ ғаилә усағын яндырҙығыҙ.
Был усаҡ йылылыһы һеҙҙе ғүмер буйына йылытһын.
Беҙ килгәндә лә был усаҡ йылылыһын өләшеп тороғоҙ, ҡунаҡтарығыҙҙы йылы ҡаршы алығыҙ!
Һеҙҙе, һеҙҙең тыуасаҡ балаларығыҙҙы был усаҡ йылыһы менән йылытығыҙ!
Йылы ғаилә усағы һеҙгә!
* * *
Ҡустыбыҙ һәм киленебеҙ (Туғаныбыҙ һәм кейәүебеҙ)!
Тормош аҡтан һәм ҡаранан тора. Бына ҡыҙ аҡ күлдәктә, ә егет ҡара костюмда.
-Һеҙгә аҡ юл буйлап атлап, аҡ бәхет табыуығыҙҙы теләйбеҙ.
-Шул уҡ ваҡытта ҡара ыуылдырыҡ ҡына ашап, ҡара кофе эсеп, ҡара дипломат тотоп, ҡара "Мерседес"та елдереп, Ҡара диңгеҙҙә ял итергә барыуығыҙҙы теләйбеҙ.
Ҡара тир түгеп аҡ бәхет табыуығыҙҙы теләйбеҙ һеҙгә!

**Фәнүр ШАҺИЕВ.**
**Учалы районы**
**Иҫке Байрамғол ауылы.**

ӘҘЛӘЙЕМ ҺИНЕ




Юғары белемле, эшләп йөрөгән, етеш донъялы, балалары булмаған 48 йәшлек ир унған, тәрбиәле, төҫкә-башҡа матур ҡатын-ҡыҙ менән менән танышып, ғаилә ҡорорға теләй. Ауыл ерендә йәшәргә риза булған 34-42 йәшлек һылыуҙарҙан яуап көтәм, **8 905 005 70 41** номерына шылтыратырға ла мөмкин.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә әйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# УНЫ БИРӘҮ ҘӘ КҮРМӘГӘН,

## әммә уның менән ҡурҡыталар

Мәктәптәрҙә һәм университеттарҙа уҡығандарыбыҙ - ул белем түгел әле, ә белем алыу ысулына өйрәнеү генә.

**(Ралф Эмерсон).**

Бер быуат йәшәйһең икән - бер быуат уҡы! Ул саҡта һинең, исмаһам, бер нәмә лә белмәүең тураһында әйтергә хоҡуғың буласаҡ.

**(Козьма Прутков).**

Бөгөн ниндәй генә ишек янына килмә, ул автоматик рәүештә асыла; ниндәй генә кешегә яҡын килмә, ул автоматик рәүештә ябыла.

**(Пер Халверсен).**

Йәмәғәтселек фекере иҫке замоктағы өрәк шикелле: уны берәү ҙә күрмәгән, әммә уның менән һәр кемде ҡурҡыталар.

**(Зигмунд Графф).**

Йәмәғәтселек фекере - үҙ фекере булмаған сәйәсмәндәрҙең һуңғы йәшәренеү урыны.

**(Морис Картер).**

Эштәрең ни тиклем насар барған һайын, шул тиклем яҡшыраҡ кейенергә тейешһең.

**(Инглиз мәҡәле).**

Ир-егеттәр ниндәйҙер хәл иткес ҡарарға килер алдынан:"Ни әйтермен?" - тип, ә ҡыҙ-ҡатындар:"Ни кейермен?" -тип борсола, ти.

**(Мадлен де Пюизье).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт:" Ҡарт үҙенең ейәненә бер донъя серен аса:**
**- Һәр кешелә ике бүре араһындағы көрәш алып бара. Бер бүре насарлыҡ яҡлы, ул көнләшеү, эгоизм, алдау кеүек нәмәләр өсөн алыша. Икенсе бүре яҡшылыҡ яҡлы, ул мөхәббәт, өмөт, дөрөҫлөк, изгелеккә өндәй.**
**Малай олатаһының һүҙҙәрен йөрәгенә бик яҡын ала һәм шулай тип һорау һала:**
**- Ә бүреләрҙең ҡайһыһы еңә һуң, олатай?**
**Ҡарт йылмайып яуап бирә:**
**- Ҡайһыһын ашатаһың, шуныһы еңә инде, улым..."**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Динара ЯҠШЫБАЕВА,
Таһир ИШКИНИН.

**Беҙҙең адрес:**
**450005, Өфө ҡалаһы,**
**Революцион урамы, 167/1**
**Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru**
**E-mail: info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**
«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – 50665, 50673 (льготалы)

Тиражы - 5481
Заказ 3022